ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

30-5
март-апрель
(буранай-
алағарай)

2019

№13 (847)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

Иғтибар: яңы хаҡтар! 1 апрелдән июнь аҙағына тиклем республиканың һәр ҡалаһында-ауылында 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 624 һумға, абонент йәшнигенә - 594 һум 06 тингә; Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I - II группа инвалидтары - 563 һум 40 тингә, абонент йәшнигенә - 539 һум 46 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙе матур китаптар менән бүләкләү йолаһын да дауам итәбеҙ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ҡайтыу

6

Шаярта белеү, шаяртыуҙы аңлау…

ул эстән ныҡлы, эстән көслө булыуҙың билдәһе

8-9

Бөрйән йөрәге,

йәки Фәүзиә апай китап яҙҙы

13

Халыҡ шаян беҙҙең

15

ТВ-программа 14

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

МИЛЛИЛЕК ТОЙҒОҺО…

рухи ихтыяж булараҡ нығына

Өфө - Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы, ләкин йылдар үтә тора ҡалабыҙ йөҙө миллилек һыҙаттарын юғалта бара. Был турала бик күп яҙҙыҡ, матур хәбәрҙәр һөйләнек, ниһайәт, хәлдән тайҙыҡ, буғай - был йүнәлештә ниндәй ҙә булһа үҙгәреш, ынтылыш-фәлән күҙгә лә салынмай һәм, күрәһең, салынмаҫ та инде.

Бер яҡтан, быны аңларға ла була: глобалләшеү заманы, тибеҙ, теләйһеңме, юҡмы, милли һыҙат һәм айырымлыҡтар юйыла, бер ҡалыпҡараҡ һалынып, дөйөмләштерелә бара. Ҡала урамдарын сыбарлаусы сит телдә яҙып ҡуйылған магазин, бутик атамаларынан үҙеңде "океан аръяғында" йөрөгәндәй тойоп китәһең. Элегерәк, исмаһам, үҙәк урамдарҙа башҡорт атамалары өсөн тырыша инек, тик хәҙер бизнесмен һәм сауҙа әһелдәренең инглиз-америка атамалары стиленә "һөйөүен" бер ни менән дә туҡтатырлыҡ түгел. Ләкин быны, шөкөр, милли колорит һәм биҙәктәребеҙҙең тормошобоҙҙан юғалыуы тип әйтеүҙән алыҫмын, киреһенсә, халҡыбыҙ күңелендә миллилек тойғоһо бөгөн рухи ихтыяж булараҡ нығына һәм йәшәү рәүешебеҙгә әйләнә бара.

Миллилек тойғоһо иң тәүҙә һәр кемебеҙҙең мәҙәни-рухи, интеллект кимәленә бәйле. Үкенескә, ошоно уҡ объектив йәшәү шарттарыбыҙға ҡарата ла әйтеп булмай. Әлегесә, баш ҡалабыҙ йөҙөн генә алып ҡарайыҡ. Заманса архитектура йәһәтенән үҙенсәлекле өлгөләре менән алдыра алмаған ҡала төҙөлөшөнөң яңы кварталдарында милли-мәҙәнилек тойғоһона күптән урын юҡ һәм ул булманы ла бер ҡасан. Ял, байрам көндәре ғаиләң, күптән күрешмәгән дуҫтарың менән осрашып, серләшеп, башҡорт ризыҡтарын ауыҙ итеп, тәмләп сәй, ҡымыҙ, буҙа менән һыйланып, көй-моңдарыбыҙҙы тыңлап ултырырлыҡ үҙебеҙҙең аулаҡ "Башҡорт йорто"боҙ ҙа юҡ бит, исмаһам! Ашанып ултырыр өсөн генә түгел, әлбиттә. Башҡа кухня өлгөләре менән берлектә башҡорт ризыҡтары ла тәҡдим итеүсе кафе-ресторандар былай ҙа бар ул Өфөлә, шулай ҙа...

Революцион урамының 32-се йортондағы "Башҡорт кухняһы" хеҙмәттәре, мәҫәлән, милли ихтыяжды бөтөнләй ҡәнәғәтләндерерлек түгел: беренсенән, унда күпселек аш-һыу, хатта мосолман былауы ла суҫка итенән әҙерләнә; икенсенән, унда кеше әлегесә ҡапҡылап сығыу өсөн генә инә. Ярай ҙа ултырып тәғәмләнергә урыны булһа: һәр ваҡыт халыҡ ҡымжып тора бында, ҡайһы саҡ энә төртөр урын ҡалмай. Ә "Башҡорт йорто" нисек булырға тейеш һуң? Әйҙәгеҙ, хыялланып алайыҡ. Бәлки, беҙҙең был хыялыбыҙ ниндәйҙер инвесторҙың ҡолағына барып инер.

"Башҡорт йорто - ул ҡәҙимге ашап-эсеү урыны ғына түгел, ә рухи талап һәм ихтыяждарҙы ла ҡандырыусы мәҙәни-мәғариф учреждение булырға тейештер. Мәҫәлән, башҡорт оҫталарының ҡул эштәре: дебет шәл, башҡорт милли кейемдәре һәм биҙәүестәре, үлән-сәйҙәре, бал, ҡаҙылыҡ, йылҡы ите, ҡорот, ҡыҙыл эремсек, талҡан, ҡомалаҡ икмәге һәм башҡа шундай тауарҙар менән ризыҡтарҙан күргәҙмә-сауҙа үҙәге эшләп торһа; башҡа залдарҙа башҡорт телен өйрәнергә теләүселәр уҡый, кемдәрҙер бейергә өйрәнә, милли көрәш секцияһы бар, уҡ-һаҙаҡ, селтәр-ҡашмау, ҡорама эшләргә өйрәтеүсе түңәрәктәр гөрләй, һ.б. Ошонда уҡ ниндәйҙер тамашалар, күренекле шәхестәребеҙ менән осрашыуҙар ҙа булып торһа... Унан һуң, "Башҡорт йорто"ноң архитектураһы ҙур аҡтирмә рәүешен ҡабатларға тейештер. Бәлки, бер нисә ҡатлы булыр ул, сөнки баш ҡаланың бөтөн башҡорт донъяһы өлгөләре ошонда һыйырлыҡ булһын. Һәм, әлбиттә, башҡорт яҙыусылары китаптары ла урын алыр ине бында, моғайын.

(Дауамы 2-се биттә).

АФАРИН!

УҚЫТЫУСЫЛАР…

бәйге тотто

Республикала мәғариф мәсьәләләре иғтибар үҙәгендә һәм иң йыш үткәрелгән саралар ҙа ошо өлкәгә ҡағыла. Ул сараларҙың тәүмаҡсаты шул: йәмғиәттә уҡытыусыларҙың абруйын күтәреү. Ошо маҡсатты күҙҙә тотҡан "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" һәм "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурстары сираттағы еңеүселәрен билдәләне. Йомғаҡлау тантанаһында БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Ленара Иванова, БР мәғариф министры вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Айбулат Хажин, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Данир Ғәйнуллин һәм төрлө мәғариф ведомстволары етәкселәре, ғалимдар ҡатнашты.

(Дауамы 2-се биттә).

(Гөлшат Ғәбитова).

12+

✓ ***Республикабыҙҙың 100 йыллығы уңайынан проспект буйлатып башҡорт милли хәрәкәте лидерҙары, башҡа билдәле шәхестәрҙең портреттарын элеп сыҡҡанда, был реклама щиттарына ҡарағанда отошлораҡ булыр ине.***

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

МИЛЛИЛЕК ТОЙҒОҺО...

рухи ихтыяж булараҡ нығына

(Башы 1-се биттә).

Быныһын нимәнән сығып әйтеүем: Өфө китап магазиндарында башҡорт китабы табырмын, тимә. Быныңөсөн һәр саҡ Октябрь проспектындағы "Китап" магазинына ла йүгереп булмай: кемдер, мәҫәлән, алыҫта йәшәй. Ә бына "Планета" китап сауҙаһы селтәренең магазиндары - аҙым һайын тиерлек, уның ҡарауы, унда башҡорт китаптарын шәм менән эҙләһәң дә тапмаҫһың. Мәҫәлән, Әй урамындағы (68-се йорт) "Планета" магазинына башҡорт яҙыусылары әҫәрҙәрен эҙләп инеүем бушҡа ғына булды. Стеллаждар менән нышып тултырылған ҙур залда "Башҡорт әҙәбиәте" өсөн икеөс кәштәле меҫкен генә шкаф бүленгән, унда, нишләптер, бөгөн популяр яҙыусы булып киткән Г. Яхинаның бер китабы ята. Ленин урамындағы "Белая река" китап йортонда ла шундай хәл икән, ә бына әлеге "Планета"ның "әхирәттәре" - "Читай-город", "Эдвис" кеүек магазиндарҙа иһә башҡорт китабы бөтөнләй юҡ. Исмаһам, Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығы хөрмәтенә яңы сыҡҡан башҡорт китаптарынан бәләкәй генә булһа ла күргәҙмә-кәштә ойошторор ҡуйһалар ҙа күңел булыр ине. Был хаҡта мин Әй урамындағы "Планета"ның "Тәҡдимдәр кенәгәһе"нә ҡаты ғына яҙып та киткәйнем, тағы инеп сығырға, талап итергә тура киләсәк, сөнки сауҙа хеҙмәткәре өсөн, хатта ул китап кеүек рухи ҡиммәттәр менән эш итһә лә, бульвар романдары, детектив һатып, күберәк табыш алыу беренсе урында тора.

Баш ҡалабыҙҙа милли колорит хаҡында башлағайныҡ һүҙҙе. Әйткәндәй, Өфө урамдарында бер миҙгел генә матур бер күренеш булып алды ла, нисек пәйҙә булды - шулай юҡҡа ла сыҡты. Башҡорт яҙыусыларының портреттары менән ижадтарынан ҡанатлы юлдар күңелгә йылылыҡ биреп, туған тел хаҡында күптәрҙең "хәтерен яңыртып" тора ине. Ә бит республикабыҙҙың 100 йыллығы уңайынан проспект буйлатып башҡорт милли хәрәкәте лидерҙары, башҡа билдәле шәхестәрҙең портреттарын, гүзәл Башҡортостаныбыҙҙың тәбиғәт ынйылары күренештәрен элеп сыҡҡанда, был бәйләнсек реклама щиттарына ҡарағанда отошлораҡ та, файҙалыраҡ та булыр ине, сөнки үҙ "мөрйәһенән" арыны күрмәгәндәр үҙҙәре йәшәгән Башҡорт иленең матурлығына, мәңгелегенә ошо рәүешле булһа ла тағы бер инанып ине...

Әйткәндәй, был мәҡәлә яҙылғас, эштән ҡайтышлай тағы һуғылдым әлеге "Планета"ға. Шуныһы ҡыуандырҙы: тәнәҡит ҡабул ителгән. Шул уҡ теге бәләкәй кәштә тороп ҡалһа ла, хәҙер ул апаруҡ киңәйтелгән һәм башҡорт яҙыусыларының байтаҡ әҫәрҙәре теҙеп ҡуйылған: Ғәли Ибраһимовтың "Кинйә" романы, Рәми Ғариповтың "Сыңрау торна" шиғырҙар йыйынтығы, Зәйнәб Биишеваның "Дуҫ булайыҡ" повесы, Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Мирас Иҙелбаев, Таңсулпан Ғарипова, Зөһрә Ҡотлогилдина, Илгизәр Бураҡаев һәм башҡа яҙыусыларҙың китаптары теҙелеп тора. "Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте" дәреслеге, "Башҡорт теленән диктанттар йыйынтығы" ята. Ә бына сифатлы тышлыҡта, башҡортса-русса баҫмала "Урал батыр" эпосын (2 дана) күреү минең өсөн үҙе бер шатлыҡ булды. Унан ары Ришат Рәхимовтың "Ҡурай" дәреслеге лә табылған бит әллә ҡайҙан! Талантлы фоторәссам Флүр Ғазиндың төҫлө альбомы ла бар хатта. Складтарында ятҡан бөтөн "десертты" сығарып һалған түгелме былар? Нисек кенә булмаһын, рәхмәт инде, тик әйткәндән һуң түгел, ә үҙҙәре белеп эшләһендәр ине...

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.

АФАРИН!

УҚЫТЫУСЫЛАР...

бәйге тотто

(Башы 1-се биттә).

"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсы егерме дүртенсе тапҡыр үткәрелә һәм был арауыҡ эсендә хеҙмәте менән республиканың милли мәғарифын үҫтереүгә тос өлөш индергән бихисап тәжрибәле педагогтарҙың исемдәре асылған. Былтыр ҡырҡ биш уҡытыусы үҙ тәжрибәһен күрһәтә алһа, быйыл ҡатнашыусылар һаны илле өскә еткән һәм улар араһында Һарытау, Ырымбур, Силәбе өлкәләре педагогтары ла булыуы уғата ҡыуаныслы. Ғәҙәттәгесә, тәүҙә педагогтар шәхси сайтын эшләне, артабан "Мин - башҡорт, тип танышығыҙ" тигән темаға эссе яҙҙы. Конкурстың оҫталыҡ дәресендә һәм Өфө ҡала мәктәптәрендә дәрестәр үткәреү этабында ла педагогтар һынатманы. "Республика кимәлендә тәүге тапҡыр ҡатнашам, тулҡынланып килгәйнем, әммә дәрес күрһәтеү бер ҙә ауыр булманы. Сөнки мин М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында әҙәбиәт буйынса дәрес алып барҙым, уҡыусылар тап-таҙа башҡортса һөйләшә, предметты яҡшы беләләр һәм белем усағына исем биргән шағирҙың шәхесе тураһында ла белемдәре киң", - тине Әбйәлил районы Т. Кусимов исемендәге гимназия уҡытыусыһы Илгиз Истамғәлин конкурс тураһында фекерҙәрен белдереп.

Ниндәй генә мәсьәләне хәл итергә кәрәк булғанда ла инициатива аҫтан килергә тейеш, тигән ҡараш йәшәй йәмғиәттә. Был мәғариф өлкәһенә лә ҡағыла, шунлыҡтан, йыл да башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары өсөн конкурстың "Милли мәғариф проекты" этабы мотлаҡ үтәлә торғандарҙың береһе. Уның барышында педагогтар актуаль проблеманы хәл итеү юҫығында ғына түгел, киләсәкте күҙаллап, оҙайлы перспективаға ҡаролған проект уйлап табыу, шуны тормошҡа ашырыу юлдарын тәҡдим итеү йәһәтенән дә үҙен күрһәтә ала. "Йыл һайын конкурс шарттары үҙгәрмәһә лә, коллегаларымдың яңынан-яңы идеялар менән килеүе һоҡландыра. "Милли мәғариф проекты" буйынса биш уҡытыусынан торған командаларға бүленеп эшләнек. Беҙҙең төркөм "Рухиәт" тигән проектты тормошҡа ашырырға тәҡдим итте, был уҡытыусыларҙы, башҡорт телен яҡлаусыларҙы һәм һаҡлаусыларҙы, уҡыусыларҙы бергә туплаған Башҡорт теле үҙәге буласаҡ. Уның эшенә БР Мәғариф министрлығы һәм БР Мәғарифты үҫтереү институты ла ҡушылырға тейеш. Үҙәктең айырым бүлектәрендә уҡытыусыларға методик ярҙам күрһәтеү, тыуған яҡты өйрәнеү, башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады, фольклор, тарих буйынса уҡыусыларға ярҙам күрһәтеү кеүек эштәр алып барылыуы мөмкин. Ғөмүмән, Башҡортостанда Башҡорт теле үҙәге булырға тейеш, тигән лозунгыны яңғыраттыҡ", - ти Өфөнөң 7-се мәктәбе уҡытыусыһы Гөлшат Ғәбитова.

Ойоштороусылар ҡуйған төп талаптарҙың береһе - уҡытыусы заман менән бергә атларға тейеш, был йәһәттән уларҙы тикшереп ҡарау өсөн "Мәғариф сәйәсмәндәренең түңәрәк ҡоро" һынауы ҡулайлы. Был юлы фекер алышыуға "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезын ҡаршылап" тигән тема тәҡдим ителде. Башҡортостан уҡытыусылары съезд башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре һанын кәметмәҫкә, телде үҫтереүгә йүнәлтелгән яңы саралар ойошторолоуға булышлыҡ итер, тип өмөтләнһә, күрше өлкәләрҙә йәшәүсе педагогтар үҙҙәренә ярҙам йөҙөнән һөнәри курстар барлыҡҡа килеүен теләй. Мәҫәлән, был юлы конкурста ҡатнашҡан Һарытау өлкәһе Мәксүт ауылынан Рима Биктимерова үҙ инициативаһы менән башланғыс синыф уҡыусыларына туған телдәрен өйрәтә башлағанлығын әйтте. Ә Ырымбур өлкәһенән килгән Ғәлиә Ғәбитова ҡаҙаҡ балаларына башҡорт телен уҡытыуҙың үҙенсәлектәрен аңлатты. Ҡатнашыусылар араһында

✓ *- Быйылғы конкурсанттар ғәжәпләндерҙе: улар араһында 3 фән кандидаты бар, йәғни белемдәре юғары, кеше араһында үҙҙәрен тотоуы, дәрес биреүҙәре лә насар түгел, - ти жюри ағзаһы, педагогика фәндәре кандидаты Вәкил Хажин.*

БЫЛ АЙҘА...

КҮҢЕЛЕ САФТЫҢ ҒӘМӘЛЕ САФ

Ни сана, ни арба мәле - алағарай етте. Тәбиғәттең был осоро оҙон, ялҡытҡыс ҡыштан уяныу мәле, ҡояш сағыуыраҡ ҡыҙҙыра башлай, гөрләүектәр йырлап аға, ҡоштар йылы яҡтан ҡайта, оя хәстәрләй.

Тик был осор яҙғы мәшәкәттәр ҙә алып килгеләй: ҡайҙалыр һыу таша, юлдар өҙөлөп тора, умырзая урынына ҡыш буйына йыйылып ятҡан ҡыйһай, сүп-сар "сәскә ата". Шуға күрә бер аҙ ер һурыға төшкәс тә апрель өмәләре башланып китә: предприятие, ойошма хеҙмәткәрҙәре, уҡыусылар, коммуналь хужалыҡ эшсәндәре йәшәгән, эшләгән участкаларҙа дәррәү таҙартыу, тәртипкә килтереү эштәренә тотоноп китә. Беҙҙең бит ғәҙәт шундай: ҡыш буйы рәхәтләнеп ҡыйлайбыҙ ҙа, яҙ буйы өмәләр үткәреп, таҙалыҡ урынлаштырабыҙ. Тик әҙәми зат барыбер ғәҙәтен ҡыуа: күп тә үтмәй, таҙартылған урындар яңынан сүп-сарға күмелә. Үҙҙәре өмәгә сыҡмай ҡалырға яратыусы, битараф, ялҡауҙарҙың ғына ҡылығы ул йәшәгән урын-ерен ҡыйға күмеү. Һәр кемебеҙ йәшәгән ҡала йорттарында ла, хатта ни бары дүрт фатирҙан торған баҫҡыс майҙансығында йәшәүсе ут күршеләр араһында ла бар ундайҙар. Әйтһәң - әйтеш китә, яҙып элһәң - йыртҡылап ташлайҙар.

Был айҙа Халыҡ-ара мәҙәниәт һәм Экологик белем көндәре (**15**) икеһе бер юлы билдәләнә. Был бер ҙә осраҡлы түгел: тыуған ерен ҡурсалап, йәшәгән еренең именлеген, таҙалығын һаҡлаған белекле, йәғни башланғыс кимәлдә булһа ла экологик белемгә эйә кешелә генә мәҙәнилек сифаттарын күрергә була. Экологик "һаңрау һәм һуҡырҙар" ҙа осрай аҙым һайын. Урамдан үтеп барышлай, тәмәке төпсөгөн йә һыра һауытын ырғытып китеү бер ни түгел ундайҙарға. Ғаиләнең дә, мәктәптең дә тәрбиә көсө етмәгән белекһеҙҙәрҙе аҡсалата яза саралары менән генә аҡылға ултыртып булыр ине лә, тик ошоға тиклем мөхиткә зыян килтергән бер генә әҙәмдең дә яза-ға тарттырылғанын ишеткән-күргән юҡ. Ә инде дөйөмләштереберәк фекер йөрөткәндә, беҙ бөтәбеҙ ҙә сүп-сар "етештереүсе монстрҙар". Рәсәйҙә генә лә бер кеше йылына яҡынса 300 кг йәғни 1,5 кубометр сүп-сар "етештерә" икән. Был әле бары торлаҡ секторына ҡағыла. Тағы бер нисә фәһемле мәғлүмәт: ҡағыҙ сүп-сар ике йыл буйы сереһә, ҡалай банкаларға бының өсөн - 100 йыл, быяла сүп-сар өсөн - 1000, пластик өсөн - 200-ҙән алып 1000 йылғаса ваҡыт талап ителә. Ә бит йыл һайын 4,5 миллиард тонна самаһы көнкүреш ҡалдыҡтары ташлана. Бөгөнгө көндә Рәсәйҙең сүп-сар полигондарында 30 миллиардлап ҡалдыҡ тупланған. Һәм ул йылдан-йыл арта бара. Уны ҡайҙа итергә? Яндырырға ярамай: органик, пластик, электротехник һәм химик ҡалдыҡтарҙан торған ҡаты көнкүреш сүп-сары яныуҙан ағыулы ысҡалаға, газ һәм һөрөмгә тарҡала һәм мөхитте тағы ла нығыраҡ бысрата. Быйыл 1 ғинуарҙан старт алған сүп-сар реформаһының төп маҡсаты - экология көсөргәнешен бер аҙға булһа ла кәметеү. Реформаға ярашлы, илдә сүп-сарҙы йыйыу, ташыу, сорттарға айырып, икенсел эшкәртеү буйынса берҙәм система булдырыла. Бының өсөн, әлбиттә, түләргә кәрәк булһа ла, ризаһыҙлыҡ белдереүселәр юҡтыр. Ни өсөн тигәндә, былай ҙа яҡшы аңлашыла: "Спецавтохозяйство" машинаһы йортобоҙ янына бер көн һуғылмай китһә лә, тирә-йүнебеҙ ҡот осҡос хәлгә төшә. Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбировтың экология, тәртип һәм таҙалыҡ мәсьәләләренә ҡарата бик талапсан булыуын беләбеҙ. Әле лә яңыраҡ ҡына, Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ эшсәндәре көнөнә арналған сарала ул тағы шулай тип белдерҙе: "Әйҙәгеҙ, бергәләп республикала генераль йыйыштырыу үткәрәйек. Ҡалаларыбыҙ, ҡасабаларыбыҙ һәм биләмәләребеҙ ныҡ таҙа булырға тейеш". Мәсьәлә юғары кимәлдә ҡуйыла һәм был хаҡта ҡабат-ҡабат иҫкә төшөрөлә икән, урындарҙа муниципалитеттар идеяны әлә һалып алырға, артабан байытырға, үҫтерергә һәм кисекмәҫтән тормошҡа ашырырға тейеш. Иң мөһиме - беҙ эшләрбеҙ ул, йыл да өмәләр үтеп тора, тик ошо эштең аҙағы хаҡында уйланырға ла кәрәктер, сөнки бөтәбеҙгә лә мәғлүм: таҙартып китеүең була, бер нисә көндән яңынан ҡый баҫҡан шул уҡ урынды танырмын, тимә. Ана шуны эшләгән тәрбиәһеҙҙәргә ҡарата тәьҫирле саралар хаҡында уйларға ине. Әлбиттә, уларҙың һәр береһен ҡулынан тотоп алып булмай, ләкин йәмғиәтебеҙҙә шундай күренештәргә түҙеп торғоһоҙ мөнәсәбәт һәм хатта тотолғандарына яза саралары булдырыу мөмкиндер, моғайын. Быныһы инде күп йәһәттән күрһәтмәне башҡарыуҙа төп ойошторосылар - муниципалитет чиновниктарының да эшлеклелегенә бәйле.

Шулай итеп, "Был айҙа..."ның бер генә темаға - сафланыу, таҙарыныу мәсьәләһенә бағышланыуы бер ҙә ғәжәп түгелдер, сөнки яҙ - ул үҙе үк яңырыу, иҫкенән һәм иҫкесә фекерләүҙән ҡотолоу, оҙон ҡышҡы "йоҡо"нан уяныу мәле бит. Алағарайҙың башҡа мөһим иҫтәлекле көндәрен дә хәтер янсығына һалып ҡуяйыҡ. Көлкө көнө, шулай уҡ Халыҡ-ара ҡоштар (**1**), Халыҡтарҙың берләшеү, шулай уҡ Халыҡ-ара балалар китабы (**2**), Веб-мастер һәм дә Бөтөн донъя мультфильмдар (**4**), Бөтөн донъя өҫтәл тенниһы (**6**), Геолог һәм Һыу аҫты хеҙмәтендә һәләк булғандарҙы иҫкә алыу, шулай уҡ Бөтөн донъя сәләмәтлек (**7**), Космонавтика (**12**), Меценат һәм мәрхәмәтлек (**13**), Халыҡ-ара мәҙәниәт һәм Экологик белем (**15**), Совет янғын һағы ойоштороло (**17**), Халыҡ-ара һәйкәлдәр һәм тарихи урындар (**18**), Рәсәй полиграфияһы, Умырзая көндәре (**19**), Халыҡ-ара цирк, Донор көндәре (**20**), Урындағы үҙидаралыҡ, Бөтөн донъя фән (**21**), Халыҡ-ара Ер-Әсә (**22**), Бөтөн донъя китап һәм автор хоҡуғы (**23**), Йәштәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек (**24**), Радиация һәләкәттәрендә вафат булғандарҙы иҫкә алыу (**26**), Химия хәүефһеҙлеге, Бөтөн донъя хеҙмәтте һаҡлау (**28**), Халыҡ-ара бейеү (**29**), Рәсәй янғын һағы (**30**) көндәре билдәләнә.

Алағарайҙа тыуғандар:

2 - драматург, прозаик, публицист **Вил Ғүмәровтың** тыуыуына **- 70 йыл** (1949-1994).

7 - совет партия һәм дәүләт эшмәкәре, 1930-1937 йылдарҙа БАССР Халыҡ комиссарҙары советы рәйесе **Зиннәтулла Булашевтың** тыуыуына **- 125 йыл** (1894-1938).

- дәүләт эшмәкәре, яҙыусы, иҡтисад фәндәре кандидаты, 1967 йылдан БАССР Министрҙар Советы рәйесе урынбаҫары, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ленин, II дәрәжә Ватан һуғышы , "Почет билдәһе" ордендары кавалеры **Рамаҙан Өмөтбаевтың** тыуыуына - **95 йыл** (1924-1997).

8 - Рәсәй Фәндәр академияһының мөхбир-ағзаһы, физика-математика фәндәре докторы, профессор **Марат Илһамовҡа - 85 йәш** (1934).

22 - философия фәндәре кандидаты, журналист, яҙыусы, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, подполковник **Рамаҙан Ҡотошовҡа - 95 йәш** (1924).

24 - режиссер, А. Мөбәрәков исемендәге Сибай драма театрының художество етәксеһе, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Сибай ҡалаһының почетлы гражданы **Дамир Ғәлимовҡа - 75 йәш** (1944).

25 - дәүләт эшмәкәре, яҙыусы, журналист, 1992 йылдан "Китап" нәшриәте директоры, 1994-1998 йылдарҙа БР матбуғат һәм киң мәғлүмәт министры, Халыҡ-ара төркиҙәр академияһы академигы, З. Биишева исемендәге премия, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Ғәлим Хисамовҡа - 70 йәш** (1949).

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Ярыш һөҙөмтәләре буйынса "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсының төп еңеүсеһе тип Өфө ҡалаһының 7-се мәктәбе уҡытыусыһы Гөлшат Ғәбитова тип табылды. Межгорье ҡалаһының 2-се мәктәбе уҡытыусыһы Гөлминур Хәйбуллина, Ишембай районы Тимашевка ауылы мәктәбенән Гөлназ Хәлиуллина, Нефтекама ҡалаһының 1-се гимназияһынан Роза Хөснуллина һәм Белорет районының Я. Хамматов исемендәге Башҡорт гимназияһынан Сәриә Ҡаһарманова һөнәри конкурс лауреаты булды. "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы-2019" конкурсының төп еңеүсеһе исемен Өфө ҡалаһы А. Гайдар исемендәге 47-се гимназияның иҡтисад уҡытыусыһы һәм уҡытыутәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары Ирина Хисмәтуллина яуланы. "Рус теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2019" конкурсында Туймазы районы Собханғол ауылы мәктәбенән Елена Баҡыева, "Башҡортостандың татар теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2019" конкурсында Дүртөйлө районы Өсбүлә ауылы мәктәбенән Айгөл Фәрхетдинова, "Йәш уҡытыусы-2019" конкурсында Өфөнөң 160-сы лицейы һынлы сәнғәт уҡытыусыһы Ангелина Тимирова беренсе урын алды. М. Аҡмулла исемендәге БДПУ булдырған Сухомлинский исемендәге миҙал Әбйәлил районы Асҡар ауылы Т. Кусимов исемендәге гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Илгиз Истамғәлин менән Баймаҡ ҡалаһының 2-се мәктәбенән тарих һәм йәмғиәтте өйрәнеү уҡытыусыһы Әлфиә Байрамғоловаға тапшырылды.

Сәриә ҒАРИПОВА.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Асҡар Абдразаҡов Башҡортостан Башлығының мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса кәңәшсеһе итеп тәғәйенләнде. Радий Хәбиров тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Документҡа яраш-лы, Асҡар Абдразаҡов йәмәғәт башланғыстарында эшләй. Асҡар Әмир улы Абдразаҡов - Рәсәйҙең опера йырсыһы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Мария театры солисы. 2010-2011 йылдарҙа республиканың мәҙәниәт министры булды.

✓ Ағиҙел һәм Урал йылғалары бассейндарының боҙҙан уртаса күп йыллыҡ күрһәткестәрҙән 2-3 көнгә иртәрәк әрселеүе көтөлә. Төньяҡ-көнсығышта йылғалар - 12-15 апрелдә, далала - апрелдең тәүге декадаһында, тауҙарҙа - 6-15 апрелдә, Урал аръяғында 6-11 апрелдә асыла. Өфө янындағы Ағиҙел йылғаһында боҙ китеүе 2-8 апрелдә көтөлә. Йылғаларҙың максималь кимәле уртаса күп йыллыҡ кимәлдә йәки 100 сантиметрға кәмерәк булыуы көтөлә.

✓ Рәсәйҙә һыуыҡта балаларҙы йәмәғәт транспортынан төшөрөп ҡалдырыуҙы тыйған закон ҡабул итәләр. Был башланғыс менән "Берҙәм Рәсәй" депутаттары сығыш яһаны. Транспорт министрлығы әҙерләгән закон проекты хөкүмәттә ҡарала. Һалҡын көндә 16 йәшкә тиклемге билетһыҙ балаларҙы транспорттан ҡыуып сығарырға ярамай, өҫтәүенә уның ата-әсәһе административ штраф түләргә тейеш.

✓ Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры "Башҡорт туйы" спектаклен әҙерләй. Ул Башҡортостан ойошторолоуҙың 100 йыллығына һәм башҡорт драматургияһына нигеҙ һалған Мөхәмәтша Буранғоловтың тыуыуына 130 йыл тулыуға арнала. Премьера 18 һәм 19 апрелдә уҙа. Ҡуйыусы режиссер - Азат Йыһаншин, ҡуйыусы рәссам - Даян Тувалев, костюмдар буйынса рәссам - Айгөл Байрамғолова, хореограф - Сулпан Асҡарова, композитор - Илшат Яхин.

✓ Башҡортостанда чиновниктарҙың уртаса хеҙмәт хаҡы 2018 йылда 57 099 һум тәшкил иткән. Муниципалитеттарҙа саҡ ҡына аҙыраҡ - 42 429 һум. Ошо уҡ ваҡытта республикала халыҡтың уртаса эш хаҡы 38 637 һум булған. Был мәғлүмәттәрҙе Росстат белгестәре иғлан итте. Һуңғы йылда башҡарма власть органдары хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы халыҡтыҡына ҡарағанда ике тапҡырға тиҙерәк артҡан.

✓ *"Берҙәм Рәсәй" праймеризына Радий Хәбировтың конкуренттары булып Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров, Күмертау хакимиәте башлығы Борис Беляев һәм "Рәсәй терәге"нең төбәк бүлексәһе етәксеһе Ләйсән Николаева сығыш яһай.*

ҠЫҪҠАСА

КӨНЭЛГӘРЕ..

тауыш биреп була

✓ **"Берҙәм Рәсәй" сәйәси советының киңәйтелгән ултырышында партиянан Башҡортостан Башлығы вазифаһына күрһәтеү өсөн кандидатуралар буйынса алдан тауыш биреү башланды.** Партияның төбәк башҡарма комитеты етәксеһе Рөстәм Әхмәҙинуров республика халҡы араһында 70 процент ышаныс рейтингына эйә булған Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың кандидатураһын тәҡдим итте. "Берҙәм Рәсәй" праймеризына Радий Хәбировтың конкуренттары булып Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров, Күмертау хакимиәте башлығы Борис Беляев һәм "Рәсәй терәге"нең төбәк бүлексәһе етәксеһе Ләйсән Николаева сығыш яһай. Праймеризда ҡатнашыу өсөн кандидаттарҙың тулы исемлеге 11 апрелдә сәйәси совет ултырышында раҫлана. Алдан тауыш биреү көнө 26 майға билдәләнгән.

✓ **9-14 июлдә Халыҡ-ара Олимпия комитеты ярҙамында Өфөлә Халыҡ-ара Йәйге балалар уйындары уҙасаҡ.** Башҡортостандың баш ҡалаһы әлегә Ҡышҡы һәм Йәйге уйындарҙы ҡабул иткән берҙән-бер Рәсәй ҡалаһы булып тора. Сара барышында төрлө илдәрҙән килгән 1650 спортсыны, шулай уҡ рәсми делегацияларҙың 200 вәкилен урынлаштырыу планлаштырыла. Әле барлыҡ ҡитғаларҙың 30 иленән 70-тән ашыу команда ҡатнашырға ғариза биргән. Март урталарында Өфөгә Халыҡ-ара Балалар уйындарының генераль секретары Ричард Смит килеп, ҡатнашыусыларҙың йәшәйәсәк урындары менән танышты һәм әҙерлектең юғары кимәлдә булыуын билдәләне. Бынан тыш, Ричард Смит ярыштар буласаҡ объекттарҙы ла ҡараны. Ҡамышлы урамындағы Спорт әҙерлеге үҙәгендәге төҙөлөш эштәрен дә юғары баһаланы. Тиҙҙән баш ҡалала чемпиондар әҙерләү өсөн барлыҡ шарттар булған яңы үҙенсәлекле спорт объекты сафҡа инәсәк.

✓ **Рәсәй Гидрометеорология үҙәге апрелдән сентябргә тиклем илдәге һауа торошо һәм яуым-төшөм хаҡында күҙаллау баҫтырып сығарҙы.** Синоптиктар мәғлүмәте буйынса, Рәсәйҙә яҙ - аномаль йылы, йәй - уртаса, йәйҙең тәүге көндәре һалҡынса һәм ямғырлы була. "Быйыл йәй аномаль эҫелек көтмәйбеҙ, шуға ла ҙур урман янғындары фаразланмай. Бойҙайҙың уңышы былтырғынан насарыраҡ була. Илдә йәйҙең уҙған һәм элекке йылдарға ҡарағанда һалҡынсараҡ, ләкин норманан саҡ ҡына йылыраҡ булыуы көтөлә. Ә бына сентябрь йылы һәм ҡояшлы көндәр менән ҡыуандырыр", - ти Гидрометүҙәк директоры Роман Вильфанд. Фаразға ярашлы, апрелдә Башҡортостанда һауа температураһы нормаға ярашлы була (норма +3, +5 градус тәшкил итә). Майҙа ла күрһәткестәр ғәҙәттәгенән күтәрелмәй: 10-14 градус йылы. Июндә температура нормаға ярашлы була, республиканың көньяғында ғәҙәттәгенән эҫерәк. Йәйҙең тәүге айы өсөн норма 16-18 градус тәшкил итә. Июлдә лә температура нормаға ярашлы була: 17-20 градус. Яуым-төшөмдөң ғәҙәттәгегә ҡарағанда күберәк булыуы ихтимал. Августа һауа температураһы - 14-18 градус.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

ЙОМҒАҠ ЯҺАЛДЫ

Башҡортостан Хөкүмәте Йортонда республиканың 2018 йылдағы социаль-иҡтисади үҫешенә йомғаҡ яһанылар һәм төбәктең 2024 йылға тиклемге үҫеш өҫтөнлөктәрен билдәләнеләр.

"Дөйөм алғанда, беҙҙә төп күрһәткестәр уртаса, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Иҡтисад 1 процентҡа үҫкән. Тулайым төбәк продукты 1,5 триллион һумға тиерлек еткән. Сәнәғәт плюс 3,4 процент күрһәткән, беҙ ошо һандар менән ғорурлана алабыҙ. Индустриаль яҡтан үҫешкән ун төбәк иҫәбендә нығлы урын алдыҡ. Тышҡы сауҙа 6,6 процент өҫтәгән, экспорт 2 процентҡа артҡан. Дөйөм алғанда, ауыл хужалығы тотороҡло ҡала. Етештереү күләме 1 процентҡа кәмегән - был миҙгелгә бәйле. Ваҡлап һатыу әйләнеше 2,6 проценттан артып, 1 триллион һумға яҡынлашҡан. 25 йыл эсендә тәүге тапҡыр эшһеҙлек 5 процентҡа түбәнәйгән - был да мөһим факт". Төбәк етәксеһе һүҙҙәренсә, әлеге ваҡытта төҙөлөш тармағы һәм инвестиция өлкәһе үҫеше темпының кәмеүе республика үҫешен тотҡарлай. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - Хөкүмәт Аппараты етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Илшат Тажетдинов билдәләүенсә, 2018 йыл йомғаҡтары буйынса төбәк төҙөлөш һәм торлаҡты сафҡа индереү, инвестициялар, ауыл хужалығы, халыҡтың реаль ҡулланырлыҡ аҡсалата килеме буйынса планды үтәмәгән. Федераль Хөкүмәт күрһәтмәһенә ярашлы, республика алдында 2024 йылға иҡтисадҡа аҡса һалыуҙың хәҙерге күләмен икеләтә арттырыу бурысы тора. Радий Хәбиров бурыстарҙың күп, ләкин ирешерлек булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

ҠЫРҒЫҘСТАНДА

Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Рәсәй делегацияһы составында VIII "Стратегик партнёрлыҡтың һәм интеграцияның яңы офоҡтары" Рәсәй-Ҡырғыҙстан төбәк-ара конференцияһы эшендә ҡатнаша.

Радий Фәрит улы Бешкәктә Ҡырғыҙ Республикаһының иҡтисад министры Олег Панкратов менән осрашты. Осрашыуҙа ике яҡлы бәйләнештәрҙе артабан үҫтереү мөмкинлектәре тикшерелде. Олег Панкратов Башҡортостан етәксеһенең килеүе туғандаш халыҡтар араһындағы бәйләнештәрҙе нығытыу өсөн сираттағы аҙым булырына ышаныс белдерҙе. Радий Хәбиров билдәләүенсә, Башҡортостан менән Ҡырғыҙстан араһында тауар әйләнеше тигеҙ түгел. Уҙған йыл йомғаҡтарына ярашлы, ул 51 миллион доллар кимәлендә булған. Уның төп өлөшө республиканан сығарылған экспорт тауарҙарына тура килгән. Экспорттың нигеҙен - нефть химияһы һәм химия продукцияһы, ә импортты башлыса электр лампалары тәшкил иткән. Радий Хәбиров әйтеүенсә, Башҡортостан Ҡырғыҙстандан йәшелсә-емеш алыу менән ҡыҙыҡһына һәм ошо йүнәлеште тикшерергә әҙер. Бешкәктә Башҡортостан менән Ҡырғыҙ Республикаһы хөкүмәттәре араһында сауҙа-иҡтисади, фәнни-техник, экология, гуманитар һәм мәҙәни өлкәләрҙә хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлдө.

ХАЛЫҠТЫ КЕМ ИШЕТӘ?

Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Граждандар йәмғиәтен үҫтереү һәм кеше хоҡуҡтары буйынса совет ҡайһы саҡта кешеләргә үҙҙәренең проблемаларын хәл итеүҙә ярҙам таба алған һуңғы өмөт утрауы булып тора. Өфөнөң "Торатау" конгрес-холында барған Кеше хоҡуҡтары буйынса советтың пленар ултырышында Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ошо хаҡта белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, республика власы Кеше хоҡуҡтары буйынса советҡа тәҡдимдәре өсөн рәхмәтле булыр һәм уларға ҡолаҡ һалыр.

Мин һәм командам халыҡ власҡа ышанмаһа, Башҡортостанды үҫтереү мөмкин түгеллеген яҡшы аңлай, тип билдәләне республика етәксеһе. "Беҙ халыҡ менән асыҡтан-асыҡ аралашабыҙ. "Инцидент" программаһы граждандарҙың ялыуҙарына яуап биреүҙән тыш, уларҙы шунда уҡ хәл итергә мөмкинлек бирә. Бөгөн министрлыҡтар һәм ведомстволар етәкселәре барлыҡ социаль селтәрҙәрҙә әүҙем эшләй. Быйыл беренсе кварталда минә республика халҡынан 22 меңдән ашыу мөрәжәғәт килде, шуның 13 мәңе - социаль селтәрҙәр аша", - тип һөйләне Радий Хәбиров. Мөрәжәғәттәр структураһында беренсе урында төҙөкләндереү һәм уңайлы ҡала мөхитен булдырыу менән бәйле мәсьәләләр тора. Артабан юлдар, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, экология, һаулыҡ һаҡлау, йәмәғәт транспорты һәм мәғариф мәсьәләләре килә. Республика етәксеһе Кеше хоҡуҡтары буйынса совет ағзаларының иғтибарын властың алмашыныуы хоҡуҡи дәүләт үҫешендә мөһим мәлдәрҙең береһе булыуына йүнәлтте. Уның фекеренсә, муниципалитет етәкселәре лә власта ике срокҡа ашыу торорға тейеш түгел, хәҙер республикала ошо йүнәлештә эш алып барыла, Башҡортостандың район һәм ҡалаларында яңы башлыҡтар тәғәйенләнә. Урындарҙа власть әхлаҡлы һәм тәртипле булһа, һәр төбәк һөҙөмтәле үҫешә ала, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Хәбиров.

ИҪӘП АЛЫУ ЯҠЫНЛАША

Башҡортостанда 2020 йылдағы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға 10 мең кеше йәлеп ителә. Был хаҡта республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Башстат етәксеһе Әкрәм Ғәниев хәбәр итте.

Киләһе йылда халыҡ иҫәбен алыуға йәлеп ителгән кешеләрҙең аҙайыуы цифрлаштырыу менән бәйле, йәғни күпселек осраҡта мәғлүмәттәр электрон ысул менән тапшырыла. Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу 2020 йылдың октябрендә иҫәп алыусылар һәм Дәүләт хеҙмәттәре сайты ярҙамында башлана. Иҫәп алыусыларға уңайлы булһын өсөн статистиктар Радий Хәбировтан урам исемдәре һәм йорттоң һаны яҙылған күрһәткестәр ҡуйырға күрһәтмә бирәүен һораны. Белгестәр фаразына ярашлы, 2030 йылға Башҡортостанда эшкә һәләтле йәштәге халыҡтың - 180 мең кешегә, эшкә һәләтле йәштән йәшерәктәрҙең 100 меңгә кәмеүе, өлкән йәштәгеләрҙең 145 меңгә артыуы көтөлә. 2019 йылдың 1 ғинуарына республиканың 54 муниципаль районынының 12-һендә халыҡ һаны 20 мең кешенән аҙыраҡ тәшкил иткән.

БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Ҡала Советы депутаттары Өфөнөң Калинин районына ҡараған Карпов ауылының яңы урамдары исемен раҫланы. Хәҙер унда Дивногорск, Оптимистар, Ашҡыныулы (Стремительная), Яңы йыл, Нефрит, Әрәмәлек, Ҡара көртмәле, Кизил, Ҡупшы, Рекорд, Моңло, Болотһоҙ, Бәпембәле урамдары буласаҡ. Тик, нишләптер, ике телдә лә матур яңғырашлы һәм аңлайышлы, республикала ғына түгел, донъяла билдәле булған Нөгөш, Мораҙым, Ҡорғаҙаҡ атамаларының тыҡырыҡтарға бирелгәнлеге аңлашылмай һәм: "Атамаларҙы һайлау ниндәй критерийҙарҙан сығып башҡарыла икән?" - тигән һорау тыуҙыра.

✓ Ҡала Советының сираттағы ултырышында Шамил Әбдерәшитовҡа "Өфө ҡалаһының почетлы гражданины" тигән маҡтаулы исем бирелде. Шамил Рәхим улы - техник фәндәр кандидаты, билдәле йәмәғәт эшмәкәре, энергетик, публицист, 200-ҙән ашыу баҫма хеҙмәт, шул иҫәптән китаптар һәм уҡыу әсбаптары авторы, оҙаҡ йылдар Өфө дәүләт авиация-техник университетында уҡыта. Башҡорт АССР-ынан СССР Юғары Советында Милләттәр Советы депутаты була.

✓ Дмитрий Кириченконың "Өфө" футбол клубының баш тренеры вазифаһын ҡалдырыуы билдәле булды. Вадим Евсеев "Өфө" футбол клубының баш тренеры итеп тәғәйенләнде. Клубтың матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, 43 йәшлек белгес менән хеҙмәт килешеүе ике йылға иҫәпләнгән. Вадим Евсеев Мәскәүҙең "Локомотив"ы өсөн сығыштары менән билдәле, уның составында ике тапҡыр Рәсәй чемпионы булған, шулай уҡ Чемпиондар лигаһы уйындарында, 2004 йылда Европа чемпионатында ҡатнашҡан.

✓ 31 мартта Өфөлә "Науруз" республика байрамы уҙғарыла. Тап ошо көндә былау буйынса беренсе Өфө чемпионаты старт ала. Сара тәүге тапҡыр "ЕврАзия" агропаркы майҙансығында була (Халыҡтар дуҫлығы проспекты, 21). Байрам көндөҙгө сәғәт 12-лә башлана. Ойоштороусылар һүҙҙәренсә, былау ҡунаҡтарҙың күҙ алдында бешереләсәк. Бынан тыш, ҡунаҡтар үзбәктәрҙең милли ризығы "сүмәләк"те әҙерләү буйынса оҫталыҡ дәресендә ҡатнаша ала.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

✓ *Быйыл Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғалары боҙҙан башҡа йылдар менән сағыштырғанда 2-3 көнгә алдараҡ асыласаҡ һәм был 2-8 апрелгә тура килә, һыу кимәле иһә 100 сантиметрға түбәнерәк булыуы күҙаллана.*

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

Үткән аҙна төрлө мәҙәни, социаль әһәмиәттәге һәм спорт сараларына бай булһа ла, төп урындарҙың береһен Беларусь Республикаһының Рәсәйҙәге Тулы хоҡуҡлы һәм ғәҙәттән тыш илсеһе Владимир Семашко менән эшлекле осрашыу алып торҙо. Сара барышында коммуналь махсус техника һәм пассажир автобустарын алыу, шулай уҡ беларус белгестәренең Өфөлә автомобиль юлдарын төҙөү өлкәһендә ҡатнашыу мөмкинлеге тураһында һөйләшеүҙәр алып барылды. 16-17 майҙа ВДНХ-ла Беларусь Республикаһының барлыҡ коммуналь техникаһы күргәҙмәһе күрһәтеләсәк. Ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин унда мотлаҡ ҡатнашып, техника менән танышыу, ниндәй техниканы алыу кәрәклеге һәм ниндәй йүнәлештә хеҙмәттәшлек итеүҙе асыҡлау бурысын ҡуйҙы.

ҠАРҘАР ИРЕЙ, ҺЫУ ТАША...

Шулай уҡ уҙған аҙнала Республика көнө уңайынан "Аҡбуҙат" ипподромында муниципаль райондар араһында ат сабыштары буйынса турнирҙың беренсе этабы үтеүе лә Башҡортостан тарихында яңы биттәрҙең береһе булды. Ике күрше республика араһында "Кемдең аты?" тигән һорау тыуған ваҡытта Республика Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбировтың Башҡортостандың 100 йыллығы сиктәрендә ошондай матур башланғыҫҡа нигеҙ һалыуы халыҡтың рухын күтәреп ебәрҙе, тигәндә лә һис арттырыу булмаҫ. Баш ҡала ғына түгел, тапшырыуҙарҙы тура эфирҙан күҙәткән республика халҡы үҙе атҡа менгәндәй рух, күңел күтәренкелеге кисерҙе был ваҡыттарҙа. Ә инде бер нисә этаптан тороп, йомғаҡлау сығышында - 11 октябрҙә, Республика көнөнә ниндәй хистәр бураны күтәреләсәген күҙ алдына килтереү ҡыйын түгел. Был сара киләсәктә яңы йүнәлештәргә яңы һулыш өҫтәр, этәргес булыр, тигән өмөт осҡоно баҙланы, ниһайәт, күңелдәрҙә.

Оператив кәңәшмәлә автомобилдәрҙең газондарҙа парковкаланыуы мәсьәләһенә айырым иғтибар бирелде. Быға юл ҡуймау өсөн ике талап бар: административ комиссияларҙың эшен яйға һалыу һәм тыйыу сараларын ҡулланыу, йәғни махсус бағаналар һәм ҡоймалар ҡуйыу. Шулай уҡ яҙғы таҙартыу айлығы ла иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Был сара 25 марттан башланды һәм апрель һуңына тиклем дауам итәсәк.

Шулай ҙа миҙгелгә ҡарап, көн үҙәгенә сығарылған һорауҙар араһында иң актуаль булып яҙғы ташҡынға әҙерлек мәсьәләһе торғандыр. Был мәсьәлә буйынса һыу баҫыу ихтималлығы булған территориялар ингән - Дим, Калинин, Киров, Ленин райондары хакимиәттәре башлыҡтары сығыш яһаны.

Йыл һайын алып барылған күҙәтеүҙәрҙән мәғлүм булыуынса, һыу максималь кимәлгә - 850-990 сантиметрға күтәрелгән осраҡта ғына дүрт райондың ҡайһы бер биҫтәләрен һыу баҫа. Түбәнерәк күрһәткестәр ваҡытында был исемлеккә Калинин районы инмәй. Тирә-яҡ мөхит гидрометеорологияһы һәм мониторингы буйынса Башҡортостан идаралығы хәбәр итеүенсә, быйыл Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғалары боҙҙан башҡа йылдар менән сағыштырғанда 2-3 көнгә алдараҡ асыласаҡ һәм был 2-8 апрелгә тура килә, һыу кимәле иһә 100 сантиметрға түбәнерәк булыуы күҙаллана. Шуға ҡарамаҫтан, муниципалитетта әҙерлек ғәҙәттән тыш хәлдәрҙең иң насар, көтөлмәгән фаразы буйынса алып барыла.

Һыу баҫыу ихтимал булған участкаларҙағы урам комитеттары, баҡсасылыҡ берләшмәләре менән һыуҙың ҡапыл күтәрелгән ваҡытында нимә эшләү, милекте нисек ҡотҡарып ҡалыу буйынса күнекмәләр үткәрелә, янғынға ҡаршы һәм граждандар һағы хеҙмәттәренең профилактика бүлектәре хеҙмәткәрҙәре менән берлектә халыҡҡа аңлатыу эштәре алып барыла. Халыҡты ваҡытлыса урынлаштырыу пункттары әҙерләнә. Шулай уҡ эсәр һыу килтереүҙе ойоштороу буйынса ла хәстәрлек күрелә. Һыу ныҡ күтәрелеп, һуңынан кире ҡайтҡандан һуң уның эҙемтәләрен бөтөрөү буйынса ла эштәр алып барыла.

Ғөмүмән, муниципалитет һәм ҡала тормошон тәьмин итеү буйынса хеҙмәттәр һыу ташыу проблемаһы менән беренсегә осрашмай, шунлыҡтан төрлө осраҡтарға ла әҙерҙәр, тип әйтергә мөмкин. Был осорҙа инде күп нәмә халыҡтың үҙенән дә тора: белгестәр ҡушҡанды ҡаршылыҡһыҙ үтәп, ғүмергә хәүеф янағанда милекте һаҡлап ҡалыуҙы икенсе планға ҡуйып тороп, ташҡынды фажиғәләрһеҙ, имен-аман үткәреп ебәреү - тәү сиратта ғы бурыс. Ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин да йомғаҡлау һүҙендә тап ошо хаҡта белдерҙе: иң мөһиме, ғүмерҙәрҙе һаҡлап ҡалыу.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

ДҮРТЕНСЕ УРЫНДА

Өфө хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин 2019 йылдың беренсе кварталы йомғаҡтары буйынса мэрҙарҙың милли рейтингында дүртенсе урынды алды.

Рәсәй төбәктәренең баш ҡалалары мэрҙары һәм ҙур финанс-сәнәғәт үҙәктәре эшмәкәрлеген баһалауға арналған тикшереүҙе Рәсәй Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университеты менән берлектә "Рейтинг" мәғлүмәт коммуникациялары үҙәге әҙерләгән. Ағымдағы йылдың тәүге өс айы буйынса рейтинг лидеры - Төмән башлығы Руслан Кухарук. Икенсе урынды Мәскәү мэры Сергей Собянин алды. Өсөнсөлә - Ҡазан мэры Илсур Метшин, дүртенселә - Өфө башлығы Өлфәт Мостафин. Рейтингта илдәге 88 ҡаланың мэры ҡатнашҡан.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

БАШҠОРТ АТТАРЫ ШӘП!

Ял көндәре баш ҡаланың "Аҡбуҙат" ипподромында Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына бағышланған ат сабыштары үтте. Бәйгелә республикабыҙҙың Әлшәй, Дыуан, Әбйәлил һәм Баймаҡ районынан килгән башҡорт тоҡомло аттар һәм башҡа төр тоҡомло йүгеректәр ҙә ҡатнашты.

Турнир программаһында бәйгенән тыш спорт уйындары ла, концерт та, сауҙа ла, аш-һыу күрһәҙмәләре лә ҡаралғайны. Шунлыҡтан, ипподромда иртәнсәктән алма төшөр урын булманы.

Сабыш ике бүлектән торҙо. Башҡорт тоҡомло аттар барыһы нигеҙ сабышта һыналды. Ҡатнаш һәм рысаҡ тоҡомло аттар ҙа төрлө этаптарҙа көс һынашты. Башта муниципалитеттар араһында булды ярыш, унан бындағы еңеүселәр һәм көмөш призерҙар "Аҡбуҙат" аттарында ла сабып ҡараны. Шулай итеп, "ТЕРРА БАШҠОРТОСТАН" беренсе көн турниры финалында район хакимиәте кубогына (1400 метрға) Әлшәй районынан Рәмил Таһиров (аты "Ромашка" ҡушаматлы), Дыуандан Илдар Нурғәлиев ("Гавиал"), Әбйәлилдән Вилнарис Вәлиев ("Ғаяз"), Баймаҡ районынан Сергей Айсенов ("Бүләк") лайыҡ булды. Чемпион исемен иһә Дыуан районынан "Монах" ҡушаматлы йылҡы малы эйәһе Илдар Нурғәлиев яуланы.

Артабан, 4 һәм 3 йәшкә тиклемге башҡа тоҡом юртаҡтары араһында үткәрелгән ярыштарҙа ла алдынғылар билдәләнде. Башҡорт Совет Автономияһы тураһындағы Килешеүгә 100 йыл тулыу хөрмәтенә билдәләнгән призды Александр Машинец ("Апельсинка"), "Башҡорт Шихандары" призын Дмитрий Качетулин ("Рогдай") һәм "Башҡорт яҙы" призын Сергей Ананьевтар ("Пикап") үҙ-ара бүлеште.

Был сара әлегә оло турнирҙың беренсе этабы ғына булды. Ойоштороусылар бәйгегә республиканың 54 районын да ҡатнаштырмаҡсы. Киләһе сабыштар 27 апрелгә билдәләнгән һәм унда Балаҡатай, Иглин, Илеш һәм Учалы райондары саҡырыласаҡ. Ә дөйөм финал 2019 йылдың 11 октябренә тип ҡаралған. Был уйын Башҡортостан Республикаһы Башлығы призына буласаҡ.

Беҙгә бәйге еңеүсеһе Илдар Нурғәлиев менән һөйләшеү форсаты сыҡты.

- Мин аттарҙы бала сағымдан яратам, - тине ул. - Учалы балалар йортонда үҫкәндә атта сабышыу, аттарҙы ҡарау, ат спортына ылыҡтырыу бер тәрбиә алымы ине. Бөгөн Дыуанда йәшәйем, ғаиләмдә ике бала тәрбиәләйбеҙ һәм һаман да йылҡы малынан айырыла алмайым. Йылҡы фермаһында эшләйем, ҡул аҫтындағы аттарҙы үҙем үк өйрәтәм һәм әҙерләйем. Бығаса район, ҡала һәм республика кимәлдәрендәге сабыштарҙа ла ҡатнаштым, төрлө урындар биләгәнем булды. Башҡорт автономияһының 100 йыллығына арналған бәйгегә "Гавиал" ҡушматлы сапҡыла килдем, тәүге урындарҙы ла уның менән алдым. Был йылҡы малына 10 йәш, ҡарт иҫәпләнә, әммә бирешергә теләмәй әле. "Монах" ул ипподромдың йүгереге булды һәм финалға уның менән сыҡтым. Бәйге миңә бик оҡшаны, барыһы ла юғары кимәлдә, яҡшы ойоштороlған. Районым һәм үҙебеҙҙең йылҡы малы менән бик ғорурланам.

ХАЛЫҠ ДАУАНЫ

Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.

Йоҡоһоҙлоҡ

❖ Бесәй үләне тамыры - 40 грамм, ҡомалаҡ тубырсыҡтары - 30 грамм, бөтнөк (мята) үләне япраҡтары - 15 грамм. Төнгөлөккә йылы һыу менән төнәтергә ҡуйып, иртән һөҙөргә һәм кисен йылытып, сәй итеп эсергә.

❖ Һары мәтрүшкәне һабағы менән ваҡларға. 2 балғалаҡ үләнгә 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм 5 минут ҡайнатырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр, ашар алдынан 50-шәр грамлап эсергә. Дауалауҙы 3-4 аҙна дауам итергә.

❖ 1 стакан һоло онтағына 5 стакан һыу ҡойоп, һыуҙың яртыһы парға әйләнеп бөткәнсе ҡайнатырға. Һөҙөргә, 2 стакан һөт өҫтәргә, яңынан ҡайнатырға. 4 балғалаҡ бал өҫтәп, килеп сыҡҡан эсемлекте йылытып, көн буйына эсергә. Дауаланыу курсы - 4 аҙна.

❖ Гәрсис ваннаһына аяҡтарҙы һәм ҡулдарҙы тығып ултырыу ҙа яҡшы һөҙөмтә бирә. Бындай ванналар ҡан тамырҙарын сыныҡтыра, эске ағзаларҙағы ҡанды тотош организмға ҡыуалай. Быныңөсөн 1-2 ҡалаҡ ҡоро гәрсис порошогын туҡымаға төрөп, йылы һыулы биҙрәгә төшөрөгөҙ, туҡыманы бер нисә тапҡыр һығып алығыҙ. Һыу температураһы 35-37 С булырға тейеш. Ҡулдарҙы тирһәккә тиклем, аяҡтарҙы тубыҡҡа тиклем һыуға тығып, 10-20 минут ултырырға.

❖ Йоҡоһоҙлоҡто дарыу үләндәре һалынған яҫтыҡтар ҙа дауалай. Мелисса, бөтнөк, һары мәтрүшкә, ҡомалаҡ тубырсыҡтары тынысландырыу һәләтенә эйә булған эфир майҙарынан тора. Үлән тултырылған яҫтыҡты баш осона ҡуйырға. Был үләндәрҙән тыш, яҫтыҡҡа аҡ сәскә, рауза, миләүшә, йәсмин сәскәләре һалырға ярай.

Дисбактериоз

❖ Эсәктең микрофлораһын яҡшыртыу өсөн халыҡ медицинаһы сәй бәшмәгенән әҙерләнгән эсемлек тәҡдим итә. Уны 4-5 көн тотҡандан һуң, дауалау сифатына эйә була. Сәй бәшмәген әҙерләү: 1 литр һыуға 1 ҡалаҡ сәй иҫәбенән сығып, сәй бешерергә, 1 литр һыуға 100-120 грамм шәкәр һалырға, һыуытырға һәм сәй бәшмәген һалырға. 4-5 көндән (эҫе көндә 2-3 көн) һөҙөп, һыуытҡыста һаҡларға.

Айбикә ЯҠУПОВА.

✓ *Тап шул фотолар арҡаһында беҙ крайҙың бынан 110 йыл элек нисек булғанын, өйҙәрҙең төҙөлөшөн, кешеләрҙең йөҙҙәрен, кейемдәрен, хатта йорт йыһаздарын күрә, таныша алабыҙ.*

ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!

БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

Урал аръяғында көн итеүсе бөрйән ырыуы башҡорттарында биҙәктәр ҡатмарлыраҡ.

Өлгө итеп венгр этнографы, фольклорсыһы Д. Месарош тарафынан Темәс ауылынан алынған кейеҙҙе күрһәтергә була. Япраҡҡа оҡшатып яһалған биҙәктәр ҡатлы итеп һалынған. Уртаһында ике яҡлы биҙәк, кейеҙгә вертикаль рәүештә ҡараһаҡ, унда өҫкә ҡарай үрләгән һәм тамыры булған үҫемлекте күрәбеҙ.



Ҡатмарлы биҙәкле тышлы кейеҙ. Баймаҡ районы Темәс ауылы. XX быуат башы.

Иң ҡыҙығы шул - тап ярты быуаттан, 1962 йылда беҙ ошо уҡ ауылда ошондай уҡ биҙәкле кейеҙҙе һәм кейеҙ баҫыу оҫтаһы Хәтирә Кәримованы тап иттек. Төҙөлөшө йәһәтенән ҡатмарлы булған был биҙәкте ул туҡымаларҙан яһай ине. Һаҡмар йылғаһы буйындағы ауылдарҙа кейеҙҙе махсус энә менән биҙәйҙәр, ул ҙур йыуан энә, кейеҙ энәһе тип атала.



Аппликациялы туй түшәктәре. Белорет, Баймаҡ райондары.

Баймаҡ районы орнаменттары ҡаҙаҡ биҙәктәре менән оҡшаш. XIX быуаттың икенсе яртыһында, XX быуаттың башында Ырымбур губернаһының көньяҡ-көнсығыш өйәҙҙәрендә йәшәгән башҡорттар ҡаҙаҡтар менән тығыҙ аралаша. Башҡорт ауылдарына килгән ҡаҙаҡтар был урындарҙа кейеҙ баҫыу йолаһын әүҙемләштерә. Башҡорт кейеҙенән айырмалы рәүештә, ҡаҙаҡ кейеҙҙәре ныҡ биҙәлә, биҙәктәр йышыраҡ төҫлө була. Биҙәк кейеҙҙең үҙенә һалына йәки ҡорама туҡыма менән тышлана. Биҙәү технологияһы айырыла, әммә биҙәктәр башлыса оҡшаш. Кейеҙҙе биҙәү борон башҡорттарҙа булған, әммә фабрика туҡымалары таралыуы һөҙөмтәһендә уларҙы тышлау ҙа йолаға әйләнгән.



Кейеҙҙәге биҙәктәр өлгөләре.

Светлана ШИТОВА.
"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.

РУХИӘТЕБЕҘ

Билдәле йырҙар һүҙҙәре авторы Марсель Ғәлиевтың "Ҡайтыу" йырында шундай юлдар бар: "Ҡоштарҙа ла кеше яҙмыштары, сит ерҙәрҙән ҡайтып барыштары". Ниңәлер, билдәле этнограф Михаил Антонович Круковскийҙың XIX быуат һуңында, XX быуат башында Көньяҡ Урал буйлап сәйәхәте ваҡытында төшөргән башҡорттарҙың фоторәсемдәренең күсермәләре тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайтҡас, ҡапыл ошо йыр иҫкә төштө. Уйлап ҡараһаң, яҙмышҡа буйһонop сит ерҙәрҙә йөрөп, үҙ төбәгенә ҡайтҡан кешеләр, хайуандар, ҡоштар кеүек, был фоторәсемдәргә быуаттан ашыу көтөргә, урау юлдар үтергә тура килгән. Әммә барыбер ҙә үҙ төйәгенә әйләнеп ҡайтҡандар. Уларға тыуған яғына ҡайтыу мөмкинлеге биреүселәрҙең береһе - "Янғантау" геопаркы" хеҙмәткәре Айрат ҒӘЛИЕВ менән ошо хаҡта әңгәмәбеҙ.

ҠАЙТЫУ

➔ **Билдәле этнограф Михаил Круковскийҙың рәсемдәре күсермәһенең милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуған яғындағы күргәҙмәһе - Рәсәйҙә беренсе күргәҙмә. Бындай идея һеҙгә ҡасан килде һәм уны нисек тормошҡа ашырҙығыҙ?**

- Бер ни тиклем Ленинград өлкәһендә музейҙар буйынса эшләнем, бик йыш билдәле Кунсткамерала ла булырға тура килде. Антропология һәм этнография музейы ла шунда урынлашҡан. Һаҡлағыстарҙағы оҫоҙ-ҡырыйһыҙ каталогтар араһында "Девушка из Мосабайки" тигән яҙыу күреп ҡалдым һәм альбомды тотош ҡарап сыҡтым. Уның биттәренән миңә яҡташтарым, Мусабай (Ишембай ауылының боронғо исеме), Яхъя, Миндеш ауылы кешеләре ҡарай ине. Алдымда йөҙ йәштән дә олораҡ фотографиялар булыуына ышана ла алманым. Әлбиттә, башыма килеп ингән иң беренсе уй - фотоларҙы тыуған яғымда күрһәтергә ине, тигән уй булды. Әммә Кунсткамерала фотоларҙың күсермәһен эшләү ҡәтғи тыйыла, шуға күрә бер нисәһен кеҫә телефонына ғына төшөрөп, ошо фотографиялар булған каталогтарҙың номерҙарын яҙып ала алдым.

Тыуған яғыма ҡайтҡас та күргәҙмә ойоштороу тураһындағы уй тынғылыҡ бирмәне һәм был уйымды Салауат Юлаев музейы директоры Зилә Садиҡова ла хупланы. Кунсткамера директоры адресына фотографияларҙың күсермәһен эшләп, бушлай тапшырыуҙарын үтенеп хат яҙҙыҡ, әммә кире ҡағыу хәүефе лә ҙур ине. Әммә үтенесебеҙҙе, фотоларҙың күсермәһен тиражлау һәм күсермә эшләү хоҡуғын тыйып, ҡәнәғәтләндерҙеләр. Шулай ҙа беҙгә бик ыңғай тура килде, тип ҡыуанабыҙ, сөнки бер фоторәсемде сканлау 700 һумға барып баҫыр ине, ә фотолар барлығы 50 дана! Шулай уҡ фотоларҙы ҙурайтып, сифатлы итеп баҫтырыу, күргәҙмәне ойоштороу ҙа еңел булманы, ләкин битараф булмаған кешеләр ярҙамы менән беҙ барлыҡ ауырлыҡтарҙы еңеп сыҡтыҡ. Хәҙер инде теләгән кеше Салауат Юлаев музейына килеп, тарих менән таныша ала.

➔ **Круковскийҙың ҡайһы бер фотоларын интернетта күрергә мөмкин, уларҙы мәҡәләләрҙе биҙәү өсөн ҡулланалар һәм аңлатмаһына бик йыш татарҙар йәки мишәрҙәр, тип яҙалар. Тарихҡа битараф булмаған кеше булараҡ был хаҡта нимә әйтерһегеҙ: бындай урлашыуҙың сәбәбе нимәлә, автор, шул уҡ ваҡытта этнограф, уларҙың ҡайҙа, ҡасан төшөрөлгәнен ентекләп яҙғандыр бит?**

- Михаил Антонович эштәренең башҡаларҙан төп һәм мөһим айырмаһы шунда - тап ул барлыҡ негативтарына ентекләп яҙған: аңлатма биргән, ниндәй ауылда, ниндәй шарттарҙа фото төшөрөлгәнен теркәгән. Тап шул фотолар арҡаһында беҙ крайҙың бынан 110 йыл элек нисек булғанын, өйҙәрҙең төҙөлөшөн, кешеләрҙең йөҙҙәрен, кейемдәрен, хатта йорт йыһаздарын күрә, таныша алабыҙ. Бындай этнографик мираҫ менән барлыҡ милләттәр ҙә маҡтана алмай, шуға күрә урлашыуҙар бар һәм артабан да буласаҡ. Ундай эшмәкәрҙәр менән бәхәсләшеүҙе урынһыҙ тип һанайым, ә күберәк кеше үҙенең тарихын күреп белһен, ата-бабаларын онотмаһын өсөн бына ошондай күргәҙмәләр ойоштороу дөрөҫөрәктер, минеңсә.

➔ **Күргәҙмәне асыу тантанаһында икенсе билдәле авторҙың - Прокудин-Горскийҙың объективына эләккән геройҙарҙың вариҫтары ла ҡатнашҡаны мәғлүм. Ошо күргәҙмәнән һуң башҡаларҙың нәҫел-нәсәбе табылманымы?**

- Аныҡ кешеләр табылманы, әммә фотолар халыҡта ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Ололар фотоларҙағы йөҙҙәргә тикәлеп, ауылдаштар менән оҡшашлыҡтар эҙләне. Хатта ҡайһы берҙәре эргәһендә "бына Шакировтар", "ә бына был Ишмөхәмәтовтарға оҡшаған", тип үҙ-ара һөйләштеләр ҙә. Дөрөҫөн әйткәндә, оҡшашлыҡтар бар һәм бик күп. Әммә аныҡ ҡына билдәләүе мөмкин түгелдер, сөнки фотолағы кешеләр яҙмышына тиҙҙән Беренсе донъя, Граждандар һуғыштары, 1921, 1933, 1946 йылдарҙағы аслыҡ, Бөйөк Ватан һуғышы килеп инәсәк. Уларҙың ҡайһыһы ҡартайғансы йәшәй алды икән? Шулай тип уйлауҙан ғына ла тәндәр земберләп китә хатта...

➔ **Әйтеп китеүегеҙсә, тимәк, был күргәҙмәләге кешеләр, йорттар, күренештәр тыуған яғына мәңгелеккә ҡайтты һәм мәңгелеккә шунда ҡаласаҡ. Уларҙың әһәмиәтен райондың бөгөнгө халҡы, йәштәр тейешенсә баһалай алырмы икән?**

- Эйе, улар үҙ өйөнә, үҙ еренә ҡайтты. Беҙҙең бер генә теләгебеҙ бар: уларҙы мөмкин тиклем күберәк яҡташтарыбыҙ һәм геопарк ҡунаҡтары күрергә тейеш. Шуға күрә күргәҙмәне һуңыраҡ "Янғантау" шифаханаһында ла ойошторорға уйлайбыҙ. Был фотолар - крайҙың милли хәтерен уятыу буйынса ҙур проекттың бер өлөшө генә, "Янғантау" геопаркы ла тап ошо маҡсатта үҫешә, һәм был бик ҡыуаныслы. Киләсәктә Круковскийҙың, Прокудин-Горскийҙың һәм башҡаларҙың фотоларынан фотомузей булдырырға ла планлаштырабыҙ. Ул геопарктың экскурсия маршруттарының мөһим пункты булып торасаҡ.

Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА әңгәмәләште.

✓ *Советтар автономия тураһында һөйләшергә, исмаһам, нигеҙ биргән. Аҡтар яғында ундай нигеҙ ҡалмаған. Әлбиттә, Советтарҙың автономия хаҡындағы һүҙе менән эше араһында ҙур айырма бар.*

УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ!

ҮҘ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘҘЕ БЕЛӘЙЕК!

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Башҡортостан автономияһының 100 йыллығына арнап, "Башҡортостан Республикаһы дәүләтселегенең тыуыуы һәм аяҡҡа баҫыуы: 100 шәхес" тигән проект иғлан иткәйне. Түбәндә беҙ шул исемлекте баҫыуҙы дауам итәбеҙ.

Исхаҡов Ибраһим Ейәнбай улы (1891-1921), Башҡортостан Республикаһының Стәрлетамаҡ районы Мырҙаш ауылында тыуған - Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, Башҡорт армияһы офицеры, 2-се Башҡорт пехота полкы командиры (1918-1919). Көньяҡ фронттағы һәм Петроград эргәһендәге һуғыштарҙа ҡатнашыусы (1919). Башҡорт Республикаһының Хәрби комиссары урынбаҫары ярҙамсыһы (1920).

Имаҡов Таһир Ғилман улы (1895-1837), Башҡортостан Республикаһының Көйөргәҙе районы Ҡансура ауылында тыуған - Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, Башревком ағзаһы (1919), Башҡортостан Ғәҙәттән тыш комиссияһын ойоштороусы (1919), БашЧК, Башревком рәйестәре вазифаһын башҡара (1920).

Әмиров Хәлим Насретдин улы (1894-?) Башҡортостан Республикаһының Яңауыл районы Яңы Артауыл ауылында тыуған - Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, мәғариф хеҙмәткәре, белем биреү буйынса китап авторы. 1918 йылда Башҡорт Хөкүмәтендә эшләй, 1919 йылда - БАССР Халыҡ мәғарифы комиссариаты коллегияһы ағзаһы, Айырым Башҡорт бригадаһы комиссары, Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәренең Башҡортостан ревкомы махсус уполномоченныйы.

Әлмөхәмәтов Ғәзиз Сәлих улы (1895-1938) Башҡортостан Республикаһының Көйөргәҙе районы Морапталауылында тыуған - Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәттең әүҙем ҡатнашыусыһы, БАССР-ҙың халыҡ артисы, башҡорт профессиональ музыкаһына нигеҙ һалыусы. 1917 йылда Башҡортостан Үҙәк шураһы уға уҡыу өсөн пособие билдәләй. 1918 йылдың февралендә Башҡорт Хөкүмәтен ҡулға алғандан һуң, "Башҡортостанды ҡотҡарыу буйынса комитет"ты ойоштороусыларҙың береһе була. 1918 йылдың йәйендә Башҡорт хәрби советы ҡушыуы буйынса Башҡортостандың Ҡыпсаҡ кантонының ирекмәндәр отрядын ойоштороу менән шөғөлләнә, бер ни тиклем ваҡыт (ойошторолған сағында) отряд етәксеһе була.

Смаҡов Муса Ғәтиәтулла улы (1885-?) Башҡортостан Республикаһының Мәләүез районы Смаҡ ауылында тыуа, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, Башҡорт Үҙәк шураһы ағзаһы (1917), Башҡорт Үҙәк шураһының статистика, мәғариф бүлектәрен етәкләй. Башҡортостандың Кесе ҡоролтайы ағзаһы (1917), Арғаяш кантонында Башҡорт Хөкүмәте уполномоченныйы (1918-1919). БАССР Мәғариф наркомы коллегияһы ағзаһы. Башҡорт телен уҡытыу буйынса китап авторы.

Иҙелғужин Кәрим Абдулла улы (1895-1937) Ырымбур өлкәһе Новосергиевск районының Мерәҫ ауылында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, яҙыусы, публицист. 1918 йылда Башҡорт Хәрби советында хеҙмәт итә, "Башҡорт тауышы" гәзитен ойоштороуҙа ҡатнаша, мәҡәләләр баҫтыра, 2-се Башҡорт кавалерия полкы составында хеҙмәт итә, 1919 йылда Тамъян-Ҡатай, һуңынан Туҡсоран кантондарының хәрби комиссары була. 1926 йылда "1917, 1918, 1919 йылдарҙа башҡорт хәрәкәте" китабын яҙа.

Иркәбаев Ғәбделхәй (1893-1919) Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, шағир, публицист. Бөтә Башҡорт съездары ҡатнашыусыһы (1917), Башҡорт Хәрби советы ағзаһы (1918), башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороуҙа ҡатнаша, Башревком гәзите типографияһында эшләй (1919).

Сәлихов Яхъя Шәрәф (Мөхәмәтшәриф) улы (1893-1937) Ырымбур өлкәһе Тоцк районының Ҡыҙыл Мәсет ауылында тыуған - Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, Башҡорт Үҙәк шураһы ағзаһы (1917), Ойоштороу йыйылышына депутатлыҡҡа кандидат (1917), Башҡорт Хөкүмәтенең агрономия бүлеге мөдире (1918), БАССР Финанастар наркомы (1919).

Айытбаев Ғәлиәхмәт, тыуған урыны билдәһеҙ, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, Башҡорт Үҙәк шураһы ағзаһы (1917), уның 3-сө Башҡорт ҡоролтайындағы доклады (1917) Башҡорт Хөкүмәтенең Ер программаһына нигеҙ итеп алына (1918). Башревкомға ағзалыҡҡа кандидат (1919), БАССР-ҙың Тамъян-Ҡатай кантонының ЧК рәйесе (1919).

Әмиров Йыһангәрәй Ғилман улы, тыуған урыны билдәһеҙ, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, Башҡорт Үҙәк шураһы ағзаһы (1917), Шураның иҡтисад бүлеге мөдире (1917), Башҡортостандың Кесе ҡоролтайы ағзаһы (1917), 1918 йылда - Башҡорт Хөкүмәтендә, 20-се йылдарҙа - Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәтендә эшләгән, "Башҡорт аймағы" журналын сығарыуҙа ҡатнаша.

Хәсәнов Ғәлиәхмәт Вәлимөхәмәт улы (1894-?) Башҡортостан Республикаһының Күгәрсен районы Теләүембәт ауылында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, Башҡорт Үҙәк шураһы ағзаһы (1917), шураның статистика бүлеге мөдире (1917), Башҡорт Хөкүмәтенең финанстар бүлеге мөдире (1918), БАССР-ҙың Аҙыҡ-түлек наркомы (1919), БАССР-ҙың Ер эшкәртеү наркомы (1920).

Фәхретдинов Ғабдрахман Ризаитдин улы (1887-1937) Татарстан Республикаһының Бөгөлмә районы Кисеүсат ауылында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, Башҡортостандың Кесе ҡоролтайы ағзаһы (1917), Башҡорт Хөкүмәтенең Ер программаһына нигеҙ итеп алына (1918). Башревкомға ағзалыҡҡа кандидат (1919), БАССР-ҙың Тамъян-Ҡатай кантонының ЧК рәйесе (1919).

Әмиров Йыһангәрәй Ғилман улы, тыуған урыны билдәһеҙ, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, Башҡорт Үҙәк шураһы ағзаһы (1917), Шураның иҡтисад бүлеге мөдире (1917), Башҡортостандың Кесе ҡоролтайы ағзаһы (1917), 1918 йылда - Башҡорт Хөкүмәтендә, 20-се йылдарҙа - Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәтендә эшләгән, "Башҡорт аймағы" журналын сығарыуҙа ҡатнаша.

Хәсәнов Ғәлиәхмәт Вәлимөхәмәт улы (1894-?) Башҡортостан Республикаһының Күгәрсен районы Теләүембәт ауылында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, Башҡорт Үҙәк шураһы ағзаһы (1917), шураның статистика бүлеге мөдире (1917), Башҡорт Хөкүмәтенең финанстар бүлеге мөдире (1918), БАССР-ҙың Аҙыҡ-түлек наркомы (1919), БАССР-ҙың Ер эшкәртеү наркомы (1920).

Фәхретдинов Ғабдрахман Ризаитдин улы (1887-1937) Татарстан Республикаһының Бөгөлмә районы Кисеүсат ауылында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, Башҡортостандың Кесе ҡоролтайы ағзаһы (1917), Башҡорт Үҙәк шураһының статистика, мәғариф бүлектәрен етәкләй. Башҡортостандың Кесе ҡоролтайы ағзаһы (1917), Арғаяш кантонында Башҡорт Хөкүмәте уполномоченныйы (1918-1919). БАССР Мәғариф наркомы коллегияһы ағзаһы. Башҡорт телен уҡытыу буйынса китап авторы.

Иҙелғужин Кәрим Абдулла улы (1895-1937) Ырымбур өлкәһе Новосергиевск районының Мерәҫ ауылында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, яҙыусы, публицист. 1918 йылда Башҡорт Хәрби советында хеҙмәт итә, "Башҡорт тауышы" гәзитен ойоштороуҙа ҡатнаша, мәҡәләләр баҫтыра, 2-се Башҡорт кавалерия полкы составында хеҙмәт итә, 1919 йылда Тамъян-Ҡатай, һуңынан Туҡсоран кантондарының хәрби комиссары була. 1926 йылда "1917, 1918, 1919 йылдарҙа башҡорт хәрәкәте" китабын яҙа.

Иркәбаев Ғәбделхәй (1893-1919) Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, шағир, публицист. Бөтә Башҡорт съездары ҡатнашыусыһы (1917), Башҡорт Хәрби советы ағзаһы (1918), башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороуҙа ҡатнаша, Башревком гәзите типографияһында эшләй (1919).

Сәлихов Яхъя Шәрәф (Мөхәмәтшәриф) улы (1893-1937) Ырымбур өлкәһе Тоцк районының Ҡыҙыл Мәсет ауылында тыуған - Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, Башҡорт Үҙәк шураһы ағзаһы (1917), Ойоштороу йыйылышына депутатлыҡҡа кандидат (1917), Башҡорт Хөкүмәтенең агрономия бүлеге мөдире (1918), БАССР Финанастар наркомы (1919).

Айытбаев Ғәлиәхмәт, тыуған урыны билдәһеҙ, Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, Башҡорт Үҙәк шураһы ағзаһы (1917), уның 3-сө Башҡорт ҡоролтайындағы доклады (1917)

✓ Һәр көн иртән яҡшы кәйеф менән юлланам. Ауырлыҡ, йөк, бил бөгөү итеп ҡабул итмәйем, ә хеҙмәтемдән ләззәт алып, ҡәнәғәт булып йөрөп ҡайтам. Коллективыбыҙ һәйбәт, ана шул коллегаларым менән аралаша алыу ҙа бер мәртәбә ул.

ШАЯРТА БЕЛЕҮ, ул ЭСТӘН НЫҠЛЫ,

"Юлдаш" радиоһының "Иртәнсәккәй тороп" тапшырыуы буйынса тауыштары таныш булған егеттәрҙе хәҙер инде "Теге өсәү" аша күреп тә беләбеҙ. Ә асылда баш ҡаланың телсән, үткер, шаян был шоумендарын танымағандар һирәктер. Таныған хәлдә лә, уларҙың эс серҙәрен, уй-хыялдарын һәм шәхси тормоштарын белгән әҙәмдәр тағы ла һирәгерәктер. Ә беҙ "Теге өсәү"ҙе ҡунаҡҡа саҡырып, шундай һирәктәрҙең береһе булдыҡ. Әңгәмәне һеҙгә лә тәҡдим итәбеҙ.

Егеттәр, бала саҡ, мәктәп йылдары, һөнәр һайлау, хеҙмәт юлын башлау хәл-ваҡиғаларын нисек итеп хәтерләйһегеҙ?

Филүс Ҡасимов: Салауат районы Ҡарағол ауылында тыуып үҫтем, дүрт класты шунда уҡып, урта мәктәпте Мөрсәлим ҡасабаһында тамамланым. Атаәсәйемде иртә юғалтырға тура килде, мин мәктәпте тамамлағанда бер-бер артлы ғына ауырып китеп, донъя ҡуйҙылар. Йәшлегемде ошондай оло юғалтыу мөһөрләһә лә, бала сағымды бик бәхетле итеп хәтерләйем. Матур мөхитле, атай-әсәйле, өләсәйле һәм... ете малайлы ғаиләлә үҫтем. Шундай күңелле йәшәнек. Ололарыбыҙ шаян, үткер телле кешеләр ине. Уларҙың шаянлығы беҙгә - балаларына ла күскән.

Шыр малайҙар булһаҡ та, өйөбөҙ ялт итеп торҙо. Сөнки бар эште лә башҡарып өйрәнгәнбеҙ. Күрше-тирәләр "Ҡыҙҙарға алыштырғыһыҙ" тип маҡтай инеләр. Ҡайһы саҡ "эх, апайым булһын ине" тип хыялланып алына торғайны, әммә әсәйебеҙ елкәһенә ауырлыҡ һалмаҫҡа тырыштыҡ. Ул былай ҙа көн дә кистәрен тау-тау итеп кер йыуа, иртәләрен мейес тултырып икмәк һала ла, киске сәйгә беҙ уныһын төпләп тә ҡуябыҙ. Ҡалайтаһың, туптай булып үҫеп килгән малайҙарбыҙ, ашарға бешереп кенә өлгөр.

Атайыбыҙ Өфөлә төҙөлөштә эшләне. Ялдарға төндә генә ҡайтып инә ине, поездың ваҡыты шулай. Күстәнәскә епкә теҙелгән ҡаластар һәм ситкегә тултырылған алмалар алып ҡайта. Төн уртаһында был алмаларҙың хуш еҫе бөтөн өйгә таралып китә. Шул еҫкә уянып китәһең, шау-гөр килеп ултырып сәй эсәһең. Бер ҡайтҡанында шарманка алып ҡайтҡайны. Таңғы биштә шуны гөү килтереп уйнатып, иртәнсәккә һындырып та ҡуйғайныҡ... Бала саҡ...

Атай-әсәй көнө-төнө эштә лә, беҙ өләсәй ҡулында. Уның фармандарын йүгереп йөрөп үтәйбеҙ, ағай-ҡусты дәрәжәһенә буйһонабыҙ, бер һүҙ менән әйткәндә, шундай етеҙ, йылғыр, илау-һыҡтауһыҙ, сөсөлдәү-сүселдәүһеҙ "малайҙар мәктәбе" ине беҙҙең ғаилә.

Медицина колледжына уҡырға барырға хыял тота инем. Медицина буйынса ҡалын-ҡалын китаптар уҡый, фәнде өйрәнә инем. Тик көтмәгәндә икенсерәк юл һайлап ташланым. Музыка уҡытыусым ағай-апайҙарыма мине сәнғәткә барырға өгөтләргә кәрәк, тигән кәңәш биргән. Үҙемсә йырлай, музыка ҡоралдарында уйнай инем. Сығарылыш кисәһендә йырлағанымды ла хәтерләйем. Апайым менән баш ҡаланың медицина колледжына документтар алып килдек тә, юлыбыҙ "яңылыш" ҡына Пушкин урамынан үткән, сәнғәт училищеһына "осраҡлы" ғына индергән һәм тыңлатып ҡараған булып... Ҡыҫҡаһы, мин шунда уҡырға инеп киттем. Унан сәнғәт академияһында уҡыуымды дауам иттем. Бер ваҡыт ҡаты ғына итеп ҡурылдай менән ауырып киттем. Шул ваҡыт мине профессорым аңламаны, хәлемә инмәне. Бик дорфа ғына итеп: "Сирләһәң, һөнәрҙе алыштырырға кәрәк",- тине. Мин ни, ҡыҙыу кеше, тоттом да алыштырҙым. Вокал бүлегенән актерҙар бүлегенә күсеп, күпмелер йөрөп өлгөрҙөммө, радиоға диктор итеп эшкә саҡырҙылар.

Йәмил Ишмөхәмәтов: Ейәнсура районының Урта Муйнаҡ ауылынанмын. Атайым менән әсәйем ябай колхозсылар. Ғүмер буйы ал-ял белмәй шунда хеҙмәт иттеләр, алдынғы исемдәрен йөрөттөләр. Улар дүрт бала тәрбиәләп үҫтерҙе, мин шуларҙың олоһо. Ғаиләбеҙ ғәҙәти төшөнсәләргә нигеҙләнде һәм ул төшөнсәләр хеҙмәт, намыҫ, ғәҙеллек, яуаплылыҡ кеүек сифаттарға ҡайтып ҡала ине. Атай-әсәйем икеһе лә матур йырланы, ҡартатайым оҫта гармунсы булған. Мине шул ҡартатайға оҡшаталар ине. Әммә уның оҫталығы миңә бирелмәгән булып сыҡты.

Мәктәпте Ейәнсура башҡорт гимназияһында тамамланым. Мәктәптә театр түңәрәгендә шөғөлләндем. Шулай ҙа спортҡа иғтибарҙы күберәк бирҙем. Баш ҡаланың юғары уҡыу йорто на документтарҙы тапшырырға килгәндә лә һаман сәнғәт менән спорт араһында бүленә алмай инем. Цюрупа урамынан килгәндә миңә иң тәүҙә Өфө сәнғәт училищеһының театр бүлеге бинаһы тап булды һәм арыраҡ урынлашҡан физкультура факультетына барып етергә яҙманы. Ысынында яҙмышымды бына ошо ябай ғына осраҡлылыҡ билдәләне лә. Уҡыуҙы тамамлап, театрҙа бер йыл эшләгәс, йәйге ялға ҡайтырға йөрөһәм, әсәй шылтыратып: "Юлдаш" радиоһы алып барыусылар һайлай, бәлки, барып ҡарарһың",- тигәс, барып, беренсе турҙа ҡатнашып киттем. Унан ауылда бесән эшләп ятҡанда икенсе турға саҡыртып алдылар һәм эшкә ҡалдырҙылар.

Ғәзиз Әбделмәнов: Хәйбулла районының Степной, боронғо исеме менән атағанда, Ҡараһыу ауылында тыуып үҫтем. Атайым колхозда шофер булды, әсәйем һатыусы булып эшләй. Мин уларҙың һуңлап ҡына тыуған дүртенсе улдарымын. Ҡыҙ бала көткәндәр, хатта ҡыҙ балаға кейемдәр ҙә алған булғандар. Әммә, бына, мин тыуып ҡуйғанмын...

Ғаиләлә бәләкәй саҡтан иң яҡын кешем өләсәйем булды. Ҡойма аша ғына урынлашҡан балалар баҡсаһына алып барҙылар ҙа, ҡайта ла килә инем. Сөнки өйҙә өләсәй янында ҡыҙығыраҡ та, рәхәтерәк тә.

Мин беренсе БДИ "ҡорбанымын". Коллегаларымдан айырмалы рәүештә, Өфөгә филология факультетына тәғәйен килдем һәм маҡсатыма өлгәштем дә. Ауылымдың атамаһы русса булғас, миңә күптәр "Башҡортса беләһеңме?" тигән һорауҙы бирҙе. Ә имтихан рейтингы буйынса башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса мин икенсе урында тора инем. Шунда уҡып йөрөгәндә төркөмдәш ҡыҙҙар етәкләп тигәндәй "Юлдаш" радиоһы нигеҙендәге йәштәр интернет радиоһы конкурсына алып барғайны. Теләгем булмаһа ла, ҡыҙҙарҙың өгөтләүенә ҡаршы тора алмай ғына эйәргәйнем. Уйламағанда мине һайлап алдылар һәм шунда эшләп киттем.

Бөгөнгө ғаилә хәлегеҙ ҙә ҡыҙыҡһындыра беҙҙе?

Йәмил Ишмөхәмәтов: Минең ғаиләм бар. Мәктәп йылдарынан дуҫлаштыҡ кәләшем менән. Икебеҙ ике яҡҡа уҡырға ингәс, бер нисә йыл айырылышып торһаҡ та, хистәребеҙ һыналып, үҙ көсөн дәлилләп, ҡабаттан осраштыҡ һәм ҡауышып ҡуйҙыҡ. Биш йыл ғүмер йәшәп тә ташлағанбыҙ икән, ҡыҙыбыҙ һәм улыбыҙ үҫә. Ҡайтып инеүемә бәләкәстәрем һикереп-талпынып ҡаршы алалар. Уларҙы күреү менән башта булған бар хәсрәттәр сығып оса, онотола. Рәхәт, күңелле...

Филүс Ҡасимов: Буйҙаҡмын. "Ныҡлы буйҙаҡ" тип әйтергә лә була. Тик был минең тормош ҡарашым түгел. Бала саҡта ла, йәшлектә лә әле өйләнеү, матур кәләш, ғаилә тураһында хыяллана инем. Хатта был хаҡта башҡа нәмәгә ҡарағанда ла күберәк уйлағанмындыр әле. Һуңынан инде... Һуңынан үкенесле мөхәббәт булды һәм хыялдарым тормошҡа аша алмайыраҡ ҡалды. Теләгән кешем менән бергә була алмауҙы мин мөхәббәт донъяһына юлым ябылыу тип ҡабул иттемме, әллә яратҡанымды башҡалар менән алыштыра алмауымды аңланыммы, яҙмышты башҡаса һынаманым...

Ғәзиз Әбделмәнов: Мин дә өйләнмәгәнмен. Һөйгән ҡыҙым бар, әммә беҙҙең пландарыбыҙ үҙебеҙсә әлегә. Өлгөшәһе маҡсаттарыбыҙ, үтәйһе пландарыбыҙ бар. Тик минең өйләнмәгән булыуым әсәйемде нык борсой. Улар янында булғанда бөтөн хәбәрҙәр ҙә яйлап ошо темаға бара ла тоташа. Мәжлестәр "Давай, поженимся" тапшырыуына әйләнә лә китә. Шулай ҙа мин, ир-егет булараҡ, киләсәкте ҡайғыртмайынса, ныҡлы аяҡҡа баҫмайынса, өйләнмәү яҡлы...

Әшегеҙ һеҙҙең өсөн нимә ул? Аҡса эшләү урынымы, әллә йәшәү рәүешеме?

Филүс Ҡасимов: Йәшәү рәүешелер, сөнки аҡса эшләргә теләһәк, беҙ унда ултырмаҫ инек. Шаярыуһыҙ, ихлас күңелдән генә әйткәндә, мин, мәҫәлән, эшемде яратам. Һәр көн иртән яҡшы кәйеф менән юлланам. Ауырлыҡ, йөк, бил бөгөү итеп ҡабул итмәйем, ә хеҙмәтемдән ләззәт алып, ҡәнәғәт булып йөрөп ҡайтам. Коллективыбыҙ һәйбәт, ана шул коллегаларым менән аралаша алыу ҙа бер мәртәбә ул. Радио тыңлаусылар менән бәйләнешкә инеү, фекер алышыуҙар ҙа бер илһам сығанағы булып тора. Ошо яҡшы мөхит, ыңғай энергетика йәлеп итә лә беҙҙе эшебеҙгә, тип уйлайым.

Йәмил Ишмөхәмәтов: Әгәр мин радиоға килмәгән булһам да, башҡа өлкәлә лә ҡулдан килмәгән эшем булмаҫ ине. Быны мин өсөбөҙ исеменән дә әйтә алам. Филүс менән Ғәзиз, мәҫәлән, өй төҙөтһәң, өй төҙөй, көтөүгә ебәрһәң, көтөү көтә, тапшырыуға идея уйлатһаң, "һә" тигәнсе берәй нәмә ижад итә ала торған аҡыллы, белемле, киң даирәле, егәрле кешеләр. Шуның өсөн, улар йәки мин әлеге эшебеҙҙе найлап, унда тукталғанбыҙ икән, тимәк, был күңел талабы. Икенсенән, беҙ бер радио һәм телетапшырыу менән генә сикләнмәйбеҙ, һәм улыбыҙ үҫә. Ҡайтып инеүемә бәләкәстәрем һикереп-талпынып ҡаршы алалар. Уларҙы күреү менән башта булған бар хәсрәттәр сығып оса, онотола. Рәхәт, күңелле...

Филүс Ҡасимов: Буйҙаҡмын. "Ныҡлы буйҙаҡ" тип әйтергә лә була. Тик был минең тормош ҡарашым түгел. Бала саҡта ла, йәшлектә лә әле өйләнеү, матур кәләш, ғаилә тураһында хыяллана инем. Хатта был хаҡта башҡа нәмәгә ҡарағанда ла күберәк уйлағанмындыр әле. Һуңынан инде... Һуңынан үкенесле мөхәббәт булды һәм хыялдарым тормошҡа аша алмайыраҡ ҡалды. Теләгән кешем менән бергә була алмауҙы мин мөхәббәт донъяһына юлым ябылыу тип ҡабул иттемме, әллә яратҡанымды башҡалар менән алыштыра алмауымды аңланыммы, яҙмышты башҡаса һынаманым...

Ғәзиз Әбделмәнов: Мин дә өйләнмәгәнмен. Һөйгән ҡыҙым бар, әммә беҙҙең пландарыбыҙ үҙебеҙсә әлегә. Өлгөшәһе маҡсаттарыбыҙ, үтәйһе пландарыбыҙ бар. Тик минең өйләнмәгән булыуым әсәйемде нык борсой. Улар янында булғанда бөтөн хәбәрҙәр ҙә яйлап ошо темаға бара ла тоташа. Мәжлестәр "Давай, поженимся" тапшырыуына әйләнә лә китә. Шулай ҙа мин, ир-егет булараҡ, киләсәкте ҡайғыртмайынса, ныҡлы аяҡҡа баҫмайынса, өйләнмәү яҡлы...

Әшегеҙ һеҙҙең өсөн нимә ул? Аҡса эшләү урынымы, әллә йәшәү рәүешеме?

Филүс Ҡасимов: Йәшәү рәүешелер, сөнки аҡса эшләргә теләһәк, беҙ унда ултырмаҫ инек. Шаярыуһыҙ, ихлас күңелдән генә әйткәндә, мин, мәҫәлән, эшемде яратам. Һәр көн иртән яҡшы кәйеф менән юлланам. Ауырлыҡ, йөк, бил бөгөү итеп ҡабул итмәйем, ә хеҙмәтемдән ләззәт алып, ҡәнәғәт булып йөрөп ҡайтам. Коллективыбыҙ һәйбәт, ана шул коллегаларым менән аралаша алыу ҙа бер мәртәбә ул. Радио тыңлаусылар менән бәйләнешкә инеү, фекер алышыуҙар ҙа бер илһам сығанағы булып тора. Ошо яҡшы мөхит, ыңғай энергетика йәлеп итә лә беҙҙе эшебеҙгә, тип уйлайым.

Йәмил Ишмөхәмәтов: Әгәр мин радиоға килмәгән булһам да, башҡа өлкәлә лә ҡулдан килмәгән эшем булмаҫ ине. Быны мин өсөбөҙ исеменән дә әйтә алам. Филүс менән Ғәзиз, мәҫәлән, өй төҙөтһәң, өй төҙөй, көтөүгә ебәрһәң, көтөү көтә, тапшырыуға идея уйлатһаң, "һә" тигәнсе берәй нәмә ижад итә ала торған аҡыллы, белемле, киң даирәле, егәрле кешеләр. Шуның өсөн, улар йәки мин әлеге эшебеҙҙе найлап, унда тукталғанбыҙ икән, тимәк, был күңел талабы. Икенсенән, беҙ бер радио һәм телетапшырыу менән генә сикләнмәйбеҙ, аҡса эшләү өсөн башҡа төрлө юлдарыбыҙ ҙа бар. Минең кеүек балалар аҫыраған, донъя төҙәгән ғаилә башлығы өсөн күп һөнәрле булмау мөмкин дә түгел.

Ғәзиз Әбделмәнов: Бала саҡта атайҙың "шестеркаһына" бикләнеп, Рәстәм Ғиззәтуллиндың "Күстәнәс" тапшырыуын аҡыртып ҡуйып тыңлай торғайным. Радио тыңларға яраттым шулай. Ошондай халыҡ менән аралаша торған тапшырыуҙарҙы бигерәк тә. Телмәре яҡшы үҫешкән, тапҡыр алып барыусыларға һоҡлана инем. Үҙем был хаҡта хыяллана ла алмай инем әле. Ә инде радиоға килеп эләккәс, үҙемдәге ижади ҡомарҙы тотоноу, файҙаланыу юлдарын да таптым кеүек.

Ғәҙәттә, халыҡ сәйәсмәндәргә ҡарағанда шоумендарҙы яҡшыраҡ белә. Һеҙҙе урамда ла таныйҙарҙыр, шулай бит. Нисек ҡабул итәһегеҙ быны?

Филүс Ҡасимов: Мин, нисектер, ауырыраҡ ҡабул итәм. Ҡайҙалыр таныуҙары, күҙәтеүҙәре оҡшап етмәй. Иғтибар яратмайым. Радиола күренмәй ынша барған актуаль мәсьәләләрҙе, йәмғиәттең фекерен һәм башҡаларҙы күҙ уңында тотоп, сценарий төҙөйбөҙ. Быныңөсөн яңылыҡтарҙы ла, дөрөҫ мәғлүмәттәрҙе лә, имеш-мимештәрҙе лә, телдә йөрөгән уйҙырмаларҙы ла белергә бурыслыбыҙ. Икенсенән, беҙҙең бит тыңлаусылар менән тығыҙ аралашыу бар. Нимәнелер яңылыш әйтеп кенә ҡара, улар шундуҡ шылтыратып, төҙәтеп ебәрәсәк.

Ғәзиз Әбделмәнов: Ҡасандыр Эдельман исемле бер белгес килеп уҡытҡайны. Ул шунда "Радио хеҙмәткәре нисә сәғәт эшләргә тейеш?" тигән һорау биргәйне. Дөрөҫ яуап "24 сәғәт" булды. Йәғни, радио хеҙмәткәре автобуста китеп барғанда ла, ҡунаҡта ултырғанда ла, балконға сығып тәмәке тартып торғанда ла, телефондан һөйләшкәндә лә ижади процесс эсендә булырға тейеш. Асылда, бына ошо процестан сығып та булмай ул.

Филүс Ҡасымов: Радиола өйрәтеү мәктәбе яҡшы ҡоролған. Телмәреңдән, дикцияңдан башлап, фекер белдереүгә тик-

✓ *Телмәрҙе үҫтереү өсөн китап уҡыйһың, ҡыҙыҡлы булыу өсөн китап уҡыйһың, белемле булыу өсөн китап уҡыйһың, тарихты белеү өсөн китап уҡыйһың.*

лем. Һәм һөнәри нескәлектәргә лә бик-бик ентекле өйрәткән уҡытыусылар булды һәм әле лә бар. Бер генә хата ла, бер генә пауза ла иғтибарһыҙ ҡалдырылмай. Унан, иң ҙур ярҙамсы - һин үҙең, тигәнгә таянаһың. Мин, мәҫәлән, рус мәктәбен тамамланым, ә башҡортса телмәремде үҫаллы үҫтерҙем. Телмәрҙе үҫтереү өсөн китап уҡыйһың, ҡыҙыҡлы булыу өсөн китап уҡыйһың, белемле булыу өсөн китап уҡыйһың, тарихты белеү өсөн китап уҡыйһың. Илдә барғандарға хәбәрҙар булыу өсөн интернет киңлектәрендә соҡонаһың, ниндәйҙер фәнни һәм башҡа өлкәләр хаҡында һүҙ алып барыу өсөн айырым кешеләр менән кәңәшләшәһең. Ошоларҙы көн һайын үтәп барғанда, йоҡоға 4-5 сәғәт самаһы ваҡыт ҡала.

"Иртәнсәккәй тороп"то тыңлағанда ла һәм бына әле һеҙҙең менән күҙмә-күҙ һөйләшеп-аралашып ултырғанда ла, өсөгөҙ өс төрлө кешеләр булыуығыҙ аңлашыла. Донъяға ҡарашығыҙ ҙа, фекерҙәрегеҙ ҙә, принциптарығыҙ ҙа, холоҡтарығыҙ ҙа ҡырҡа башҡа, шулай бит? Һәм тәүлегенә егермешәр сәғәт бергә эшләү ваҡытында нисек һыйышаһығыҙ?

Филүс Ҡасимов: Ана шул төрлө булғанға ла һыйышабыҙҙыр. Унан һуң, беҙ бер йәштә лә түгелбеҙ. Йәш коллегаларым тәрбиәле, әхлаҡлы егеттәр, ололоҡлап, минең кәңәштәремде лә, тәнҡитемде лә тыңлайҙар, һүҙ күтәрә беләләр. Унан бер-беребеҙгә хөрмәтле, мәҙәниәтле булыу ҙа алға ҡуйылған. Радио ғир, фәлсәфәсе, идеясы итеп тә, "бәләкәй ҡустыбыҙ" тиеп тә яратабыҙ. Филүс үҙе үк шаяртыуҙарға, төртмә әйтештәргә, мәрәкәгә барымлы кеше. Уның менән иң ауыр мәлдәрҙе лә көлөп үткәрергә була. Тапшырыуҙарҙағы образдар иһә, әле егеттәр әйткәнсә, бәхәс, конфликт, драматизм яһау өсөн дә булдырыла. Унда ла һәр образдың "яҡлаусы" тыңлаусылары барлыҡҡа килә. Был үҙенә күрә уйын һымаҡ.

"Иртәнсәккәй тороп"тан һуң һеҙ "Теге өсәү" телетапшырыуын асып ебәрҙегеҙ? Фәмүмән, был тапшырыу юморға ғына ҡоролғанмы?

Йәмил Ишмөхәмәтов: Был тапшырыуға Филүс шунда уҡ лауҙар ҙа юҡ. Тапшырыу юморға ғына ҡоролмаған, унда ҡунаҡ шәхес булараҡ асыла, уның ижади хеҙмәте, эштәре күрһәтелә, донъяны нисек ҡабул итеүен аңғартыусы һөйләшеүҙәр алып барыла. Һәм, әлбиттә, былар барыһы ла уйын-көлкө аша бирелә лә.

Юмор мәҙәниәте тигән төшөнсә бар. Һеҙ быны тапшырыуҙарығыҙҙа әүҙем ҡулланаһығыҙ. Ниндәй маҡсатта ҡулланаһығыҙ юморҙы - көлдөрөү, тапшырыуҙы күңелле яһау маҡсатындамы, әллә, үрҙә әйтелгәнсә, терапия итепме, әллә башҡа сәбәптәре лә бармы?

Фәзиз Әбделмәнов: Бөгөн интернетта халыҡ шундай агрессив. Уйлап та тормайынса, тупаҫ яҙышалар, бер-береһен түбәнһетәләр, тупаҫ шаярталар. Бәлки, үҙҙәрен "мин дә ошо йәмғиәт вәкиле һәм минең дә тауышым бар" тигәнде шулай күрһәтергә теләйҙәрҙер - белмәйем, әммә үпкәләү, башҡаларҙы һәм илде нимәләлер ғәйепләү, асыуын сығарыу өсөн барыһын да эшләйҙәр. Юҡҡа үпкәләү һәм кәмһенеү - ул һинең шәхес булып формалашып етмәгәнеңдә, ныҡлы позицияларың юҡлығын ғына күрһәтә. Ә шаярта һәм шаяртыуҙы ҡабул итә, шулай уҡ агрессияны ла юморға бора белеү ул тап шул эстән ныҡлы, эстән көслө булыуҙың билдәһе, тип иҫәпләйем мин.

Тапшырыуҙарығыҙҙа һеҙ "ҡатын-ҡыҙ" темаһын да йыш ҡуҙғатаһығыҙ. Ә тормошта, ысынбарлыҡта ҡатын-ҡыҙға ҡарата ҡарашығыҙ, мөнәсәбәтегеҙ нисек? Ниндәй ҡатын-ҡыҙҙарҙан илһамланаһығыҙ, ниндәйҙәрҙе урап үтәһегеҙ һәм уларға тормошоғоҙҙа ниндәй урын бирәһегеҙ?

Йәмил Ишмөхәмәтов: Ҡатын-ҡыҙ ул минең өсөн иң беренсе сиратта ҡатыным. Мин был затты аңларға тырышам һәм һәр ваҡыт ташлама менән ҡарайым. Улар хис-тойғо менән эш итә торған халыҡ, күп ҡылыҡтары ла, хәбәрҙәре лә шул тойғолар аша килә. Шунлыҡтан, һәр ваҡыт ысынбарлыҡ хәлдәренә тап килмәҫкә лә мөмкин. Әммә улар быға яуаплы түгел. Ҡатын-ҡыҙ - ул яҡшы әсәй, йомшаҡ холоҡло ҡатын, иренә дуҫ-иптәш, ғаилә усағын һаҡлаусы, өйҙә йәм, йылылыҡ булдырыусы. Мин уларҙан артыҡты талап итмәйем. Ҡатын-ҡыҙға артыҡты йөкмәткәндең йәки үҙе шуға ынтылғандың аҙағы хәйерле бөтмәй, ғәҙәттә.

Филүс Ҡасимов: Миңә үткер ҡатын-ҡыҙҙар оҡшай. Аҡыллы, белемле, заман менән бергә атлаған гүзәл заттарға иғтибар итәм. Ниндәйҙер ижади эҙләнеү өҫтөндә булған, һиңә лә тыныслыҡ бирмәгән, янып-балҡып торғандарҙы үҙ күрәм. Ундай ҡатын- ҡыҙ янында ир-егеттәр ҙә йоҡонан уянып китә, турайып баҫа. Эшем бар, ашым бар, тип кенә йөрөгән егеттәрҙә лә маҡсат уята, яңынан-яңы үрҙәргә әйҙәй кеүек ундайҙар.

Фәзиз Әбделмәнов: Интернетта ҡыҙҙарҙың үҙҙәрен күрһәтергә тырышыуҙарын оҡшатмайым. Был бер минең генә фекер түгел, ә күпселек шулай ти. Әҙәпһеҙ фотолар, тәртипһеҙ постар, тыйыуһыҙ яҙмалар... Көнөнә ун төрлө фотоһын һала икән ҡыҙ, тимәк, ул иғтибарға мохтаж, уның тормошо тулы ҡанлы түгел, ҡыҙыҡһыныуҙары юҡ йәки самалы. Яҡындан аралашмай, әлеге интернет аша ғына ла ҡатын-ҡыҙҙың кем һәм ниндәй эстәлекле икәнен самалап була. Шул уҡ ваҡытта эргәмдә һоҡланғыс гүзәл заттар ҙа етерлек. Һәм мин уларҙан ниндәйҙер мөғжизә көтөп йәшәйем.

Киләсәккә пландарҙы күҙаллайыҡ әле. Мәҫәлән, "мин пенсияға сыҡҡас..."

Филүс Ҡасимов: Италия уҡ булмаһа ла, берәй Сочи тирәһендә үҙ йортомда йәшәргә хыялланам. Йылы, йомшаҡ климатлы, диңгеҙле яҡҡа тарта күңелем.

Йәмил Ишмөхәмәтов: Мөмкинлек булһа, мин ауылда йәшәп, шунан тороп та "Юлдаш" радиоһының алып барыусыһы була алыр инем. Ҡала мине ҡыҙыҡһынмай, ауылда ҡунаҡ булғанда ла, ҡаланы ҡарап ҡына ҡайтып китәм. Ауылда ҡыҙыҡлы эштәр бар, ә ҡалала ҡыҙыҡлы кешеләр бар. Ә мин ҡыҙыҡлы кешеләрҙе яратам.

ШАЯРТЫУҘЫ АҢЛАУ...

эстән көслө булыуҙың билдәһе

тыңлаусыларға ла, тамашасыға ла тап беҙҙең шулай өс төрлө фекерле булыуыбыҙ оҡшай. Бер юҫыҡта ғына хәбәр һөйләү ниндәй реакция уятһын? Унан, телмәр артындағы характер ҙа һиҙелә бит ул.

Фәзиз Әбделмәнов: Сценарий яҙған ваҡытта уҡ беҙ ниндәйҙер образды уйнайбыҙ. Хатта тыңлаусыларҙың яҡынса яуаптары ла билдәле була. Мәҫәлән, мин сценарий яҙғанмын икән, ундағы миңә төбәлгән һүҙҙәрҙе лә үҙемә үҙем яҙғанмын, шунлыҡтан, мин уларға үпкәләй ҙә алмайым. Ысынында ла, бына һеҙ күреп тораһығыҙ, Филүс менән Йәмил күберәк мине шаярта, халыҡсан итеп әйткәндә, мине көҙәкләй. Мин уларҙың янында "бәләкәй ҡусты" булып йөрөйөм. Тапшырыуҙарҙа йәки сәхнәлә беҙ йыш ҡына Филүстең йәшенән (йәнәһе, ул ҡарт егет), кәүҙәһенән көләбеҙ (йәнәһе, тумалаҡ). Унан аҙаҡ беҙгә шылтыратып йәки килеп үк төҙәтеп ҡуялар: "Нишләп ул оло булһын? Бына тигән, кәүҙәһе лә, үҙе лә!"

Йәмил Ишмөхәмәтов: Фәзиз ысын ижадсы ул. Беҙ уны шариза булмайыраҡ торҙо, ә мин былай ҙа телевидениела эшләп йөрөйөм бит инде. Был тапшырыу күберәк Фәзиздең файҙаһыналыр. Уның ысынлап та һәләттәре күп, белеме бар, тәкдимдәре етерлек, ҡыҫҡаһы, шәп егет. Шунлыҡтан, беҙ, йәш коллегабыҙҙың үҫешенә файҙалы булыр, тигән уй менән был проектҡа тотондоҡ.

Филүс Ҡасимов: Тапшырыу юмористик түгел, ә донъяға юмор аша ҡарауға ҡоролған. Шундай етди һәм проблемалар менән тулған йәшәйештә ана шул хәл-мәсьәләләргә, ауырлыҡтарға, эшләнгән эштәргә еңелсә шаяртыу аша ҡарай белеү барыһына ла хас түгел. Был үҙенә күрә бер психологик өлгөш ул. Тапшырыуға алынған геройыбыҙ менән дә беҙ бына ошо ысулды ҡулланабыҙ. Махсус терапия үткәрәбеҙ, шаяртыу терапияһы.

Фәзиз Әбделмәнов: Тапшырыу автомобиль эсендә алып барыла. Йәғни, хәрәкәттә, юлда бара. Әлегә ул башланғыс ҡына. Киләсәктә, бәлки, уның форматы бөтөнләй үҙгәреп тә ҡуйыр, шунлыҡтан, аныҡ ҡына күҙалларға ҡыйын. Беҙ ҡайҙа барыуыбыҙҙы, ниндәй маршрут буйлап барыуыбыҙҙы ла алдан әйтмәйбеҙ. Ул ҡайҙа барыуын беҙ үҙ-үҙебеҙ ҙә белмәйбеҙ. Ҡайҙа барырға, кемдәр менән осрашырға - ул беҙгә ҡайҙа барырға кәрәк, шунда барабыҙ. Ҡайҙа барырға кәрәк, шунда барабыҙ. Ҡайҙа барырға кәрәк, шунда барабыҙ.

✓ Әйтерһең, йәйге яланға бесәнгә генә китеп бара ла, кискә әйләнеп ҡайта. Урыҫ ауылына мәңгелеккә ҡайтмаҫҡа китеүен белмәй инде. Колбаса булып мосолмандар өҫтәлендә ятасағына төшөнмәй, бисара. Тағы күҙенә йәше тығылды.

Улар ҡапыл бер-береһенә ҡараны. Ҡараштар осрашты. Наҙлы ла, төптә һыҙланыусы ла ҡараштар. Ир тойғоларын йүгәнләп тота алмай ине. "Иң бәхетле көнөм минең бөгөн!" - тине.

Ҡайтҡанда яурын терәшеп йәнәшә ултырып ҡайттылар. Рәүефтең унан ысынлап та ире юҡлығын ныҡлап белешкеһе лә килде. Тик һорашманы, шундай татлы көнгә борос өҫтәп ни. Шулай ҙа, артабан нишләйбеҙ, тип һораны. Әлфиә тирә-йүнде байҡап тыныс ҡына килде, әйтерһең, уны ишетмәне лә. Бара торғас, битараф ҡына:

- Нишләйбеҙ тип, тормош артабан дауам итә, - тине. Уфтанманы ла. Әйтерһең, бер ни булмаған да. "Ауылда рәхәт тә һуң. Иртәгә, бөгөн шулай кинәнес булыр, ә артабан... Атай артыҡ тамаҡ күрә башлаясаҡ. Бар, иреңә ҡайт, тип тә екеренер. Рәүефтең үҙенең йорто юҡ, уға барып инер инең дә. Унан бигерәк, ашамайынса, кейенмәйенсә һөйөп-һөйөшөп кенә йәшәп ҡара. Был төпкөлдә ҡыҙынан нисек балерина яһар, Плисецкая булам, тип башты ҡатыра уныһы. Тапҡан бер һөнәр, нәҫелдә булмағанды. Юҡ, ул ҡуш ҡуллап ҡалыр ине Рәүеф менән, ярата ул уны. Уның тәне, еҫе, ҡарашы ҡалай таныһыҡ булып сыҡты. Ҡалай көслө, ҡеүәтле икән. Һигеҙ йыл эсендә ире бирә алмаған ләззәтте ярты сәғәт эсендә, ҡосағында, ярты көн һуҙымында янында татыта алды. Был оло ер шарында Рәүефтең йәндәшлеге барҙыр уға. Улайһа, шул тиклем ләззәт кисереп буламы ни?! Уның алдында яланғас килеш йүгереп йөрөһөн әле. Һис кем алдында, хатта законлы ире ҡаршыһында ла ундай аҙымға бара алмаҫ, оятынан ер тишегенә инер ине. Ә бөгөн... бөтә йәне, күңеле шуны һораны, шашҡыһы, ҡоралай булып сапҡыһы килде. Ки-иң яланда. Ҡысыҡ фатирҙа йәшәгәнендә, ире менән һөйөп-һөйөшөп туймағанында ла ошолай ирекле ҡош булып тауҙар-урмандар, сәскәле болондар өҫтөнән осҡоһо килә ине уның. Бөгөн осто, ысын мәғәнәһендә осто. Шунан артығы кәрәкмәйҙерҙә... Тик бына бисара Рәүефте ымһындырҙы. Әле бына уның йылы яурынын тойоп килеүе рәхәт тә. Келтер-келтер ошолай бар ҙа бар икән ул".

- Бәлки, нисек уйлайһың... - тине Рәүеф ҡыйыр-ҡыймаҫ. - Яусы ебәреү бер ни тормай.

- Ашыҡма, йәме, никах сәғәте етһә, тәңреләр былай ҙа еткерер, мин бит ир ҡатыны.

- Үҙең кисә, ирем юҡ, тинең дә.

- Юҡ, кисә-бөгөн күңелемдә юҡ. Ысынлап...

Башҡаса өндәшмәнеләр. Әлфиә ауылға инмәҫ борон уҡ төшөп ҡалды. Ят күҙҙәргә күренгеһе килмәне.

* * *

Шамил ҡайтҡас та Рафа уға йүгереп барҙы. Күрешкәс тә, бер-береһенең арҡаһынан ҡағып, ныҡ итеп ҡосаҡлашып алдылар. Һағынышҡандар. Шамил сатан аяғы менән бер уратып бейеп тә маташты. Тын алып ултырышҡас, Шамил Рафаға ҡарап көлөп ҡуйҙы.

- Һин дә моданан ҡалышмайһың, икеһен дә ҡырҙырғанһың әле, - тип ҡашына, дөрөҫөрәге, ҡаш үҫер урынға, иғтибар итте.

- Бик кәрәк ине, шуға икеһен дә - бер һабынлағанда залпом... Шунан, үҙең? Нисек ҡайтып еттең?

- Ғүмерҙә булмағанса юл уңды, Өфөнән аэропорт эргәһенә попуткаға сыҡҡайным. Нурисламдың кейәүе алып килеп ташланы. Машинаһы затлы. Себерҙән ҡайтып килә. Кешеләр йәшәй белә.

- Әлфиәнең ирeме? - дуҫының күҙҙәре янып китте.

- Эйе, һаман онота алмайһың шуны. Әлфиә юҡ ине унда. - "Беләм" тип саҡ ысҡындырманы бынаһы. - Тик артыҡ маһайыусан әҙәмгә оҡшаған кейәү балаҡай. Сатан булмаһаң, алмаҫ инем, ти.

Үҙе, Ташлыйылғаға тиһәм, ышанмай. Унан бигерәк, машинаға ултырғас, шаҡ катырҙы: "Һин салонда, зинһар, насар еҫ сығарма инде, әтеү еҫе креслоға һеңә. Үҙемдә, ҡыҫып-ҡыҫып киләм дә, ана тышта ғына газовать итәм," ти. Мин тәүҙә шаяра икән, тим. Бер аҙ барғас, машинаһын юлдан ситкә бороп туҡтатты был, шунан сыҡты ла "шарт-шорт" килде. Яңынан инеп ултырғас ҡына аңланым. - Егеттәр аҡырышып көләшөп алды. - Төрлө әҙәм бар донъяла. Салонды еҫләтеү һиңәме, әллә Әлфиәгә оҡшаймы, тиһәм, она же дикая, хоть тойота, хоть карета, тип көлә. Мунса кәритәһен әйтәлер инде. Нисек кенә булмаһын, рәхмәт, килтереп ташланы, аҡса алманы.

Рафа бер һүҙ ҙә әйтмәне. Әлфиәгә барырғамы, юҡмы бөгөн? Ир ҡатыны, тине шул. Тимәк, был байҙан китергә иҫәбе юҡтыр. Ҡашһыҙ, эшһеҙ ауыл мужигына килеп ятмаҫ инде.

- Аяҡты нишләттең?

- Икенсе ҡаттан һикереп ҡасырға уйлағайным да килеп сыҡманы.

- Федяның хәлен беләһеңдер.

- Әсәй һөйләне. Райүҙәккә барып, хәлен белергә кәрәк инде, аяғы ваҡытһыҙ...

- Алдағы көн уларға һуғылғайным, Сәлимә апай, ҡырҡ биш мең йыйҙыҡ, тағы ла бер ун-ун биш мең табаһы бар, тип ултыра ине.

- Әйҙә минең атты һатабыҙ. Радуловты, - Шома дуҫынан нишләптер ҡарашын йәшерҙе.

- Һин нимә, тере ҡулһыҙ ҡалаһың даһа.

- Федяны алып китһәләр, бына тере ҡулһыҙ ҡалам, Рафа. Һин дә. - Күҙенә тура ҡараны. Ҡараштары осрашты.

- Фәрит ағай үҙенең бейәһен иткә һалған, беҙ икенсе ҡышты атһыҙ сығабыҙ, Радуловтан да ҡалһаҡ, белмәйем, атһыҙ башҡорт тигән дан күтәреү ғәрлектер ул. Беҙгә килешмәҫ.

- Ҡаршы сығып, ат бәйләрлек дуҫың булмауы оят. Башҡа сара юҡ, минең ҡырылмаған һыңар ҡаш менән генә йыраҡ китеп булмаҫ. Киттек Поляковкаға.

- Хәҙер үкме ни? Шома, уйлайыҡ тәүҙә.

- Хәҙер үк, суд булып, төрмәгә бер япһалар, сығарып алып та булмаҫ. Ул саҡта алашаның һөйрәгән йөгө ни хәжәт, - "Радуловтың теле булһа, ул да изге дуҫлыҡ өсөн мине ҡорбан итегеҙ, тип әйтер ине", - тип уйланы Шамил. Тик бынаһын өндәшмәне. Аты ла йәл ине.

- Шулай ҙа тәүҙә белешеп киләм әле, бәлки тейешле суммаға тапҡандарҙыр. Атты әрәм итеп, - тине дуҫы. "Мә, юл ыңғай Радуловты алып ҡайтырһың", - тип йүгәнен тоторoп ебәрҙе Шамил. Рафа шәп-шәп атлап өҫкө урамдағы Фәрит ағайҙарға ашыҡты.

Шулай ҙа тәүҙә Нурисламдарға һуғылырға булды. Йөрәге шуны һораны. Теге "газовик" кейәүҙе лә күрер, Әлфиәнең күҙенә лә ҡарар. Ҡарашында уның бар күңел торошо сағыласаҡ. Тағы килергәме, юҡмы? Билдәһеҙлектә йөрөгәнсе. Бәлки, уның ярҙамы кәрәктер һөйгәненә.

Әҙәп һаҡлап, шаҡылдатҡас, Нурислам асты солан ишеген.

- Нимә ҡалалағы һымаҡ, йәнемә тейеп ишек шаҡып торған булаһың? Ни йомош? - кәйефе юҡ ине полицайҙың. Бындай мәлдә Әлфиә тураһында һорашыу урынһыҙ кеүек тойолдо.

- Кем ошаҡлаған? Фәнилде...

- Нимә мейемде серетәһең, барыбер әйтмәйем, дуҫың ғәйеплеме - ғәйепле. Белһең, үс алырға уйлайһыңмы?

- Үс алмайым, аҡса һорайым. Улай теле оҙон булғас, түләшһен дә.

- Аҡсаһы күп уның, тик бирмәйәсәк.

- Шул тип уйланым да.

- Кемде әйтәһең?

- Хаммат инде, мәғәнәһеҙ.

- Ул түгел, яңылышаһың, тағы бинаханаҡҡа кешегә йәбешеп йөрөмө, - лейтенант, ҡарашын ситкә алып, ишекте ябырға йыйынды. - Шул ғынамы йомошоң?

- Әлфиә кәрәк ине. Кластаташ...

- О, класташтар. Вадим кейәү алып китте, ҡотолдоҡ, бар, үҙең генә йөрө инде осрашыуға. Йүгән тотоп... - солан ишеге маңлай алдында шап итеп ябылды. Юҡ соландыҡы ғына түгел, ә йәшлек, мөхәббәт, хыял иленең оло ҡапҡаһы йоҙаҡланды Рәүефкә.

Фәрит ағайҙарҙа ла күңелгә ятыр хәбәр булманы. Ун биш меңләп етмәй. Пенсионерҙарға банк кредит бирмәй икән. Штраф түләнмәһә, суд. Һуғышып Федя 15 тәүлеккә эләккән ишеү - шул ғына етмәгәйне.

Оҙатырға сыҡҡанда, Фәриткә әйтмәй генә кискәрәк Хамматҡа барып баш эйерменме инде, тигәс, Сәлимә апайҙы Рәүеф ҡәтғи туҡтатты:

- Кәрәкмәй. Шамил ҡайтты, үҙебеҙ табабыҙ!

- Ҡайҙан?

- Үҙебеҙ беләбеҙ.

- Тик урлашып ҡуймағыҙ!

- Хоҙай ҡушмаһын, һин нимә, Сәлимә апай! - йүгәнен һелтәй-һелтәй ауыл осона юлланды.

Юлда мәрәкәсел Гәрәй осраны. Уныһы, егерме йыллап эсмәгән сауҙагәр Хамматтың ике көн лайаҡыл иҫерек йөрөүен, ҡарт бисәһен ҡыуып сығарып, теләгән һәр кемде сәмәй менән һыйлауын һөйләп китте. Рәүеф, дә-ә, эштәр харап икән, тип ҡуйҙы.

Радуловты алып ҡайтҡанда Шамил һаман да ҡапҡа алдындағы эскәмйәлә ултыра ине. Килеп туҡтағас та, кәйефһеҙ Рәүеф бойороҡ бирҙе:

- Әйҙә менгәш, киттек Поляковкаға. Атыңды иткә тапшырмайса булмай, ун биш мең етмәй.

Шамил иҫән аяғы менән эскәмйәгә баҫып, Рафа еңенән тартҡас, бейек һәм тыңлаусан Радуловҡа көскә-көскә менеп ултырҙы. Алға табан ынтылып, аттың муйынын, ялын ныйпаны. Инде ҡуҙғалғайнылар, Шамил:

- Туҡта әле, - тине. - Ҡайтҡанда нисек ҡайтам һуң, атһыҙ, аяҡһыҙ? Төшөр мине, Рафа.

Урап, яңынан эскәмйә эргәһенә килделәр. Шамил төшөп, атының башын ҡосаҡланы.

- Рәнйемә берүк, малҡайым. Күпте күрҙек, күпте кисерҙек. Үҙемә лә йәл, нишләйһең, - Шамил атының муйынын ҡосаҡланы, баштарын һыйпаны, ялын тарата. Үҙенең күҙҙәренә йәш килде. - Өфөлә саҡта көн дә төшөмә индең, бер минут та онотманым мин һине.

- Эй, эй, ир-егеткәй ҡурай уйнайҙыр, ат ялына йәбешеп илайҙыр. Ниндәй театр был, киттем мин, - йүгәнен тартып алды Рәүеф.

- Һин улай бик саптырып барма инде, яндырып ҡуйма... Нимә тип һөйләп торам, - йәшле күҙҙәре менән һыбайлыға ҡараны. - Ну, һин һатырға тырыш, бик оҫоҙ ҙа булмаһын. Үҙең дә беләһең инде.

Рафа ҡуҙғалғас, тағы һүҙ ҡушты.

- Аттың янған икәнен әйтмә. Уларға көрө, дәртлеһе кәрәк.

- Дуракмы әллә һин, бәйгелә сабаммы һуң, иткә алып китеп барам да.

- Бар суҡынып кит, иткә имеш...- Шамил ҡапыл ҡулын һелтәне лә, аҡһаҡлай-аҡһаҡлай эскәмйәгә барып ултырҙы.

- Һуйыусыларға янған башҡорт аты йәтеш тә, сығынламаҫҡа, - Рафаның мәғәнәһеҙ шаяртыуы оҡшаманы. - На-а. Әйҙә.

Ҡуҙғалдылар. Башын һелкә-һелкә, ҡойроғо менән себендәрҙе ҡыуа-ҡыуа ат еңелсә генә саптырып китте. Вә-әт, Радулов, ә, башын бороп та ҡарамай. Әйтерһең, йәйге яланға бесәнгә генә китеп бара ла, кискә әйләнеп ҡайта. Урыҫ ауылына мәңгелеккә ҡайтмаҫҡа китеүен белмәй инде. Колбаса булып мосолмандар өҫтәлендә ятасағына төшөнмәй, бисара. Тағы күҙенә йәше тығылды. Ул ҡапыл ҡалҡынып ҡуйҙы ла, тағы ултырҙы. Оҙаҡ ултырҙы.

- Нимә, егет, моңайып ултыраһың? - тигән тауышҡа һиҫкәнеп боролғайны, һаҡалын һыйпап, күршеһе Мостафа ҡарт йылмайып тора.

- Сатанлап ҡайтҡаныңды күрҙем дә. Бына бүләк алып килдем әле үҙеңә. - Уның ҡулында ... Ситдиҡ ҡарттың, Фәнилдең олатаһының ҡул таяғы ине. Уны күргәс, Шамил һиҫкәнеп урынынан шылып ҡуйҙы.

- Кәрәкмә-әй.

- Ал, хәжәте бар әле, музейҙа торорға өлгөрөр. Тик лайыҡлы ғына баҫып йөрө, - үҙе Шамил эргәһенә ултырҙы. Таяҡты икеһенең араһына һөйәне.

- Аяҡты ниндәй фронтта ҡазаланың?

- Поэзия һуғышында.

- Нисек?

- Аттар тураһында бер шиғыр уҡыным да, уны яҙған Ғилман тигән шағирҙы эҙләп юлға сыҡтым. Юлда барьер булған, һикереп сыҡҡайным, яйһыҙ барып төштөм.

- Ниндәй шиғыр? - Мостафа ҡарттың күҙҙәре балҡып китте. Шамил Радулов киткән яҡҡа ҡарап алды ла:

- Батып бара аттар диңгеҙҙә... - тип ҡуйҙы. Шунан теләр-теләмәҫ кенә шиғырҙың бер нисә юлын ҡабатланы.

Ул йылғаның осо-ҡырыйы юҡ,
тулҡын һөйрәй хәлһеҙ аттарҙы,
кешнәй-кешнәй һыу төбөнә китә
бер-бер артлы йылҡы баштары...

(Дауамы бар).

✓ *Сәхнә юморы, нишләптер, күп осраҡта, артыҡ ҡысҡырып һөйләшеүгә, самаһыҙ ҡысҡырып көлөүгә һәм сәхнәне бер итеп, улай-былай йүгереүгә, баҫтырышыуға ҡайтып ҡала. Яһалмалыҡ ярылып ята.*

ӘЙТӘГҮР!

БЕҘ ШАЯРА БЕЛӘБЕҘМЕ?

Беҙҙең халыҡ юморға бик бай. Мәрәкәләшеү, шаяртыу, төрттөрөү, үсекләшеү кеүек бер-беребеҙҙе көлдөрә, юғары эмоциялар тыуҙыра торған хәлдәрҙе яратабыҙ. Юмор беҙҙә етерлек тә, әммә ул юмор өйрәнелмәгән икән. Нимә ул халыҡ юморы? Сәхнәлә йәки әҙәбиәттә юмор бармы? Халыҡ юморы менән сәхнә юморы ни өсөн улай айырыла, һәм башҡалар. Бына ошо һорауҙарҙы беҙ гәзит уҡыусыларыбыҙға ла бирҙек һәм түбәндәге фекерҙәрҙе ишеттек:

Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА, яҙыусы: Элек "Һәнәк" журналы бик популяр ине. Мин шунда Тимер Арсландың шиғырҙарын көлә-көлә уҡый торғайным. Юморҙы бит һәр кем яҙа алмай. Уға айырым оҫталыҡ талап ителә. Марсель Сәлимов, Марат Кәримов был жанрға тоғролоҡ наҡлауҙары менән үрнәк. Ғөмүмән, шиғриәттә юморсатира бар ул, ләкин һәлкәүлек тә тойола. Бөгөнгө етешһеҙлектәрҙән көлөү ауырыраҡмы икән, бик ҡыйыу тотоноп киткәндәр, йәиһә ошо өлкәлә махсуслашҡандар юҡ. Сәхнәлә сығыш яһаусыларҙың да тырышлығы күберәк тамашасыны көлдөрөүгә генә йүнәлтелгән була. Халыҡ юморын өйрәнергә кәрәк. Һәр ауылдың, һәр райондың үҙ Насретдины була. Был бик тәбиғи.

Гәүһәр ФАЗУЛЛИНА, журналист: Ысынлап та, халыҡ юморға бик бай бит беҙҙә. Бына берәй ергә өс-дүрт кеше йыйылһын әле, шундуҡ шаярыша, ҡыҙыҡ нәмәләр һөйләшә башлайҙар. Ә өмәләр, ҡунаҡтар, мәжлестәр нисек үтә ине элек? Мәжлескә мотлаҡ бер шаян, мәрәкәсел кешене саҡыралар ҙа, ул барыһын да көлдөрөп, һындарын ҡатырып бөтөрә ине. Бөгөн халыҡ нисектер ҡороҡ, ҡырыҫыраҡ булып ҡалды һымаҡ. Был ана шул телевизорға, интернетҡа әүрәүебеҙҙән дә киләлер, тием. Бөгөн берәй балаға йәки йәш кешегә шаяртып өндәш әле - ул, аңламай, үпкәләп китергә йә тупаҫ яуапларға мөмкин. Ә элек беҙ ололар нимә тип мәрәкәләһә лә, аңлай, ҡыйыуыраҡтар шаярыуға ҡушылып китә ине.

Халыҡ юморы бар беҙҙә, ә бына сәхнә юморы юҡ кимәлендә. Махсус әҙерләнеп, яһалма шаяртыуҙы беҙ ҡабул итмәйбеҙ. Сәхнә юморы артыҡ ҡыланыуға, ауыҙ ҡыйшайтып, йөҙ боҙоп һөйләүгә, примитив, тапалған, тупһыҙ шаярыуға ҡайтып ҡалды. Юмор һөйләйһең икән, уның да эстәлеге булырға тейеш. Мәҫәлән, Петросяндың телмәренән көләһең дә, илайһың да бит. Залда ла кешеләр күҙ йәштәре аша көлөп ултыра. Сөнки ул һөйләгәндәрҙә йәшерен ауыртыныу ҙа, һағыш та, иң ауыртҡан ергә ҡағылыу ҙа бар. Сәхнә юморы шулай булырға тейеш тә. Тимәк, бындай юмор яһай алыу өсөн яҡшы психолог та, күҙәтеүсән, телгә бай яҙыусы ла булыу кәрәк. Тимәк, бер артислыҡ ҡына әле юморист тигәнде аңлатмай...

Лариса АБДУЛЛИНА, шағирә: Башҡорт халҡы борондан бер-береһенән нескә юмор менән көлгән. Төрттөрөргә яратҡан. Ауылдарҙа бит хатта ҡушаматһыҙ кеше юҡ. Әммә бөгөн беҙҙең милли юморыбыҙ юҡ кимәлендә. Телевизорҙан, сәхнәнән урғылып ағылған "ҡара юмор" - ул беҙҙеке түгел. "Теща" тиҙәр ҙә көлгән булалар. Ә бит беҙҙә, киреһенсә, кейәү менән ҡәйнә араһы - бик ҡәҙерле һәм үҙ-ара тәрән ихтирамға ҡоролған мөнәсәбәттәр. Марсель Сәлимовтың ҡайһы бер яҙмаларын иҫәпкә алмағанда, әҙәбиәттә лә юмор юҡ кимәлендә. Әҙәбиәттәге көлөү ғәйбәтсе фекере кимәленә төшөргә тейеш түгел бит, ә беҙҙекеләр шулай яҙа. Әҙәбиәт һүҙ сәнғәте икәнен онотоп ебәрергә ярамай. Үҙебеҙҙән башҡортса көлөргә лә онотоҡ: ихлас итеп, егеттәрсә, иҫкәртеп!

Үҙеңдән үҙең көлә белеү - ул үҙеңә үҙеңә тәнҡит күҙлегенән ҡарай белеү, эске камиллыҡ хаҡында һөйләй. Нисек кенә булмаһын, көлөү - әгәр ул кешенең иң тәрән хистәренә ҡағылмаһа, бик файҙалы күренеш ул.

Зилә НИҒМӘТУЛЛИНА, тарихсы: Рәсәй кешеһен бөгөн юмор ғына йәшәтә ала. Үҫешкән бер илдә лә булмаған медицина, мәғариф кимәленә, ипотека, кредит түләүҙәренә, эшһеҙлеккә, аҙ эш хаҡына, депутаттар эшенә, коррупцияға, ғөмүмән, илдәге төрлө күренештәргә юмор менән ҡарау кәрәк. Был хәлдәрҙең кире яғын уйлаһаң, ятып үлергә мөмкин. Мин, мәҫәлән, яңыраҡ Енәйәт кодексына "власты хөрмәт итмәгән өсөн" тигән статья өҫтәгәндәрен ишетеп, көнө буйы "йылмайып" йөрөнөм. Кәрәкмәгән ерҙә ауыҙ асып һүҙ һөйләмәҫкә кәрәк инде былай булғас. Артыҡ мәғәнәгә эйә булмаған Камеди клаб, Камеди вумен телевизион тапшырыуҙарының халыҡ араһында популяр булыуы ла илдәге киҫкен хәлдәргә нервыларҙы бөтөрмәү ысулылыр. Ундай тапшырыуҙар халыҡты юмор менән түгел, позитив менән йәлеп итә. Халыҡ нимәнән позитив эҙләргә белмәй бит хәҙер. Сәхнә юморы, нишләптер, күп осраҡта, артыҡ ҡысҡырып һөйләшеүгә, самаһыҙ ҡысҡырып көлөүгә һәм сәхнәне бер итеп, улай-былай йүгереүгә, баҫтырышыуға ҡайтып ҡала. Яһалмалыҡ ярылып ята. Юмористар урыҫтың Петрушкаһы образына инеп китте. Хәйер, мин башҡорт сәхнәһенән юмор эҙләмәйем дә. Ә халыҡ араһында иһә юмор етерлек. Иҫ киткес ҡыҙыҡлы, йор һүҙле, күңелле ҡыланышлы, шуҡ хәбәрле туғандарым, дуҫтарым, таныштарым бар. Шундайҙар менән бер һөйләшеп-көлөшөп алһаң, күңел дә күтәрелә, ыңғай ҡараштар барлыҡҡа килә, әллә ниндәй артистарың ары торһон...

ТӘҮБӘ

КОТОЛАЙЫҠ...

иблис ҡотҡоһонан

Алтынсы һабаҡ - айыҡ ҡараш, позитив фекерләү, үҙеңдең көсөңдө дөрөҫ баһалау һәм үҙ-үҙеңә ышаныу

Башта эскән кешенең тормошҡа ҡарашын асыҡлап ҡарайыҡ. Башҡорт башынан үткәнде һөйләй, тиҙәр. Алыҫ йөрөйһө түгел. Үҙ тормош тәжрибәмдән сығып фекер йөрөтәм.

1. Кәрәк ваҡытта "юҡ" тип әйтә алмау.

Иң тәүҙә тәҡдим ителгән рюмканан баш тартырға өйрәнергә кәрәк. Әлбиттә, берәү ҙә һинең ауыҙыңды шаҡарып араҡы ҡоймай. Шулай ҙа, ҡайһы бер мәжлестәрҙә эсмәгән кешегә кәмһетеп ҡарайҙар, мыҫҡыл итергә тырышалар. Эсеүҙән баш тартыусыға "ауырыу", "дауаланған", "эсһә, холҡо юҡ", "әллә кем булып ултыра", "беҙҙе әҙәмгә һанамай" тигән ярлыҡ та таға башлайҙар хатта. Төрлөсә өгөтләүҙәр башлана, хатта эсмәгән кешенең елкәһенә, башына араҡы ҡойған йәмһеҙ күренештәрҙең шаһиты булғаным бар. Ҡайҙан килә ундай ҡырағайлыҡ? Һис шикһеҙ, эске мәҙәнилек булмауҙан. Бындай саҡта үҙ позицияһы булған, ҡәтғи итеп "юҡ" тип әйтергә өйрәнгән кеше генә башҡаларға ҡаршы тора ала. Әммә күп кешегә, етмәһә, иҫерек кешеләргә, яңғыҙ ҡаршы тороуы еңел түгел. Шуға күрә, хәлде ҡырҡыулаштырмаҫ өсөн, уйынкөлкөгә бороп ебәрергә лә була. Сөнки айныҡҡас, улар һинең кеүек үк уйлаясаҡ, дөрөҫләгөңдө инҡар итмәйәсәк. "Мин әйтмәнем, араҡы әйттергәндер", - тип аҡлана бер танышым йыш ҡына. Айыҡтың - уйында, иҫеректең - телендә, тиҙәр. Ә эсмәгәндең уйында нимә? Әлбиттә, айыҡ (позитив) фекер. Телендә лә шул. "Юҡ" тип әйтә белмәйһең икән, елкәңә менеп ултырасаҡтар, тормош сәхнәһендә театр ҡурсағы кеүек уйнатасаҡтар. Был бер эскелеккә генә ҡағылмай. Тимәк, эсеүҙе ташлау өсөн иң тәүҙә фекерләүеңде үҙгәртергә бурыслыһың, шунһыҙ, айыҡ тормошоңдоң оҙаҡҡа һуҙылмауы ихтимал. "Простота хуже воровства" ти урыҫтар. Ҡатмарлы заманда бер ҡатлылыҡ беҙҙең файҙаға түгел шул.

2. Башҡаларҙы ҡайғыртып, үҙең тураһында онотоу.

Ябайыраҡ итеп әйткәндә, ыштанһыҙлыҡ. Башҡаларҙы уйлау, тәү ҡарашҡа, бигүк насар ҙа түгел һымаҡ. Ләкин иҫеректән ни алаһың инде? Нимә бирә ала ул? "Рәтлеккә" аҡсамы, аҡыллы кәңәшме, ярҙаммы? Кәңәш һәм ярҙам иң тәүҙә ошо кешеләрҙең үҙҙәренә кәрәк бит. Эскәндә йомарт булғандар, күп осраҡта, айыҡҡас һаранға әйләнеүсәндәр. Айыҡ кеше генә тирә-яҡтағыларға файҙалыраҡ бит. Бик етди, сетерекле мәсьәләләр килеп сыҡҡанда, эсмәгән кешегә мөрәжәғәт итергә тырышалар түгелме һуң? Эскән кешегә ышанырға буламы? Ышаныслы буламы инде эсенә шайтан инеп ултырған кеше?

3. "Мин үҙем шәпмен, башҡаларға ялынырға яратмайым".

Әлбиттә, эскәс, шәпһең. Эскәндә, диңгеҙ тубыҡтан шул. Күркә кеүек ҡупайып йөрөгәнсе, айыҡ килеш уйланыу фарыҙдыр. Эсеүен ташлаған ҡайһы берәүҙәр ҡапыл үҙгәрә. Үҙҙәрен әллә кемгә ҡуйып, башҡаларға юғарынан ҡарай башлай. Әлләсе, үҙемдә ундай үҙгәреш тоймайым. Ғаилә, туғандар, дуҫтар менән мөнәсәбәт элеккесә ҡалды шикелле. Эскән кешегә, бигерәк тә туҡтауһыҙ эскәндәргә ҡарата йәлләү тойғоһо ғына артты. Әммә ул тойғоно уларға һиҙҙермәҫкә тырышам, сөнки шул уҡ йәлләүҙә улар үҙҙәренә аҡланыу эҙләй башлай. "Эйе шул, мин шулай шул, ихтыяр көсөм етмәгәс, эсәм шул...", йәки булмаһа: "Эсеп үлермен инде...", "Ярай әле, һин мине аңлайһың, шуның өсөн дә бир әле бер яртылыҡ рәт...".

Етенсе һәм һуңғы һабаҡ - эсеүҙе ташлағас, маһаймау

Маһайырҙай, маҡтанырҙай бер нием дә юҡ. Элек нисек булғанмын, шулай ҡалдым. Тик эсеүемде генә ташланым. Быны һәр кем булдыра ала. Шуға күрә һабаҡтарымды ла аңлап, дөрөҫ ҡабул итегеҙ, зинһар өсөн. Был аҡыл өйрәтеү түгел. Бары башымдан үткәндәрҙе ғибрәт итеп яҙҙым.

Мораҙым ӘХМӘТОВ.

(Дауамы бар).

✓ *Әммә был проблема бер Бөрйәндә генә түгел, бар урманлы райондарҙа ла бар. Ҡайһы берәүҙәрҙең ашаған икмәге лә шул бит, әммә улар "Берҙе ҡырҡһаң - икене ултырт", тигән әйтемде тотамы икән?*

ИНТЕРНЕТТАН



ӘРЕМ ШИФАҺЫ

■ Бөйөк Британия ғалимдары билдәләүенсә, ҡатын-ҡыҙҙарға ир-егеттәргә ҡарағанда оҙайлыраҡ йоҡо талап ителә. Бәҡтиһәң, ҡатын-ҡыҙҙарҙың баш мейеһе бер юлы төрлө мәсьәләләрҙе хәл итеүгә һәләтле һәм көн дауамында көсөргәнешлерәк эшләй. Баш мейеләренең "ҡатмарлы" булыуы сәбәпле, ҡатын-ҡыҙҙарға оҙағыраҡ йоҡлау талап ителә. Йоҡлаған саҡта мейенең хәтер, уйҙар, телмәр өсөн яуап биргән өлөшө хис-тойғолар тыуҙырған көсөргәнештән арынып, ял итә икән. Быға тиклем ғалимдар артыҡ йоҡлауҙың да зыян булыуы хаҡында белдергәйне. Йоҡо туймау йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлегенә, ҡан баҫымына йоғонто яһай, ә артыҡ йоҡлау йөрәк сирҙәренә алып килә.

■ Әле һаман кешелек яман шешкә ҡаршы дарыу таба алмай. Америка ғалимдары яңы методика уйлап тапҡан, уның нигеҙендә ябай әрем үҫемлеге ята. Табиптар фекеренсә, әрем 16 сәғәт эсендә яман шеш күҙәнәктәренең 98 проценты юҡҡа сығарырға һәләтле. Уның составында артемизин тигән матдә бар, әгәр ҙә уны тимер менән бергә ҡулланғанда, онкологик сирҙәрҙе дауалап буласаҡ. Әлеге мәлдә тикшеренеүселәр әремдән дарыу яһауҙы өйрәнеү өҫтөндә.

■ Төнөн йоҡлаған ерҙә ут янып торһа, кешенең биологик ритмдары боҙола, сөнки йоҡо өсөн кәрәкле гормон мелатонин бүленеп сығыу кәмей. Был гормон етешмәһә, диабет, һимереү, хатта яман шеш башланыу ихтимал, ти белгестәр. Ҡыҙыл һәм әфлисун төҫөндәге стеналар стресс кимәлен күтәрә, тире ҡысыл башлай. Был турала Корнелль университеты ғалимдары иҫкәртә. Стеналар ни тиклем сағыуыраҡ, кеше шул тиклем тиҙерәк ашай икән, шуға ла аш-һыу бүлмәһе сағыу булмаһын, тиҙәр. Йоҡо бүлмәһенең стеналары зәңгәр булһа, яҡшыраҡ, шул саҡта йоҡо туясаҡ.

■ Артыҡ ауырлыҡтан ҡотолоу, тән ауырлығын нормала тотоу өсөн спорт кәрәкмәй, ти Лондондың иҡтисад мәктәбе ғалимдары. Уларҙың әйтеүенсә, даими рәүештә көнөнә 30 минут йәйәү йөрөүсе бөтөн йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар һәм 50 йәштә үткән ир-егеттәр әүҙем күнегеүҙәр яһау менән шөғөлләнеүселәргә ҡарағанда еңелерәк булған. Йәйәү йөрөгәндә ауыр эштә эшләүселәр ҡулланған көскә тиң энергия тотонола. Статистика буйынса, 2025 йылға өлкән йәштәге халыҡтың дүрттән өс өлөшө һимереү менән яфаланасаҡ. Табиптар физик әүҙемлеккә аҙнаһына 150 минут бүлергә кәңәш итә. Тимәк, ваҡытығыҙҙы ниндәй шөғөлгә бүлергә кәрәк икәнен хәҙер һеҙ ҙә белһегеҙ.

■ Бер төркөм Америка ғалимдары 15 йылға һуҙылған тикшеренеүҙәр үткәреп, тормошҡа ыңғай ҡараштa булыу ғүмерҙе оҙайтыуын асыҡлаған. Кем йышыраҡ йылмая, уларҙың йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы нығыраҡ була икән. Тикшеренеүҙәрҙә 45-84 йәштәге 5100 кеше ҡатнашҡан. Тән массаһы индексы, ҡандағы холестерин һәм глюкоза кимәле, артериаль ҡан баҫымы кеүек факторҙары менән бер рәттән, уларҙың оптимист йәки пессимист булыуына ла иғтибар иткәндәр. Асыҡланыуынса, оптимистарҙың сәләмәтлеге күпкә яҡшыраҡ икән.

ШАҢДАУ

АҒАС ҠАРҒЫШЫ - ИҢ АУЫРЫ БИТ...

Март айы, көн менән төн тигеҙләшкән осор, тәбиғәт тә тап ошо ваҡытта уяна тип һанаған боронғолар. Шуғалыр ҙа, был ай экологик йәһәттән дә бик әһәмиәтле булған даталарға бай: 20 мартта - Бөтә донъя Ер көнө, 21 мартта - Халыҡ-ара урман көнө, 22 мартта иһә Бөтә донья һыу ресурстары көнө билдәләнде. Ошондай даталар булдырылып, халыҡтың иғтибары ошо изге төшөнсәләргә, уларҙы һаҡларға, ҡәҙерләргә кәрәк икәненә йүнәлдерелһә лә, тәбиғәтебеҙҙең, урмандарыбыҙҙың бөгөнгө хәле борсолдора. Был хаҡта "Киске Өфө"нөң 11-се һанында Бөрйәндән Заһир Дәүләтбирҙин да яҙып сыҡайны. Һүҙҙе дауам итмәксемен.

Интернет селтәрендәге мәғлүмәттәргә ҡарағанда, хәҙерге ваҡытта планетала урман 38 миллион квадрат километр майҙанды тәшкил итә. Уның яртыһы - тропик урмандар. Белгестәр иҫәпләүенсә, һуңғы 10 мең йыл эсендә кешелек 26 миллион квадрат километр урманды юҡҡа сығарған. Ә бит урман ресурстарын ҡулланыу арта ғына бара! Йыл һайын 13 миллион гектар урман ҡырҡыла - был Англияның майҙанына тиң булған территория. Урмандың әһәмиәте бик ҙур: ул 80 процент ҡоро ерҙә йәшәүсе тереклектең йәшәү урыны булып һанала. Бынан тыш, ул атмосфераны кислород менән байытыуға ла ҙур өлөш индерә, урман ҡырҡылһа, йылғаларҙағы һыу ҙа ҡорой башлай, климат та үҙгәрә, ел көсәйеүе тупраҡтың уңдырышлылығының кәмеүенә лә килтерә. Ошо экологик проблемалар һуңғы йылдарҙа ысынлап та күҙгә күренә башланы түгелме?

Төрлө тәбиғи процестар ҙа урманға тәьҫир итә, әлбиттә, әммә кеше хәлде тағы ла киҫкенләштерә. Интернеттан алынған был һандар күңелгә ҙур шом һала. Хатта хәл тағы ла мөшкөлөрәк булырға ла мөмкин әле, сөнки был күрһәткестәр иҫәбенә законһыҙ рәүештә ҡырҡылған урман инмәй. Халыҡ шаһит - үҙебеҙҙең Бөрйән районында ғына ла күпме ағас кешеләр тарафынан аяуһыҙ ҡырҡыла һәм эшкәртелеп тә тормайынса, ситкә сығарыла. Әммә был проблема бер Бөрйәндә генә түгел, бар урманлы райондарҙа ла бар. Ҡайһы берәүҙәрҙең ашаған икмәге лә шул бит, әммә улар "Берҙе ҡырҡһаң - икене ултырт", тигән әйтемде тотамы икән? Боронғоларҙың "Ағас ҡарғышы - иң ауыры" тигәнде лә оноторға ярамай.

Урман ҡырҡыу проблемаһына беҙҙә тейешенсә иғтибар ителмәй ҙә һымаҡ ул. Сөнки Бөрйән-Мораҡ йүнәлешендә генә бер төн эсендә ҡайһы саҡ тиҫтәнән ашыу машина Бөрйән ағасын тейәп үтә. Хатта һәр яҙ юл кипкәнсе ауыр техникаларҙың йөрөүен сикләүҙәр ҙә ағас ташыусыларҙың кәсебен туҡтатмай. Тап ошо ваҡытта улар үткәндән һуң юл иҙелә. Ерле халыҡ йорт төҙөргә ағас ала алмаһа, кемдәрҙер артыҡ ыҙа күрмәйенсә, кәсеп итерлек кимәлдә ағас йығырға яйын таба.

Ә бүтән илдәрҙә нисегерәк һуң? Мәҫәлән, бер йылды беҙ, "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы хеҙмәткәрҙәре, Польшаға стажировкаға барҙыҡ. Илдең Августов урмансылығына килгәндең беренсе көнөндә үк хужалар беҙҙе урманға алып барҙы. Был урында кисә генә ағас әҙерләү эштәре тамам булды, тинеләр. Бер ағас та, өйөлгән ботаҡ та, хатта быҫҡы онтағы ла күренмәй. Аптырап, тирә-яғыбыҙҙы байҡайбыҙ. Баҡһаң, ағасты ер тиңенән ҡырҡалар, төпһә һерәйеп ултырып ҡалмай, ботаҡтар һәм быҫҡы онтағы ла эргәләге фанера эшләү заводына эшкәртелеү өсөн ебәрелә икән. Бер нисә көндән ҡырҡылған ағастарҙың һәр береһе янына мотлаҡ шул төргә ҡараған йәш үҫентеләр ултыртыласаҡ, тип тә өҫтәнеләр. Урманда ял итеүселәр өсөн махсус экологик һуҡмаҡтар эшләнгән, йәйәүләләр һәм велосипедлылар өсөн улар айырым махсуслаштырылған һәм билдәләр ҡуйылған. Һәр урмансылыҡта беҙҙең илдең тәбиғәт парктарындағы, ҡурсаулыҡтарҙағы кеүек экологик ағартыу бүлектәре эшләй. Төрлө урмансылыҡтарға ҡараған ҡала-ауылдар янындағы урмандар ял итеүселәр менән тулһа ла, бер ерҙә лә яңылыш ҡына аунап ятҡан ҡый, тәмәке төпсөгө күренмәне. Улар, ысынлап та, урманды, ер-һыуҙы һаҡлайҙар һәм кешене бәләкәйҙән шулай тәрбиәләйҙәр. Беҙ үҙебеҙҙең менталитетҡа һылтанып ултырған арала тәбиғи байлығыбыҙ юҡҡа сыҡмаҫмы икән?

ӘЙТКӘНДӘЙ...

60 йыл элек Александр Рюмин Шүлгәнташ мәмерйәһендә тәүтормош кешеләренең һүрәттәрен табып, Башҡортостанды бөтә донъяға билдәле иткән асыш яһаны. Ошо мөһим датаға ҡарата "Шүлгәнташ" дәүләт тәбиғәт биосфера ҡурсаулығы һеҙҙе республика кимәлендәге ижади конкурста ҡатнашырға саҡыра. Эштәр "А.В.Рюмин - Шүлгәнташ мәмерйәһендәге боронғо һүрәттәрҙе тәү башлап асыусы", "Шүлгәнташ мәмерйәһенең башҡорт фольклорындағы урыны", "Шүлгәнташ - Рәсәйҙә һәм Көнсығыш Европала иң боронғо картиналар галереяһы" темаларына ярашлы башҡарылырға тейеш. Конкурс 15 мартта старт алып 20 апрелгә тиклем бара. Еңеүселәр 30 апрелгә тиклем ҡурсаулыҡтың сайтында, социаль селтәрҙәрҙәге рәсми төркөмдәрҙә иғлан ителәсәк. Шулай уҡ иң яҡшы эштәр "Бәйләнештә" селтәрендәге беҙҙең "С любовью, Шульган-Таш!" тип аталған рәсми төркөмөбөҙҙә һалынып барыласаҡ. Еңеүселәрҙе дипломдар һәм иҫтәлекле бүләктәр көтә. Эштәрҙе түбәндәге адрес буйынса ебәреүегеҙ һорала: 453585, Бурзянский район, д. Иргизлы, ул. Заповедная, 14. Мәғлүмәттәр өсөн телефон: (34755) 3-37-10; 967 740 99 30; электрон адрес - lx1985@mail.ru. Конкурс барышы менән "Шүлгәнташ" дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығының рәсми сайтында www.shulgan-tash.ru таныша алаһығыҙ.

Ләлә ХӘЙБУЛЛИНА,
"Шүлгәнташ" ҡурсаулығы хеҙмәткәре.
Бөрйән районы.

ЙӨРӘК СЕРЕ

МИН - ҒАШИҠ ЙӘН

Мин ғашиҡмын. Йәшемде яҙып тормайым. Йәш кеше түгелмен инде. Әммә йәштәрҙән дә былайыраҡ ғашиҡмын. Хис-тойғоға бирелеү бер йәштәргә генә хас нәмә түгел, әммә ул беҙҙә, ололарҙа, сикләнгән. Йәнәһе - ярамай.

Йәшлек мөхәббәтем менән интернет аша ҡабаттан табышып, аралашып киттек. Һәм мин ҡабаттан уға ғашиҡ булдым. Һәр хәлдә, күңелем шундай тулы бөгөн. Бөтә кешегә лә яҡшылыҡ эшләгем генә килеп тора. Хәҙер күп нәмәгә икенсе күҙлек аша ҡарайым, күп нәмәне аңлайым. Әгәр йәшлектә үк ошоларҙы кисерә алған булһам, тормошомдағы күп нәмәләрҙе икенсерәк башҡарған булыр инем, тип уйлайым. Ул саҡта, һөйгән кешем менән айырылышҡас, йомоҡ, ҡаты күңелле ҡатынға әүерелгәйнем. Һәм шулай булып йәшәнем дә. Ғаиләм булды, балалар үҫтерҙем. Эшкә барҙым да, эштән ҡайттым...

Һөйгән кешемдән бер нәмә лә көтмәйем һәм артығы кәрәк тә түгел. Бары тик әллә ниҙә бер яҙған матур һүҙҙәре лә етә. Шул һүҙҙәрҙән мин сәскә атам да ҡуям. Иремә лә яғымлымын. Уны ла нисек бар, шулай ҡабул итәм хәҙер. Киленемә лә иплемен. Ул да ҡатын кеше, ул да йылылыҡҡа мохтаж. Улыма хәҙер "Киленде ярат, яҡшы һүҙеңде йәлләмә", тип әйтеп кенә торам. Эштә лә, өйҙә лә миндәге үҙгәрешкә иғтибар итәләр, сәбәбен белмәһәләр ҙә, барыһы ла шат.

Ғашиҡ булыуым менән бәхетлемен. Әлдә Хоҙай миңә ошо хисте биргән, әлдә шул хистән мәхрүм итмәгән. Бөгөн килеп, шуны аңланым: мин яратыуға ғына мохтаж ҡатын-ҡыҙ икәнмен. Йәғни, ғашиҡ булыуҙы һәм шул хистәргә яуап алыуҙы күптән көҫәп йөрөгәнмен. Был хәлемдә эргәмдәге барыһын да бәхетле итә алам. Беҙҙе көслө һәм ҡаты иткән нәмә - ул яратылмау икән. Яратылмау арҡаһында беҙ донъяны ла ҡараңғы һәм төҫһөҙ итәбеҙ. Ғашиҡ була белмәү арҡаһында хисһеҙ тормошта йәшәйбеҙ. Яратыуҙы ниндәйҙер түбән, бысраҡ, әҙәпһеҙ нәмәгә һынайбыҙ. Яҡты хистәр бер нисек тә түбән була алмай. Бәхетһеҙ ҡатын эргәләгеләрен дә бәхетһеҙ итә...

ГӨЛҺЫЛЫУ.

✓ *Ял тигән яңы дәүер уның өсөн тынғыһыҙ һәм дәртле "үҙ хәбәрсе" эше менән бәйле. Ә был эште татып ҡарағандар матбуғат хеҙмәтенең битараф булмаған йөрәкле кешенән тотош ғүмерен һораған дейеү менән бер иш икәнен яҡшы белә.*

"КИСКЕ ӨФӨ" КИТАПХАНАҺЫ

Барыһы ла ике блокноттан башланды. Китапсыҡ кеүек ҡаты тышлы был ҡалын дәфтәрҙәргә Фәүзиә апай үҙенең бала саҡ һәм йәшлек иҫтәлектәрен теркәгән. Ҡулъяҙманы уның иң яҡын дуҫтары Роза апай Юлдашбаева менән Альбина апай Исхаҡовалар, үҙҙәре әйтмешләй, "йығылып ятып" уҡып сыға. Роза Рафиҡ ҡыҙы дәфтәрҙәрҙе миңә тапшырған саҡта: "Был - беҙҙең быуындың яҙмышнамәһе", - тине.

БӨРЙӘН ЙӨРӘГЕ,

йәки Фәүзиә апай китап яҙҙы

Быйыл һигеҙенсе март алдынан Өфөләге "Самрау" нәшриәтендә Фәүзиә Усмановаңың "Бөрйән йөрәге" тип аталған баҫмаһы донъя күрҙе. Ул әлегә ике китаптан тора, өсөнсө китапта дауамы буласаҡ, сөнки авторҙың тынғыһыҙ йөрәге яна, уйлана, күҙәтә, ҡулы ҡәләмгә үрелә. "Донъя менән бәйләнешем - телевизор, гәзит, журналдар, күрше магазинда һөтикмәк һатыусы ҡыҙҙар, киоскыла минең өсөн конверт тотоусы ҡатын... Яҙғанымды боронғоса конвертҡа һалып, почта аша ебәрәм. Яҡындағы йорт диуарында ҡыйшайған булһа ла почта йәшниге бар ине, уны ла алып ташлағандар. Хәҙер почта бүлеген эҙләп, ике квартал урам аша барырға тура килә. Барам. Миңә кәрәк бит. Бәлки, дуҫтарыма ла кәрәктер минең хаттарым..." Ҡыҙғаныс, Рәсәй почтаһы тигән күренеш тарихта күмелеп ҡалырға самалай, ләкин хат яҙыусылар һәм гәзит-журнал уҡыусылар уны һаман йәшәтә.

Тәүге китапта - балалар йорто хәтирәләре. Уның өсөн иң ҡәҙерле иҫтәлектәр - Бөйөк Ватан һуғышынан һуң Өфө ҡалаһына, балалар йортона килеп эләгеү тарихы. Биш йәшендә ул үҙенең тыуған яғы Бөрйән районы Килдеғол-Һарағы ауылынан бер төркөм етем балалар менән бергә баш ҡалаға оҙатыла. 1-се, 5-се, 9-сы балалар йортонда һәм 1-се мәктәп-интернатта уҡыған осорҙа күргән-белгәндәре онотолмай, һәр ваҡиға күңеленә уйыла, ғүмере буйы оҙатып бара торған "ҡара һаҡал" - холоҡ, белем, тәжрибә булып ҡала. Ә холоҡ - ул яҙмыш. Кеше үҙ ғүмеренең һәр осорон юлында осраған өлкәндәр, дуҫтар һәм дуҫ булмағандар менән бәйләнештә үтеп сыға. Өфөлә балалар йортонда үҫкән ваҡыт, Мәскәүҙә Юғары сәнғәт-сәнәғәт уҡыу йортонда уҡыған дәүер, аҙаҡ тыуған республика сәнғәтенә фиҙакәр хеҙмәт итергә тырышҡан йылдар - Фәүзиә апайҙың яҙмалары һәр ваҡиғаның һәм осрашыуҙың кеше өсөн Хоҙай тарафынан ебәрелгән һынау икәнен иҫбатлай.

Икенсе китапҡа Фәүзиә апайҙың "Киске Өфө" гәзите биттәрендә баҫылған мәҡәләләре тупланды. "Киске Өфө" һабаҡтары" тип аталған йыйынтыҡ еңел уҡымлы һәм ғәжәп теремек халыҡсан аҡылдың күргәҙмәһе булып тора. Баҫманың баш мөхәррире Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева китапҡа алһүҙҙә былай тип яҙа: "Вайымһыҙлыҡ миңә хас түгел, башҡаларҙы ла битараф булмаҫҡа саҡырам". Ошо ярһыу оран менән яҙылған хәбәрҙәре "Фәүзиә Яхина", "Фәүзиә Усманова", "Айгөл Яхина" тигән исемдәр аҫтында "Киске Өфө" гәзитенең "Кинәйә", "Ишара", "Бер кәлимә һүҙ" һәм башҡа рубрикаларында 2004 йылдарҙан башлап бөгөнгәсә баҫыла. Гәзитебеҙҙең һәр һанына тиерлек үҙ баһаһын бирә, фекеркәңәштәре менән уртаҡлаша, тәнҡитләп тә ҡуя ул. Шуныһы ҡыҙыҡ: был апайҙың тәҡдимдәрен дә, теләктәрен дә ҡабул итәбеҙ, сөнки улар тос, сәпкә, сәмгә тейә. Фәүзиә апайҙың юғары кимәлдә фекерләү ҡеүәһе, һүҙ маһирлығы, белем тәрәнлеге беҙҙе гел һоҡландыра..."

Фәүзиә апай Усмановаңың "Киске Өфө" гәзитендәге ғәжәп тура һүҙле, фәһемле фекерҙәрен быға хәтле һоҡланып уҡый торғайным. Ул бөтә ярһыу йөрәген асып, әйтәлмай ҡалған һүҙҙәрен, көндәртөндәр буйы мейеһен быраулаған уйҙарын, халыҡ, ил, балалар һәм өлкән быуын тормошо өсөн борсолоуҙарын, ниһайәт, ташҡа баҫып илгә таратты. "Киске Өфө" өсөн ул иң таныҡ һәм ҡәҙерле авторҙарҙың береһе, баҫманың баш мөхәрриренән башлап, һәр журналист, һәр уҡыусы Фәүзиә апайҙы ысын мәғәнәһендәге "үҙ хәбәрсе" һәм илһөйәр ватандаш тип таный. Уҡыусыны уйлата, тетрәндерә, уята алырҙай "халыҡ хәбәрсеһе" республика, ил тормошондағы, йәмғиәттәге, кешеләр психологияһындағы һәр үҙгәрешкә һиҙгер, үҙ юғарылығынан баһалай, тәғәйен уйын һәм теләктәрен әйтә белә. Заман дауылында үҙ ырыуы йөрәген елкән итеп киргән ҡәләм оҫтаһының замандаштарға әйтер һүҙе бик күп.

Ләкин "Фәүзиә апай" тигән "айсберг"тың һикһәнде ваҡлаған оло кеше булыуын кем белә? "Киске Өфө"ләге яҙмалар уның донъяһының бер өлөшө генә. Фәүзиә Усманова - Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, фарфор һәм керамика белгесе. Уның ижады - статуэткалар, паннолар, вазалар, сәй сервиздары - башҡорт милли сувенирының классик үрнәге. Күп эштәре С.Г. Строганов исемендәге Мәскәү һынлы сәнғәт-сәнәғәт академияһында, Башҡортостандың М.В. Нестеров исемендәге һынлы сәнғәт музейы, Башҡортостан Милли музейы фондтарында, шәхси коллекцияларҙа һәм авторҙың архивында һаҡлана. Оҙаҡ йылдар буйы Башҡортостан Хөкүмәте янындағы махсус ижадханала эшләй оҫта, аҙаҡ Өфөнөң Черниковка биҫтәһендәге "Балалар ижад йортонда" педагог булып, 16 йыл буйы йәш балаларға керамик һауыттар, фигуралар эшләү серҙәрен өйрәтә. Әле ул хаҡлы ялда. Хәйер, ял тигән яңы дәүер уның өсөн тынғыһыҙ һәм дәртле "үҙ хәбәрсе" эше менән бәйле. Ә был эште татып ҡарағандар матбуғат хеҙмәтенең битараф булмаған йөрәкле кешенән тотош ғүмерен һораған дейеү менән бер иш икәнен яҡшы белә.

Фәүзиә апайға "Бөрйән йөрәге" тигән уникаль китаптары өсөн бөтә йөрәктән рәхмәт әйтке килә. Ысынлап та, үҙ тыуған яғының - мәшһүр Бөрйәненең шаңы һәм заңы уға һәр саҡ ярҙам итә. Авторҙың китабын йүгертеп йортона алып барып биреүсе, һөйөнсө сәйен эсеп, бергә ҡыуаныусылар - балалыҡ дуҫтары Роза Юлдашбаева менән Альбина Исхаҡова был мәлдә ҡәҙерле әхирәттәренә бала саҡтағыса тағы һоҡланды, уның уңышынан бәхетле булып ҡотланы-гөрләште. Илаһи дуҫлыҡ менән мөхәббәттә йәшәгән мәлдәр фани көн-төн иҫәбенә инмәй, Хоҙай ундайҙарҙың ғүмерен оҙайта, тиҙәр. Шулай булһын.

Сәрүәр СУРИНА,
китаптарҙы төҙөүсе.

(Фәүзиә апайҙың эштәре).

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

20-30 тапҡыр ҡабатлағас, туҡыманы сисегеҙ һәм икенсе күҙегеҙҙе бәйләгеҙ. Күҙ көсөргәнештән арынып, алыҫтағы нөктәгә лә, яҡындағыһына ла еңел генә ҡарай ала башлағас, күҙҙең дүрт тура мускулы көсөргәнештән арынырға риза була һәм күҙ ус яҡынайғанда һуҙыла. Хәҙер һеҙ эшкә тотона алаһығыҙ.

Будильникты үҙегеҙ күргән ергә ҡуйығыҙ. Әгәр күреү һәләтегеҙ яҡшы икән, уны ҡаршы яҡ стенаға ҡуйырға мөмкин. Бер күҙегеҙҙе яулыҡ менән бәйләп, башта будильниктағы 1 һанына, һуңынан ҡул сәғәтендәгеһенә, көсөргәнмәй генә ҡарағыҙ. Бер секундҡа ғына күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм тын алып, тынығыҙҙы сығарғанда тағы ла ҡул сәғәтенә ҡарағыҙ.

- Тәүге осорҙа һеҙгә ҡул сәғәте телдәренең нык яҡты булып күренеүе ярҙам итер, - тип кәңәш итә профессор. - Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм башығыҙҙы ян-яҡҡа бороғоҙ. Хәҙер будильниктағы 2 һанына һәм һуңынан ҡул сәғәтендәгегә ҡарағыҙ. Ҡул сәғәтендәге һандар асығыраҡ күренә башларға тейеш. Әгәр улай түгел икән, көймәгеҙ. Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, башығыҙҙы борғолағыҙ һәм тын алып, будильниктағы һәм ҡул сәғәтендәге 3 һанына ҡарағансы ял итеп алығыҙ.

Был күнегеүҙе 12 һанына тиклем эшләһәгеҙ, ҡул сәғәтендәге һандар асығыраҡ күренә башлар. Күҙҙәрегеҙҙе көсөргәндермәгеҙ, бары тик күреү һәләтен хеҙмәттәшлеккә саҡырығыҙ.

Тәүге осорҙа ҡул сәғәтен уңайлы араулыҡта тотоғоҙ, сөнки башҡарыу еңеллеге генә уңыш килтерә! Әгәр тәүҙә ҡул сәғәтенең һандары асыҡ күренмәһә, көйәлләнмәгеҙ.

Хәҙер ҡасандыр күргән матур нимәнелер күҙ алдына килтереп, күнекмәнән ситләшеп тороғоҙ. Һуңынан инде йомолған күҙегеҙҙе ҡояшҡа ҡуйығыҙ, шул арала башығыҙҙы ян-яҡҡа борғолағыҙ. Әгәр яһалма яҡтылыҡ файҙаланаһығыҙ икән, ут ябыҡ күҙ ҡабаҡтарына төшһөн.

Үрҙә яҙылған күнегеүҙе икенсе күҙегеҙ менән ҡабатлағыҙ. Шунан инде ике күҙегеҙ өсөн дә соляризация һәм пальминг эшләгеҙ. Хәҙер һеҙ уҡырға әҙер!

Уҡығандағы төп ҡағиҙәләр

- Дөрөҫ тын алыуығыҙҙы белер өсөн ҡысҡырып уҡығыҙ. Күҙҙәре көсөргәнештә булған кешеләр, ғәҙәттә, күҙ менән эшләгәндә тын алыуын туҡтатып тора.

- Шрифтты йөҙөгөҙгә тура тотоғоҙ һәм уҡыған ыңғайы башығыҙҙы яй ғына бороғоҙ.

- Башығыҙҙың хәрәкәтен уҡыу менән тап килтерергә кәрәкмәй. Улар бары тик күҙҙәрҙе көсөргәнештән арындырыу сараһы ғына булып хеҙмәт итә. Башығыҙҙы яй, талғын ғына бороғоҙ, әммә ошо ваҡытта күҙҙәр мөмкин тиклем шәп йөрөргә тейеш. Селтәрле шекәрәнең нервы күҙәнәктәре секундына 70 тапҡыр яҡтылыҡ импульсы алып, ярһырға тейеш.

С. КУЗИНА.
(Дауамы бар).

1 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 1 апреля. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Подкидыш". [16+]
23.30 "Познер". [16+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.00 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "На краю". [16+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

БСТ

7.00 Сәләм. [12+]
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]
11.00 Итоги недели (на рус. яз.).
11.45 Специальный репортаж. [12+]
12.00 Счастливый час.
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә.
14.30 КВН. Юниор-Лига. [6+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе... [6+]
16.00 Новости (на рус. яз.).
16.15 "Гора новостей".
16.30 Т/с "Любовь тракториста". [16+]
17.30 Новости (на рус. яз.).
17.45 Интервью. [12+]
18.00 Юмор разных лет... [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.00 Новости (на рус. яз.).
20.15 Дорожный патруль. [16+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
21.00 "Теге өсәү!" [12+]
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Вечерний телецентр.
22.45 Новости (на баш. яз.).
23.15 Колесо времени. [12+]
0.15 Х/ф "Многоточие". [16+]
2.30 Бәхетнамә. [12+]
3.30 Спектакль "Среда, среда". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

2 АПРЕЛЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 2 апреля. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Подкидыш". [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.00 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "На краю". [16+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

БСТ

7.00 Сәләм. [12+]
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз.).
11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 Счастливый час.
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә.
14.30 Дорога к храму. [0+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
16.00 Новости (на рус. яз.).
16.15 "Гора новостей".
16.30 Т/с "Любовь тракториста". [16+]
17.30 Новости (на рус. яз.).
17.45 Интервью. [12+]
18.00 С мотором... [12+]
18.15 Инцидент-репортаж. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
18.45 Хоккей. КХЛ. Плей-офф. Финал конференции "Восток". "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омская область).
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Вечерний телецентр.
22.45 Новости (на баш. яз.).
23.15 Күстәнәс. [12+]
23.45 Современник. [12+]
0.00 Х/ф "Дорога". [12+]
2.30 Бәхетнамә. [12+]
3.30 Спектакль "Молодые сердца". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

3 АПРЕЛЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 3 апреля. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Подкидыш". [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.00 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "На краю". [16+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

БСТ

7.00 Сәләм. [12+]
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз.).
11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00 Счастливый час.
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә.
14.30 "Аль-Фатиха". [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Бала-сага. [6+]
16.00 Новости (на рус. яз.).
16.15 "Гора новостей".
16.30 Т/с "Любовь тракториста". [16+]
17.30 Новости (на рус. яз.).
17.45 Интервью. [12+]
18.00 "Бай". [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.00 Новости (на рус. яз.).
20.15 Дорожный патруль. [16+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
21.00 Историческая среда. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Вечерний телецентр.
22.45 Новости (на баш. яз.).
23.15 Бала-сага. [6+]
0.00 Х/ф "Пираты Эгейского моря". [12+]
2.15 Бәхетнамә. [12+]
3.15 Спектакль "Муж и жена - одна сатана". [12+]
5.00 "100 имен Башкортостана". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

4 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 4 апреля. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Подкидыш". [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.00 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "На краю". [16+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

БСТ

7.00 Сәләм. [12+]
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз.).
11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 Счастливый час.
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә.
14.30 Д/ф "Галерея изящных искусств". [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [6+]
16.00 Новости (на рус. яз.).
16.15 "Гора новостей".
16.30 Т/с "Любовь тракториста". [16+]
17.30 Новости (на рус. яз.).
17.45 Интервью. [12+]
18.00 Деловой Башкортостан. [12+]
18.15 Инцидент-репортаж. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
18.45 Хоккей. КХЛ. Плей-офф. Финал конференции "Восток". "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омская область).
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Республика Live. [12+]
22.45 Новости (на баш. яз.).
23.15 "Песня года". [12+]
23.45 Замандаш. [6+]
0.00 Х/ф "Самый лучший папа". [16+]
2.15 Бәхетнамә. [12+]
3.15 Спектакль "Таштугай". [12+]
5.00 Д/ф "Уҙаман". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

5 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 5 апреля. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.20 "Вечерний Ургант". [16+]
0.15 Премьера. "Жизнь других". [18+]
1.10 Х/ф "Неукротимый". [16+]
3.30 "Модный приговор". [6+]
4.25 "Мужское / Женское". [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Аншлаг и Компания. [16+]
0.00 Х/ф "Жизнь рассудит". [12+]
3.50 Т/с "Сваты". [12+]

БСТ

7.00 Сәләм. [12+]
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Д/ф "Тайны космоса". [12+]
11.00 Новости (на рус. яз.).
11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00 "Йома". [0+]
12.30 Башҡорттар. [6+]
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Автограф. [12+]
14.00 "Весело живем". [12+]
14.15 "Красная кнопка". [16+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 "Алтын тирмә". [0+]
16.00 Новости (на рус. яз.).
16.15 "Гора новостей".
16.30 Д/ф "Хозяйка залива Счастья". [12+]
17.00 Д/ф "Моя планета Башкортостан". [12+]
17.30 Новости (на рус. яз.).
17.45 Интервью. [12+]
18.00 У дачи. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 "Башҡорт йыры-2019". [12+]
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.00 Новости (на рус. яз.).
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
21.00 Башҡорттар. [6+]
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Вечерний телецентр.
22.45 Новости (на баш. яз.).
23.15 Караоке по-башкирски. [12+]
0.00 Х/ф "Джокер". [12+]
1.30 Спектакль "Мелодии весны". [12+]
3.15 Д/ф "Хазина". [6+]
3.45 Д/ф "Хозяйка залива Счастья". [12+]
4.15 Х/ф "Джокер". [16+]
5.30 Д/ф "Тайны космоса". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

6 АПРЕЛЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Новости.
6.10 Т/с "Штрафник". [16+]
8.10 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
8.55 Умницы и умники. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Времена не выбирают". К юбилею Владимира Познера. [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "Идеальный ремонт". [6+]
13.10 Премьера. "Живая жизнь". [12+]
14.40 Премьера. Концерт, посвященный 100-летию Финансового университета. [12+]
16.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.50 "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
19.30 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Премьера. "Главная роль". [12+]
0.30 Х/ф Премьера. "Белые рыцари". [16+]
2.40 "Модный приговор". [6+]
3.35 "Мужское / Женское". [16+]

РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Х/ф "Портрет женщины в красном". [12+]
13.40 Х/ф "Цвет спелой вишни". [12+]
17.30 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
20.45 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
22.55 Х/ф "Второе дыхание". [12+]

БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 М/ф "Чичиленд". [0+]
8.45 "Большой чемодан. [6+]
9.30 Моя вершина. [12+]
9.45 С мотором... [12+]
10.00 "Физра". [6+]
10.15 "Перекличка". [6+]
10.30 "Книга сказок". [0+]
10.45 МузКәрәҙ. [0+]
11.00 "Городок АЮЯ". [0+]
11.15 Х/ф "Тайна Шихан". [6+]
12.00 Күстәнәс. [12+]
12.30 Новости (на баш. яз.).
13.00 "100 имен Башкортостана". [12+]
13.30 Хазина о Хазине. [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 "Музыка ветра". Концерт группы "Курайсы". [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.00 Моя вершина. [12+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 "Байык-2019". [12+]
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]
22.30 Итоги недели (на баш. яз.).
23.15 "Башҡорт йыры-2019". [12+]
0.00 Х/ф "Отпетые напарники". [16+]
1.45 Итоги недели (на баш. яз.).
2.30 Спектакль "Индийская насмешница".
4.15 "Весело живем". [12+]
4.30 Х/ф "Отпетые напарники". [16+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

7 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30 Т/с "Штрафник". [16+]
6.00 Новости.
6.10 Т/с "Штрафник". [16+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Премьера. "Жизнь других". [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Д/ф "Михаил Пуговкин. "Боже, какой типаж!" [12+]
13.10 Х/ф "Свадьба в Малиновке". [0+]
15.00 "Три аккорда". [16+]
17.00 Премьера. "Ледниковый период. Дети". Новый сезон. [0+]
19.25 "Лучше всех!" [0+]
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Что? Где? Когда?" [16+]
23.45 Премьера. "Русский керлинг". [12+]
0.50 Х/ф "Большие надежды". [16+]
2.50 "Мужское / Женское". [16+]

РОССИЯ 1

4.30 Т/с "Сваты". [12+]
6.35 "Сам себе режиссёр".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Смеяться разрешается.
14.00 Вести.
14.10 Д/ф "Валентина". [12+]
16.00 Х/ф "Анютины глазки". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.50 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
1.50 Х/ф "Портрет женщины в красном". [12+]
3.35 Т/с "Гражданин начальник". [16+]

БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 Ҡурай даны. [12+]
9.00 "Бай". [12+]
9.30 Күстәнәс. [12+]
10.00 Бирешмә. Профи. [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.30 Байтус. [6+]
11.45 Медовая страна. [6+]
12.00 Бай баҡса. [12+]
12.30 Итоги недели (на баш. яз.).
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Дорога к храму. [0+]
16.30 Историческая среда. [12+]
17.00 Д/ф "Я поступлю как велит совесть". [12+]
18.30 Х/ф "Женюсь!" [12+]
18.45 Деловой Башкортостан. [12+]
19.00 Полезные новости. [12+]
19.15 Лидеры региона. [12+]
19.45 Әлләсе... [6+]
20.30 "Теге өсәү!" [12+]
21.00 Республика Live. [12+]
21.30 Итоги недели (на рус. яз.).
22.15 Специальный репортаж. [12+]
22.30 "Красная кнопка". [16+]
23.15 "Байык-2019". [12+]
0.15 Х/ф "Апостол. Отцовский инстинкт".
1.45 Спектакль "Великий обольститель". [12+]
4.15 Полезные новости. [12+]
4.30 Историческая среда. [12+]
5.00 Д/ф "Млечный путь". [12+]
6.00 Итоги недели (на рус. яз.).

НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1440 һижри йыл.

Апрель (Рәжәб-шәғбан)	Иртәнге намаҙ	Ҡояш ҡалҡа	Өйлә намаҙы	Икенде намаҙы	Ақшам намаҙы	Йәстү намаҙы
1 (25) дүшәмбе	5:21	6:51	13:30	18:20	19:50	21:20
2 (26) шишәмбе	5:19	6:49	13:30	18:22	19:52	21:22
3 (27) шаршамбы	5:16	6:46	13:30	18:24	19:54	21:24
4 (28) кесе йома	5:14	6:44	13:30	18:26	19:56	21:26
5 (29) йома	5:11	6:41	13:30	18:27	19:57	21:27
6 (1) шәмбе	5:09	6:39	13:30	18:29	19:59	21:29
7 (2) йәкшәмбе	5:06	6:36	13:30	18:31	20:01	21:31

"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.

✓ *Байҙарҙың юҡ-барға аҡса сарыф итеүен күреү нисек йәл! Уларға ярҙам итеп тә булмай бит - шуныһы ҡыҙғаныс.*

(Пьер Данинос).

АФАРИН!

БАЛАЛАР ҘА...

шаяра, мәрәкәләй белә

Яугир юлын үтеп, киләсәк быуындарға аяҙ күк йөҙөн аманат итеп ҡалдырған Мостай Кәримгә һәм Башҡортостан Автономияһына 100 йыл тулыуға, Рәсәйҙә "Театр йылы" үткәрелеүгә бағышланған "Шаяниум" бәйгеһенең шаяндарын һәм тапҡырҙарын был юлы шағирҙың "Түп-түңәрәк ер ҡалдырам һеҙгә, сатнамаған ҡояш ҡалдырам..." тигән шиғыр юлдары илһамландырҙы.

Ун етенсе тапҡыр үткәрелгән "Шаяниум" конкурсында быйыл Өфөнөң төрлө белем усаҡтарынан барлығы 31 команда ҡатнашҡан һәм финал уйындарына шуларҙың ун бише сыҡҡан. Был ярышта, ғәҙәттә, балаларҙың көнүҙәк мәсьәләләрҙе күҙ уңынан ысҡындырмауына шаһит булына. Быйыл да сығыштарҙа ойоштороусылар тәҡдим иткән дөйөм темаларҙан тыш, республикала булған хәл-ваҡиғалар сағылыш тапты. Мәҫәлән, Өфөнөң 48-се башҡорт лицейы "Сәтәкәй" командаһынан булған малайҙың химия дәресендә "Магний, калий, о! Һаумыһығыҙ, Радий Фәритович!" тип һикереп килеп тороуы бөтә тамашасыларҙы гөү килтерҙе. Ғөмүмән, уҡыусыларҙың юмор күҙлегенән бер нәмә лә ситтә ҡалмай икәнен быйыл да күрҙек. 122-се башҡорт гимназияһының "Ша-шу-ша" шаяндары юбилейына әҙерләнгән Башҡортостандың башындағы тажын һалдырып, ҡамсат бүрек кейҙереп ҡуйҙы. "Өфө" футбол клубының музейына барып, күргәҙмәләрҙе ҡарап йөрөгән арала "О, кубок!" тип ҡысҡырып ебәргән иптәшен "Был бит ваза" тип төҙәткән Спорт профилле мәктәп-интернатының "InterСпорт" командаһы уйынсыһы шул рәүешле әлегә тиклем футболсыларыбыҙҙың ҙур наградалар яулай алмауын төшөндөрҙө. Ғөмүмән алғанда, йылдан-йыл "Шаяниум"дағы юмор, көләмәстәрҙең тематикаһы ла, сифаты ла үҙгәрә. Был юлы Республика инженер лицей-интернатының үҙҙәрен "башҡорт феминисткалары" тип таныштырған "Ҡыҙҙар.com" командаһы аңлайышһыҙ шаяртыуҙары менән шаҡ ҡатырҙы. Ә бына был белем усағының күптән билдәле һәм тамашасы яратып ҡабул иткән малайҙар командаһы "Башҡорттар.RU" һәр ваҡыттағыса шәп сығыш яһаны. Уларҙың көләмәстәре лә урынлы, музыкаль сығыштары ла бәйгелә ҡатнашыусыларҙың талантлы булыуын сағылдырҙы, сәхнәлә үҙҙәрен ышаныслы тотоуы һәм бер ҙә яңылышып тормауы әсир итте. Әммә жюри ағзалары "Башҡорттар.RU" командаһы сығышын быйыл баһалап еткермәне...

Юмор артында һәр саҡ ысынбарлыҡ йәшерелгән булыуын белһәк тә, уны аңлауы бер аҙ аптырашта ҡалдырҙы әле. Физика фәненән тик бишлегә өлгәшкән улын атаһы "Ғүмер буйы физика уҡытыусыһы булырға йыйынаһыңмы әллә?" тип битәрләп, аҡылға ултыртырға йыйыныуын күрһәткән Өфө ҡалаһы Ф. Мостафина исемендәге 20-се башҡорт гимназияһының "ХХ централ" командаһы "күҙҙәрҙе асты". Ысынлап та, бөгөн ҡайһы мәктәп балаһынан һорамаң да, "Киләсәктә уҡытыусы булам", тигән яуап алырмын тимә. Ғөмүмән, "Шаяниум" ағай-апайҙар, атай-әсәйҙәр, уҡытыусылар өсөн мәктәп йәшендәгеләрҙе аңларға ярҙам иткән бер сара инде ул. Бына М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының "Кендектәр" командаһы уйынсылары сағылдырған ваҡиғаны миҫалға алайыҡ. "Атай-әсәй, миңә ноутбук кәрәк!" тип маҙаға тейгән малайға өлкәндәр бер тынала: "Шаймурат, үҙеңдең теләктәреңде тый әҙерәк! Беҙ һинең туғаныңа былай ҙа Айфон тип исем ҡуштыҡ", - тиҙәр. Кемдәндер күреп, ата-әсәһенән йүкә һуйҙырған үҫмерҙәр юҡ түгел, беҙҙең балалар шуны үҙҙәре лә белә икән.

"Шаяниум" конкурсы быйыл көтөлмәгән һөҙөмтәләре менән ҡыуандырҙы һәм уҡытыу башҡорт телендә алып барылған белем усаҡтары араһында III урынды "InterСпорт" менән "Рәссамдар" бүлеште, II урынды - "Ша-шу-ша", I урынды "Сәтәкәй" командаһы алды. Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәр араһында III урынға "Искәндәр бабай" һәм "Көлсә" сыҡты, II урында - "Хыялый-зыялыйҙар", I урында - "Кырғаяҡтар". Ә бына иң төп бүләк - Гран-прины маҡсатлы "Кендектәр" яуланы. Йола буйынса билдәләнгән "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" һәм "Иң яҡшы ир-егет роле" номинацияларын "Ша-шу-ша" командаһы ағзаһы Наҙгөл Ғарифуллина менән "Етегән+1" командаһы ағзаһы Арыҫлан Хәмитов алды. "Шаяниум"да ҡатнашҡан бүтән командаларҙы ла бағыусылар төрлө номинацияларҙа бүләкләне һәм бер уҡыусы ла буш ҡул менән ҡайтманы. "Былтыр килеп сыҡмағас, киләһе йыл мотлаҡ еңәбеҙ, тип үҙебеҙгә һүҙ биргәйнек, - ти "Кендектәр"ҙең капитаны, 7 синыф уҡыусыһы Рамаҙан Ҡаҙаҡбаев. - Ныҡлап әҙерләндек, яңылышмаҫ өсөн һүҙҙәрҙе ятланыҡ, дәрестәрҙе күп ҡалдырҙыҡ һәм төндәрен дә йоҡлап булманы. Еңеүгә айырыуса шатмын, сөнки киләһе йыл Берҙәм дәүләт имтихандарына әҙерлек башланһа, мин "Шаяниум"да ҡатнаша ла алмам әле..."

ШУЛАЙ ИТЕП...

Уҡыусыларҙың эскерһеҙ шаяртыуҙары, бер ҡатлы көләмәстәре һәр ваҡыт бөтә тамашасыларҙы ла йылмайта, көлдөртә һәм улар ихлас күңелдән алҡышлай торғайны. Тик был юлы тамашаға килгән балалар, нишләптер, тиҫтерҙәренең сығыштарына бер аҙ битараф булды, хатта сара бөтмәҫ борон залдан тороп сығырға ашыҡты. "Шаяниум" ойошторола башлағандан алып ун етенсе йыл буйындан-буйынға күсә килгән юморға һөйөү, кешеләргә көлкө өләшеү теләге уҡыусылар күңелендә һүрелеп ҡуймаһын ине инде...

Камила ҒӘЛИЕВА.

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

КЕМ КҮПМЕ АЛА?

Superjob порталы Рәсәйҙең ҙур ҡалаларында, шул иҫәптән Өфөлә иң ҙур эш хаҡлы биш вакансия исемлеген баҫтырып сығарҙы.

Башҡортостандың баш ҡалаһында иң төшөмлө эш - стоматология клиникаһында баш табип, айына кәм тигәндә 120 мең һум. Өфөлә һатыу өлкәһендә коммерция директоры ай һайын 100-120 мең һумға иҫәп тота ала. Өсөнсө урында - энергетика өлкәһендә коммерция директоры өсөн тәҡдим - 80-120 мең һум. Өфөлә ғинуарҙағы иң ҡиммәтле биш вакансия иҫәбенә консультант һәм системалы администратор ҙа инде. Уларҙың эше өсөн кәмендә 86 һәм 70 мең һум түләргә әҙерҙәр. Ғәҙәттәгесә, эш эҙләүселәр өсөн иң шәп тәҡдимдәр буйынса лидер - Мәскәү. Бында табип-репродуктологка яҡынса 0,5 миллион һум түләргә әҙерҙәр. Екатеринбургта хоҡуҡи мәсьәләләр буйынса кәңәшсе эше 300 мең һумға баһалана. Санкт-Петербургта маркетинг буйынса директор 200 мең һумдан кәм булмаған хеҙмәт хаҡына иҫәп тоторға хоҡуҡлы. Һамарҙа финанс директоры урынбаҫары вазифаһын кәмендә 150 мең һумға баһаланылар. Ҡаҙанда программист эше өсөн 100 мең һум түләргә әҙерҙәр. Силәбелә төбәк идарасыһы ошондай уҡ эш хаҡына дәғүә итә ала. Түбәнге Новгородта металл эшкәртеүсе ҡорамал һатыу буйынса төбәк менеджеры вазифаһына дәғүә иткән эш эҙләүселәр өсөн тәҡдим шундай уҡ суммаға - 100 мең һумға баһалана, тип йомғаҡ яһай аналитиктар.

ИҢ КӘРӘКЛЕ...

Плеханов исемендәге Рәсәй иҡтисад университеты менән берлектә Бөтә Рәсәй ғилми-тикшеренеү институты төҙөгән мониторинг буйынса, һөнәри һәм мәктәпкәсә белем биреү уҡытыусылары, шулай уҡ бухгалтерҙар һуңғы ике йылда илдә иң кәрәкле һөнәрҙәр иҫәбенә ингән.

Узған йылда бухгалтерҙар өсөн - 131 мең самаһы, һөнәри белем биреү уҡытыусылары өсөн - 101 мең, мәктәпкәсә белем биреү уҡытыусылары өсөн 96 меңдән ашыу вакансия урынлаштырылған булған. Бынан алда экспертлар 2019 йылда иң кәрәкле һөнәрҙәрҙе атағайны. Аналитиктар iOS һәм Android өсөн мобиль ҡушымталар әҙерләүселәргә, мобиль интерфейс дизайнерҙарына, һынау белгестәренә һорауҙың артыуын көтә. Экспертлар фекеренсә, ағымдағы йылда ла мәғлүмәттәр аналитиктарына һорауҙың артыуы дауам итә.

ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ

ХАЛЫҠ ШАЯН БЕҘҘЕҢ

Юмор тойғоһо булған кеше тормоштоң иң ҡатмарлы хәлдәрен дә еңел кисерә, тиҙәр. Яҙмыш ҡуйған һынауҙарға йылмая алыу, үҙеңдең һәм эргәндәгеләрҙең кәйефен күтәрә белеү талант инде ул. Ә сәхнәнән тороп кешене көлдөрөүе ҡыйынмы? Комедия жанры актрисаларына тамашасы нисек ҡарай? Ғөмүмән, юмор - ул ир-егеттәр донъяһы өсөн хас тигәнгә ышанырғамы? Ошолар тураһында Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы артисы Ғәлиә ТИМЕРБУЛАТОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.

Юмор һәм ҡатын-ҡыҙ - икеһе ике төрлө донъя тигәндәрен ишеткәнегеҙ бармы? Йәнәһе, ҡатын-ҡыҙ шаярта ла белмәй, уны аңламай ҙа. Юмор өлкәһендә эшләүсе актрисаларға ҡыйын түгелме?

- Бәлки, бында дөрөҫлөк барҙыр, әммә ҡатын-ҡыҙ актриса насар шаярта тигәнде ишеткәнем юҡ. Филармонияла 9 йыл "Ҡыҙыҡ-Мәҙәк" эстрада төркөмөндә эшләнем. Хәҙер ике миҙгел "Көлкө-шоу" эстрада миниатюралары театрында. Шаярыуҙарҙың темаһы бит тормоштан алына, үҙеңдә булған ҡайһы бер ғәҙәттәрҙе, ҡылыҡтарҙы сәхнәнән күреп, халыҡ ихлас көлә. Был үҙенә күрә тәрбиә лә инде. Үҙеңдән көлә белеү - һәләттәрҙең иң яҡшыһы тип иҫәпләйем. Монологтарҙы, интермедияларҙы төрлө ваҡытта Юнир Салауатов, Салауат Итбаев яҙҙы, Вәлит Илембәтовтың әҫәрҙәрен йыш ҡулланабыҙ, үҙебеҙ ҙә ҡайһы саҡта һыҙғылайбыҙ. Мин Марат Әминев яҙған ике монологты һөйләп йөрөйөм тамашасыға. Ир-ат ҡулы менән яҙылһа ла, улар бит күберәк беҙ - гүзәл заттар тураһында.

Ир-ат - ул мал табыусы. Ә донъяның тотҡаһы - ҡатын-ҡыҙ. Ул бер юлы бер нисә эште башҡара ала. Аш бешерә, эргәһендә дәрес эшләп ултырған балаһына ярҙамлаша, телефондан һөйләшә, кер үтекләй - һәм быларҙың барыһын да бер юлы эшләй. Ир-ат эше тураһында уйлай икән, ул башҡа нәмәне башына индерә лә алмай. Бер эшмәкәрлектән икенсеһенә күсеү өсөн дә уларға ваҡыт кәрәк. Донъя менән ир-ат идара итә тигәне менән килешһәк тә, ул донъя бит беҙҙең тирәләй әйләнә. Шуға, кемде һөйләһендәр ҙә, кем тураһында шаярһындар инде улар? Үпкәләмәйек, улар бит беҙҙе яратып ҡына шаярта.

Комедия жанрында уңышлы эшләнгән актерҙар, ғәҙәттә, тормошта бик етди кешеләр була? Һеҙ тормошта шаянмы?

- Шундай мәлдәр була, ҡайһы саҡта әйткән һәр бер һүҙеңдән тәгәрәп ятып көләләр. Махсус рәүештә лә шаярырға яратам былай. Беҙҙең халыҡ еңел булмаған тормошто шулай шаярып ҡабул итергә күнеккән. Һәр ауылдың даны йыраҡтарға таралған бер шаяны була. Тыуған ауылым - Ейәнсура районы Абзан ауылында ла бар ундайҙар. Ул һүҙ уйнатыу, ул башҡаһы - фольклорҙа ла, тормошта ла тулып ята, башҡорт теленең байлығына гел хайранмын. Әсәйем дә уратып-суратып, шаяртып һөйләшә. Ауылда берәй ғаиләлә ир менән ҡатын һыйышмай китһә: "Зәйнәб еңгәй, килеп кит әле", - тип саҡырып алалар. Шаярып, һөйләшеп ултырыуҙан тегеләр яҙылып, үҙ-ара ярашып ҡалалар икән. Атайым мәрхүм дә, мәрәкәсел ине. Ағайымдар ҙа шундай. Бына шулай, көлөп йәшәргә өйрәнһәң, еңелерәк үткәреп була бар ауырлыҡтарҙы.

Ләйсән ДАЯНОВА әңгәмәләште.

✓ *Ир булған ир - егерме биштә баш булыр, ир була алмаған ир - иллелә лә йәш булыр.*

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

ҮӘТ, ҠЫЗЫҠ!

ТӨН ОҘОНО - КӨЛКӨ

Халыҡ-ара Көлкө көнө алдынан Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Рәсәйҙең Сергей Михалков, Владимир Гиляровский, Владимир Набоков, Болгарияның "Алеко", Украинаның Николай Гоголь, Канаданың Эрнест Хемингуэй, АҠШ-тың Джек Лондон исемендәге халыҡ-ара премиялар лауреаты яҙыусы-сатирик Марсель Сәлимовҡа өс бөртөк кенә һорау бирҙек.

Мар. Сәлим менән Дэвид Перри VI Халыҡ-ара китап форумында. Стокгольм, 2017 йыл.

➔ Һеҙ гел юлда ла юлда... Арымайһығыҙмы?

- Мин бит әле йәш бабай, ҡайҙа ул арып тороу! Шуныһы ҡыҙыҡ, йөрөгән ерҙәремдә республикабыҙҙы, уңған һәм талантлы яҡташтарымды гелән маҡтап телгә алам. Үҙемдең сатирик икәнемде онотоп, ижтимағи-иҡтисади үҫештәребеҙ, милли мәҙәниәт һәм әҙәбиәтебеҙҙең уңыштары тураһында юмор теле менән һөйләп бирәм. Шанхайҙа ла, Стокгольмда ла, Греция менән Болгарияла ла башҡорттарҙың кем икәнен иҫтә ҡалырлыҡ итеп аңлата алдым шикелле. Шеварднадзе заманында Грузияның мәҙәниәт министры арҙаҡлы академик Валерий Асатиани, изге Тинос утрауында халыҡ-ара яҙыусылар форумындағы сығышымды тыңлағас, ҡулымды ҡыҫып: "Иң шәп доклад һинеке! - тигәйне. - Башҡортарҙың ниндәй халыҡ икәнен бик матур аңлаттың".

Сәфәрҙәрҙән күтәренке кәйеф менән, Башҡортостанымды һағынып ҡайтам. Сит илдәрҙә, сит ерҙәрҙә һәр саҡ яңы дуҫтар табам. Юҡ, мин бер ҡайҙа ла махсус рәүештә дуҫтар эҙләп йөрөмәйем, улар үҙҙәре осрай. Шулай ижади бәйләнештәр барлыҡҡа килә. Үткән быуат аҙағында Болгарияға барып, түбәм күккә тейеп ҡайтҡайным. Юмористик хикәйәм Халыҡ-ара "Алеко" конкурсында беренсе урынды алды. Ғәзиз Нәсин, Эрих Кёстнер, Генрих Бёлль, Людвиг Эшкенази, Уильям Сароян, Эрскин Колдуэлл, Морис Дрюон, Леонид Ленч кеүек исемдәре бөтә донъяға мәғлүм сатириктарҙан һуң был мәртәбәле бүләк, болгар гәзиттәре яҙғанса, "башкирец"ҡа эләкте. Башҡорттар тураһында йүнләп белмәгән болгарҙарға мин үҙебеҙҙең Урта Азияла түгел, ә Уралда икәнебеҙҙе төшөндөрҙөм.

➔ Сит илдәрҙә йөрөгәндә ҡыҙыҡ хәлдәргә лә тарыйһығыҙҙыр?

- Әлбиттә! Һәм бик йыш. Лондонда Евразия ижад гильдияһының китап серияһында инглиз телендә ҡырҡынсы китабым донъя күргәс, уның исем туйын үткәрер өсөн Швецияның баш ҡалаһы Стокгольмға китап форумына барғайным. Унда гильдияның беренсе рәйесе, күренекле инглиз шағиры Дэвид Перри иң элек материктың төрлө тарафтарынан йыйылған яҙыусылар менән танышып сыҡты. Һәр кем үҙенең ижады, тыуған төйәге, милли мәҙәниәте һәм әҙәбиәте хаҡында һөйләне. "Минең тыуған ерем, хөрмәтле Дэвид әфәнде, Европаның үҙәгендә түгел. Һеҙҙең кеүек, беҙ ҙә Европа ситендә йәшәйбеҙ, - тинем. - Ләкин Европа Бөйөк Британиянан түгел, ә Башҡортостандан башлана. Көньяҡ Уралда тормош көткән боронғо ата-бабаларыбыҙ бик тырыш һәм булдыҡлы, киң күңелле, асыҡ сырайлы кешеләр булған. Ғалимдар әйтеүенә ҡарағанда, улар Ер йөҙөндә беренселәрҙән булып тәгәрмәс уйлап сығарған хатта. Тағы ла шул, Дэвид туған, башҡорттар менән инглиздәр бер гаплогруппаға ҡарай, тип иҫбатлайҙар. Телдәребеҙҙә бер төрлө өндәр булыуы ла, башҡорттар менән инглиздәрҙең һөтлө сәй яратыуҙары ла беҙҙең халыҡтарҙың туғандашлығы хаҡында һөйләй түгелме һуң?" Күрәм, Дэвидтың ауыҙы йырылған. "Эйе, тап шулай!" - ти, һүҙемде ҡеүәтләп. Мин иһә һаман үҙемдекен бөгәм: "Бөтәбеҙгә мәғлүм бер бөйөк инглиз ғалимы, кешеләр маймылдан яралған, тип раҫлаған. Ҡайһы бер инглиздәр, бәлки, ысынлап та маймылдан барлыҡҡа килгәндер, әммә ләкин Һеҙ, Дэвид дуҫҡай, һис тә ундай кешегә оҡшамағанһығыҙ. Һеҙ, моғайын, беҙҙең боронғо ата-бабаларыбыҙҙан - пра-пра-прабашҡорттарҙан яралғанһығыҙҙыр". Шул саҡ шаярыуҙы аңлаған хуш күңелле инглиз: "Эйе, мин башҡорттарҙан яралдым!" - тип, ҡосаҡлап алмаһынмы. Евразия ижад гильдияһының беренсе рәйесе Дэвид Перри аҙаҡ былай тип яҙҙы: "Евразия ижад гильдияһы съезында сығыш яһап, Марсель Сәлимов, Урал тауҙары Европа менән Азияны айырып түгел, ҡушып тора, тигәйне. Үҙемдән өҫтәп шуны әйтәм: Уралдағы билдәле был Рәсәй яҙыусыһының позитив юморы нәҡ шулай Евразия халыҡтарын берләштерә".

Форумда ул мине ҡосаҡлап ҡына йөрөттө. Ҡыҙыҡ бит, әй! Бөйөк Британияның әлеге хужалары һәм уларҙың ялағай ярандары, ялғансы сәйәсмәндәре, һатлыҡ журналистары беҙҙе күрә алмай, илебеҙгә яла яғыуҙан туҡтамаған был заманда инглиз яҙыусыһының башҡорт сатиригын шулай дуҫтарса йылы ҡабул итеүе үҙе бер мөғжизә түгелме ни!

➔ Ә быйыл 1 апрелдә ниндәй мөғжизә көтөлә?

- Өфөлә беренсе тапҡыр Көлкө көнөндә - "Көлкө төнө"! Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ғайса Хөсәйенов әйткәнсә, ғүмер буйы осло "Һәнәге" менән элеп алып, һелкеп һалыусы "көләссиҡ" бабайығыҙға 100, йәғни 70+30 тулыу сәбәпле, "Башҡортостан" Дәүләт концерт залында күңелле күрешеүҙәр, һөйкөмлө һөйләшеүҙәр, шаярып көлөшөүҙәр, ҡосаҡлашып үбешеүҙәр көтә барыһын да...

Әйткәндәй, Ҙур залда төнө буйы хәҙерге ҡыҙыҡ замандың теп-тере көләссиге Марсель Сәлимов менән Илнур Юламанов, Гөлзәмиә Ситдикова, Лилиә Фәтихова, Хәким Мортазин, Алтынай Хамматова, Рим Хәсәнов, Рәйес һәм Линар Ханнановтар, Фәнүнә Сиражетдинова, Радик Динәхмәт һ.б. шәп үә шәпле сәхнә оҫталары менән аралашырһығыҙ. Килегеҙ, рәхәтләнеп көлөгөҙ!

ХОККЕЙ

САЛАВАТ ЮЛАЕВ хоккейный клуб

АЛҒА, ЮЛАЕВСЫЛАР!

"Салауат Юлаев" хоккей командаһы 2018-2019 миҙгел уйындарының финалына сыҡты. "Автомобилист" менән алышта Өфө командаһы егеттәре көйәрмәндәр яратҡан һәм миҙгел буйы көткән уйын күрһәтте.

Әле күптән түгел генә команданың баш тренерын отставкаға ебәреүҙе талап итеп яу ҡуптарғандар бөгөн килеп Николай Цулыгинды тик яҡшы һүҙ менән генә телгә ала. Ысынлап та, миҙгел буйына юлаевсылар "Йәшел машина" исемен әллә ни аҡлай алманы, шулай ҙа Гагарин кубогы өсөн алышҡа барып етте. Үҙҙәрен көсһөҙҙәр рәтенә ҡуйыусыларға "Салауат Юлаев" Магнитогорскиҙың "Металлург"ын һәм Екатеринбургтың "Автомобилист"ын ҡыйратып, ҡаты яуап бирҙе.

Артабан алыш "Авангард" менән дауам итә. "Салауат Юлаев" хоккей командаһының был көслө команда менән уйындарын хатта хоккей менән ҡыҙыҡһынмағандар ҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу менән көтә. Ысынлап та, был уйын миҙгелендә үҙҙәрен иң көслөләре итеп танытҡан әлеге командаларҙың ҡыҙыу, дарманлы, көсөргәнешле уйын күрһәтәсәктәре көн кеүек асыҡ. Еңеүҙең кемгә йылмайыуын асыҡлауға күп ҡалманы. Алға, юлаевсылар!

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.

АҠЫЛ-ҠАҘНА

Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

ТӘРТӘҺЕ ҠЫҪҠА, ТИП...

аттың башын киҫмәйҙәр

Ир булған ир - егерме биштә баш булыр, ир була алмаған ир - иллелә лә йәш булыр.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Байҙарҙың юҡ-барға аҡса сарыф итеүен күреү нисек йәл! Уларға ярҙам итеп тә булмай бит - шуныһы ҡыҙғаныс.

(Пьер Данинос).

Бер аҡһаҡалдан: "Ни өсөн йыланды аҡыл символы тип йөрөтәләр?" тип һорағандар. "Сөнки ул хәҡиҡәт кеүек әсе саға", - тип яуап биргән аҡһаҡал.

(Су Дун-по).

Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер остаз үҙенең уҡыусыһы булған бер иргә шулай ти: "Бел шуны, бары тик бер Хоҙай ғына һинеке, башҡа бер кем дә һинеке түгел". Ир аптырай һәм остазынан: "Ә мине яратҡан, минең тирәла хәстәрләгән, мин юҡта үҙҙәрен бәхетһеҙ итеп тойған әсәйем менән ҡатыным минеке түгелме ни?" - тип һорай. "Һин яңылышаһың, - ти остаз. - Әсәйең йә ҡатының һинең өсөн ғүмерен бирергә әҙер икәненә бер ваҡытта ла ышанма. Һин уларҙы һынай алаһың. Бар, өйөңә ҡайт һәм ҡаты ауырығанға һалыш. Шунда мин килермен һәм артабан ни эшләргә кәрәк икәнен әйтермен..." Ир остазы ҡушҡанса эшләй. Ауырып киткәнгә һалышҡас, өйгә врачтар саҡырталар. Тик уларҙың береһе лә был кешегә ярҙам итә алмай. Әсәһе һәм ҡатыны, балалары илай башлай. Ошо мәлдә өйгә остаз килә һәм: "Был бик етди сир. Мин ауырыуҙы ҡотҡарыуҙың бер ысулын да күрмәйем, тиер инем... Әммә кемдер уның өсөн үҙ ғүмерен ҡорбан итһә, уны ҡотҡарып була", - ти. Уның был һүҙҙәренән һуң ғаилә ағзаларының барыһының да йөҙөндә ҡурҡыу барлыҡҡа килә. Остаз ауырыуҙың ҡарт әсәһенә төбәлә һәм: "Ғаиләне туйындырыусы, берҙән-бер таянысығыҙ булған улығыҙҙы юғалтһағыҙ, һеҙҙең өсөн йәшәүҙең мәғәнәһе юғала, тип аңлайым. Шулай булғас, улығыҙ өсөн үҙ ғүмерегеҙҙе ҡорбан итһәгеҙ, уны ҡотҡарып ҡалып булыр ине. Быны һеҙ эшләмәһәгеҙ, кем эшләһен?" - ти. Ләкин ҡарт әсә күҙ йәштәренә быулығып, былай ти: "Эйе, улымды ҡотҡарыу өсөн мин теләһә нимә эшләргә әҙер. Ләкин мин бынауы бәләкәй ейәндәремде нисек ташлайым? Мин һеҙҙең тәҡдимгә ризалаша алмайым..." Остаз менән ҡәйнәһе араһындағы һөйләшеүҙе тыңлап торған килен дә шулай уҡ күҙ йәштәренә төйөлөп, үҙенең ата-әсәһенә мөрәжәғәт итә: "Һеҙҙе уйлап, мин үҙемде ҡорбан итеп килтерә алмайым..." - ти. Шулай һәр береһе бер сәбәп табып, әлеге ир өсөн ғүмерен биреүҙән баш тартып бөткәс, остаз уҡыусыһына ҡарап былай ти: "Йә, күрҙеңме инде, берәү ҙә һинең өсөн ғүмерен бирергә ризалашманы. Алланан башҡа берәү ҙә һинеке түгел, тигәндә ниҙе күҙҙә тотҡанды аңланыңмы инде хәҙер?.."

5822189111006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

Мөхәрририәт: Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

Телефондар:

Баш мөхәррир	**253-25-44**
Баш мөхәррир урынбаҫары	**246-03-24**
Бухгалтерия	**246-03-23**
Хәбәрселәр	**252-39-99**

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 29 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 252